*Тормош ҡануны шулай: бер ишек ябыла икән, икенсеһе асыла. Ләкин бөтөн бәлә шунда: беҙ ябылған ишеккә ҡарап тороп, асылғанына иғтибар итмәйбеҙ.*

*(А.Жюльен).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 - 31 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №52 (418)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Мөғжизә көткәндәргә...



мөғжизәләр килһен

5

Ышыҡ урын эҙләйем

Урындыҡ аҫтында, әүеҫлек башында, ҡыуышта, артҡы партала, сәхрәлектә, аҡсала...



6-7

Кәзәнең дә һаҡалы бар,



8-9 Ләкин ул аҡһаҡал була алмай...

Таулыҡайҙар һуғым һуя



11

14 ТВ-программа

## Ҡуян йылы

Өйрәнелеп киткән йөрөүҙәре
Ғорур ғына Барыҫ юлынан.
Аяҡ баҫырға ла ҡыймай торам
Елеп килгән Ҡуян йылына.
Улай тиһәң, килгән, киткән йылдар
Бер-беренә игеҙ оҡшаштар:
Күперелеп ята юлдарымда
Аҡ ҡуяндай ап-аҡ йомшаҡ ҡар.
Ҡуян йылы ап-аҡ ҡар сафлығын
Уй-хистәргә һипһен ҡәҙерләп;
Күперелеп ятҡан аҡ мамыҡтың
Йомшаҡлығы күсһен бәғергә.
Ошо йылда беҙгә һеңеп ҡалһын
Аҡ ҡуяндан нәфис етеҙлек;
Шул етеҙлек етһен иң-иң изге
Хыялдарға барып етерлек.
Аяҡтарға ҡуян ныҡлыҡ бирһен,-
Еңел түгел юлдар ҡаршыла:
Бер типкәндә, башы сәсрәп ҡалһын,
Ташлағанда ҡаза ҡарсыға.
Ҡуян йылы! Һиҙгер тойһаҡ ине
Донъя шауын, ваҡыт осҡанды;
Үткерлеген бирсе күҙҙәреңдең
Айырырға дуҫты, дошманды.
Булһаҡ ине Ҡуян йылында ла,
Барыҫ һымаҡ, оло теләкле,
Тик дошмандар ғына ҡалһын булып,
Әлеккесә, ҡуян йөрәкле!..

Сафуан ӘЛИБАЕВ.



ЙӘН ӘРНЕП...

**Яңы йыл - ололарҙың һәм балаларҙың иң яраткан байрамы яҡынлаша. Әммә Рәсәйҙә тап ошо ваҡытта эскелектең иң ауыр эҙемтәләре күҙәтелә: үлтереүҙәр, йәрәхәтләнеүҙәр, туңыуҙар, янғындар һәм башка алкоголь һәм наркотиктар ҡулланыуға туранан-тура бәйләнеше булған күңелһеҙ ваҡиғалар. Экспертар билдәләүенсә, илдең йөҙҙәрсә мең граждандары эскелек менән күңел асыуҙарҙың ҡорбанына әүерелә. Быға ил халҡы сәләмәтлегенең Яңы йыл ялдарынан һуң да дауам иткән дөйөм насарайыуын да, ире, ҡатыны, балалары эсеүгә бәйле ғаилә низағтарын да өҫтәргә кәрәк.**

# БАЙРАМДАН ҺУҢ... бахмур, ағыуланыу, фажиғәләр китәме?

Был көндәрҙә радио һәм телеэфирҙар, баҫма һәм интернет матбуғаты биттәре байрам табынына менеп ҡунаҡлай торған эсемлектәрҙе рекламалау менән була. Студияларҙа төбәктәрҙең беренсе кешеләре, билдәле йәмәғәт эшмәкәрҙәре, эшҡыуарҙар мотлаҡ ҡулдарына шампан шарабы тултырылған бокал тотоп, Яңы йыл ҡотлауын еткергән сюжеттар яҙыла. Төрлө-төрлө хеҙмәт коллективтарында етәкселәр һәм ябай хеҙмәткәрҙәр алда торған рәсми корпоратив фуршеттарҙың һәм кисәләрҙең алкоголь ассортименты буйынса ҡыҙыу фекер алыша.

Бер үк ваҡытта быңдай күңел асыуҙарҙың фажиғәле эҙемтәләренә "Тиҙ ярҙам" табиптары, дауаханаларҙың токсикология бүлексәләре, наркологтар, янғын һүндереүселәр, милиция, судмедэксперттар, һәм, ниһайәт, мәйетханалар ҙа әҙерләнә. Эйе, Яңы йыл байрамдарында алкоголь һәм ерләү бизнесы тағы ла "алтынланасаҡ".

Әммә ни өсөн йәмғиәт һәм власть әлеге ваҡытта тәү сиратта киң мәғлүмәт саралары аша һеңдерелгән эскелек мәжлестәре ығы-зығыһына ҡыҫылмай, ситтән генә күҙәтә? Был алкоголь ҡулланып үҙеңде юҡҡа сығарыу ҡасанға тиклем дауам итер?

Беҙ Башҡортостан Республикаһы етәкселәренә, чиновниктарға, депутаттарға, сәйәси партияләр етәкселәренә, федераль ведомстволар башлыҡтарына сираттағы эскелек мәхшәре ҡорбанына әйләнеүе мөмкин булған йөҙҙәрсә, меңдәрсә кешеләрҙең ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн анаҡ саралар күрергә саҡырып мөрәжәғәт итәбеҙ. Быныӊ өсөн тәү сиратта улар үҙҙәре Яңы йылда айыҡ, алкоголһеҙ ҡаршы алыу өлгөһө күрһәтергә тейеш, тип уйлайбыҙ. Бөгөн "Айыҡтар исемлеге"ндә юғары вазифалы чиновниктарҙы һәм сәйәсмәндәрҙе лә күрергә мөмкин. Мәҫәлән, Киров өлкәһе губернаторы Н. Белых 2010 йылды ҡаршылағанда уҡ халыҡ алдында спиртлы эсемлектәрҙән баш тартыуы тураһында белдерҙе. Ә ябай халыҡ һәр ваҡыт етәкселәр, абруйлы шәхестәр өлгөһөн хуплай һәм күтәреп ала. Халыҡты насар ғәҙәттәренән арындырыр өсөн мәжбүр итергә түгел, ә яҡшы өлгө күрһәтеп, үҙ артыңдан эйәртергә генә кәрәк.

Беҙ киң мәғлүмәт саралары, радио, телевидение етәкселәренә, журналистарға тормошҡа айыҡ ҡараш формалаштырыуҙа үҙ яуаплылыҡтарын аңларға саҡырып мөрәжәғәт итәбеҙ.

Беҙ мәғариф ойошмалары етәкселәрен, педагогтарҙы әленән-әле уҡыусылар менән "Айыҡлыҡ дәрестәре" үткәрергә саҡырабыҙ.

Беҙ киләһе 2011 йыл ысынлап та йәмғиәтебеҙҙе айыҡтыр алыр эшлекле һәм етди ҡарарҙар ҡабул итеү йылы булырына ышанабыҙ.

**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәтселек хәрәкәте.**

ИШАРА

# УНЫ САҠ ҠЫНА ҠУРҠАҠ, ТИҘӘР.

## Юҡ, ул сос һәм һаҡ, имеш...



**Ҡуян күп халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында ыңғай персонаж булып һанала. Беҙҙә лә уны яраталар. Был йәнлек бала күңелендә матур тойғолар менән генә үҙ урынын алған, тиһәм, бер ҙә яңылышмам кеүек. Бәләкәй саҡта барыбыҙ ҙа яратып ҡараған "Ну, погоди!" йәнһүрәте үҙе генә ни тора! Балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә яратып ҡарай был йәнһүрәтте. Төрлө мажараларға тарый-тарый уҫал бүренән ҡасҡан ҡылый күҙ барыбыҙҙы ла шатлыҡҡа күмеп, һәр ваҡыт еңеүсе булып ҡала.**

Балалар баҡсаһында ла ташламай беҙҙе ҡуян. "Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян, беҙгә ҡунаҡҡа килгән, ҡойроғо ҡыҫҡаҡ ҡына, ҡолағы ергә тейгән", - тип һәйләп, ҡайһыбыҙ ғына Ҡыш бабайҙан бүләк алмаған икән! Ә инде Яңы йыл кисәһендә ятлаған "Ҡыш бабай менән ҡуян икеһе лә аҡ ҡына. Ҡыш бабай ҡурҡаҡ түгел, ҡуян ҡурҡаҡ саҡ ҡына", тигән шиғыр юлдары күптәребеҙҙең күңелендә бәхетле мәктәп йылдары иҫтәлеге булып һаҡлана.

Йәнһүрәттә бүренең танауына сиртеп, ихлас сабып йөрөгән "йәйен һоро, ҡышын аҡ, уға шулай яҡшыраҡ" ҡуяндың тормошо ысынында тәбиғәттә нисегерәк икән - мәҡәлә ошо турала. Әлбиттә, ысынбарлыҡ йәнһүрәттән айырыла. Бер нәмәһе тура килә - ҡуян дошманынан һәр ваҡыт ҡасып ҡотола. Ул үҙе йыртҡыс түгел, күберәген үлән менән туҡлана. Уның ҡарауы, күп йыртҡыс ҡуян итен бик ярата. Шуға күрә һәр ваҡыт ихлас сабып йөрөргә тура килә аҡ ҡуянға. Бары бүренең танауына сиртергә генә ваҡыты ҡалмай. Уныһы мөһим дә түгел, йән күпкә ҡәҙерлерәк. Шуға күрә ҡылый күҙ ҡурҡыныс янау менән тиҙерәк шылыу яғын ҡарай.

Әйткәндәй, ҡуянды бушҡа ғына ҡылый күҙ тип атамайҙар. Иғтибар итегеҙ әле, бүренең, айыуҙың, һеләүсендең һәм башҡа йыртҡыс хайуандарҙың күҙҙәре алға төбәлгән. Алда ҡасып барған ҡорбанына, беҙҙең осраҡта ҡуянға төбәлгән улар. Үҙ сиратында, тәбиғәт ҡуянға ла тере ҡалырға мөмкинселек бирә - ул алға ҡарай саба, ә шул уҡ ваҡытта, башты бормайынса ғына, артҡа ла ҡарай ала. Уның күҙҙәре баштың сикә өлөшөндә урынлашҡан һәм улар бер аҙ алғараҡ сығып тора. Шуға күрә уның күҙҙәре ҡылый булып сыға. Ындай күҙҙәр ҡуян ғүмерен бик күп тапҡырҙар һаҡлап ҡалғандыр. Дошмандың хәл иткес һөжүмен ул күреп өлгөрә һәм ҡырҡа йә ситкә, йә өскә һикерә. Ҡуян бик шәп йүгерә - тиҙлеген сәғәтенә 50 км-ға еткерә ала. Шуға күрә уны барыһы ла тура юлда ҡыуып етә алмай. Бары тик һунар этенең генә ҡыуып етеүе бар. Башҡаларға иһә уны боҫоп ултырып, аңдып ҡына тоторға тура килә. Ерҙәге дошмандарға ҡарағанда, һауанан һөжүм итеүселәр күпкә ҡурҡынысыраҡ. Яландағы бөркөт, урмандағы ябалаҡ - уның тере дошмандары.

Баҙнатһыҙ кешене беҙ, ҡурҡаҡ ҡуян, тигән булабыҙ. Минеңсә, ҡуян "саҡ ҡына ҡурҡаҡ" түгел, ә ул һәр ваҡыт һаҡ һәм сос. Ҡуянды "ергә тейгән ҡолағы" һәм көслө аяҡтары ғына ҡотҡара ала. Ләкин ошо аяҡтары уны ҡайһы ваҡыт "һатып" та ҡуя. Быны беҙҙең тел һымаҡ - ул дуҫ та, шул уҡ ваҡытта дошман да. Миҫалдар бихисап, был турала айырым яҙып була, әммә ваҡыт тар - беҙҙе ҡуян көтөп тора. Эш шунда: ҡуяндың тир биҙҙәре уның бармаҡтары араһында урынлашҡан. Тир еҫе бик көслө. Етмәһә, эҙҙә оҙаҡ һаҡлана. Һунар эте, әйтәйек, был еҫте 8 сәғәттән һуң да тоя ала. Әммә был турала ҡуян үҙе лә белә, шуға күрә ул тегеләй-былай сабып йөрөп, бик күп ара үтеп, эҙ ялышытыра. Тәүлегенә уртаса 2-3 км ара сабырға тура килә уға. Нишләйһең, тере ҡалам тиһәң, сабаһың инде.

Шулай ҙа тәбиғәттә күптәр ҡуянға осраҡлы рәүештә һунар итә. Әләкһә - шәп, әләкмәһә лә артыҡ ҡайғырған юҡ. Икенсе юлы күрмәгәнен күрһәтербеҙ әле. Ә бына һеләүһен ҡуянһыҙ йәшәй алмай, сөнки уның төп аҙығы булып ҡуян ите иҫәпләнә. Икмәк булһа, йыр ҙа булыр, тигәндәй, ҡуян күп урындарҙа һеләүһен йырлап донъя көтә. Шуныһы һәйбәт: тәбиғәт ҡуяндарҙың һаһын кәметмәй. "Ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған", тип бушҡа әйтмәгәндәр. Йыл әйләнәһенә ул өс тапҡыр бала таба. Тәүге бәпестәр март айында тыуа. Уларҙы кеше, шаяртып, "ҡар ҡуянҡайҙары" тип атай. Икенселәре иһә йәй осоронда тыуа - былары "йәшел үлән ҡуяндары" тип исемләнә. Көҙгә табан тағы берҙе бәпесләй ҡуян. Былары "һары япраҡлылар" исемен алған. Бер тапҡанда 4-8 бәпәйе була. Ауырлыҡтары ни бары 100 грамм самаһы булған ҡуянҡайҙар ҡүҙалмай ултырып ҡына үҙен һаҡлай алалар. Дошмандары уларға осраҡлы рәүештә килеп төртөлгәндә лә улар ҡасмайҙар. "Әсәләр көтәләр уларын" тигәндәй, бында, киреһенсә, шым ғына "балалар көтәләр әсәйҙәрен". Улары төнөн 1-2 мәртәбә килеп, балаларын имеҙеп китәләр. Күп осраҡта улары үҙ балаһы булмауы ла бар. 8-10 көндән һуң ҡуянҡайҙар үлән ашай башлай, ә шулай ҙа 20-30 көнгә хәтлем барыбер әсә һөтө төп аҙыҡ булып ҡала. 1 ай самаһы үткәс, ҡуянҡайҙарҙың хәүеф-мажараларҙан торған үҙ аллы тормошо башлана. Ҡышты унышлы үткәргәндәре оло ҡуяндар сафын тулыландыра. Бер уйлаһаң, ҡуян ғүмере апаруҡ оҙон ғына - ул 8-12 йыл самаһы тәшкил итә. Шулай ҙа ниндәй өлөшө "пенсионер" булып тормоштан китәлер - быны тәбиғәт үҙе генә белә инде.

Тиҙҙән Яңы йыл башланып, дилбегәне үҙ ҡулына Ҡуян алыр. Киләсәктә тормоштар ниндәй генә булыуға ҡарамаҫтан, уның ағышында юғалып ҡалмайыҡ, ҡуян һымаҡ сос һәм һаҡ булайыҡ. Ҡуянға уҡ еткереп булмаҫ, шулай ҙа Яңы йылда милләтебеҙ күп йәш бәпәйҙәр менән тулыланһын, улар матур ғаиләләрҙә үҫһендәр. Үҫкәндәре, мәле еткәндәрен әйтәм, әсә һөтөнән айырылып, ыңғай ғына үҙ аллы тормоштарын башлап ебәрһен. Тормош һуҡмағында һағалап торған һынауҙарҙан ҡасмайыҡ, уларҙы унышлы хәл итергә тырышайыҡ. Уңыштар юлдаш булһын барыбыҙға ла!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Дәүләт Советы Президиумы составына инде. Президиум Дәүләт Советының эш планы, шулай уҡ уның сираттағы ултырышының көн тәртибен ҡарай һәм уның эш планының, ҡарарҙарының нисек атҡарылыуын анализлай. Дәүләт Советы Президиумы составын Рәсәй Президенты билдәләй һәм ул һәр ярты йыл һайын үҙгәртелә.

✔Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев ҡушыуы буйынса БР Президенты Хакимиәте менән берлектә Стәрлетамаҡта, Салауатта, Нефтекамала, Октябрьскийҙа электрон ҡабул итеү бүлмәләре асыласаҡ. Электрон ҡабул итеү бүлмәһе - ул урындағы үҙидара органдары биналарында урынлашҡан абонент пункты ул.

✔Рәсәйҙең Төбәктәр үҫеше министрлығының Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ департаменты Рәсәй Федерацияһы субъекттары башҡарма власть органдарының 2010-2011 йылдарҙың көҙгө-ҡышҡы осороңа эшмәкәрлеге һөҙөмтәләлеген баһаланы. Рейтингта Башҡортостан дүртенсе урынды яуланы.

✔Аҡмулла көндәре уның исемен йөрөткән Башҡорт дәүләт педагогия университетында төрлө саралар менән башланып, мәғрифәтсе-шағирҙың тыуған яғы Миәкәлә "Аҡмулла нәсихәттәре" республика фольклор байрамы менән тамамланды. Байрамда район һәүәҫкәрҙәре менән бергә республикабыҙҙың төрлө райондарынан һәм ҡалаларынан килгән сәсәндәр һәм фольклор төркөмдәре ҡатнашты.

✔Баку ҡалаһында "ТӨРКСОЙ" Халыҡ-ара төрки халыҡтары мәҙәниәте ойошмаһы тарафынан "Төрки халыҡтарының музыка ҡоралдары" Халыҡ-ара симпозиумы ойошторолдо. Башҡортостандан унда Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры Айрат Ҡобағошов ҡатнашты һәм ҡурайҙа уйнау традициялары тураһында доклад менән сығыш яһаны.

✔Ванкуверҙа үткән ҡышҡы Параолимпия уйындарының һөҡлаңғыс геройы Ирек Зарипов Бөтә Рәсәй конкурсында "Адаптив спортта йыл спортсыһы" тигән номинация еңеүсеһе тип билдәләнде. Бүләкләү 22 декабрҙә Мәскәүҙә үтте.

ТАРИХЫН ЮЛЛАП...

**Беҙҙең ауылда бер нисә зат кешеләре йәшәп, уларҙың һәр ҡайһыһының ара атамалары бар. Әйтәйек, "Айыуҙар", "Ҡыуыҡтар", "Ҡыйрауҙар", "Һыуыҡ ҡаҙандар", "Иҫһеҙҙәр", "Кәршеләр", "Байлар" һ.б. Бына беҙҙең араны, мәҫәлән, "Ҡуяндар" тип атайҙар. Элегерәк беҙҙе "ҡуян" тип үсекләһәләр, һеркәбеҙ һыу күтәрмәй, ҡыҙып китеп, улай тип өндәшкән кешене баҫтырып китер инек, хәҙер иһә, арабыҙ атамаһының тарихын белгәс, башыбыҙҙы юғары күтәреп, эре йөрөйбөҙ.**

# ҺӘР АРАНЫҢ АТАМАҺЫ БАР...

## Беҙҙеке - ҡуяндар

Ни өсөн арабыҙҙың "Ҡуяндар" тип аталыуының XX быуатҡа бәйле тарихы шулайыраҡ: имеш, ауылыбыҙҙа "Мулла олатай" тип хөрмәтләп иҫкә алынған Мөхлис олатайыбыҙ ҡырпаҡ ҡарҙа ҡуянға һунарға сыҡҡан. Тау үҙәгенән барып, яланға юл тартҡан ергә килеп еткәс, ни күҙе менән күрһен, тау янындағы тигеҙлектә иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡуян көтөүе йөрөп ята икән. Олатайыбыҙ ергә ятҡан да, тегеләрҙе һанарға тотонған: "Берәү, икәү, өсәү... унау, илле, етмеш биш, һикһән һигеҙ, туҡһан туғыҙ, йөҙ..." Олатай уйға ҡалған: әгәр ҙә кушкөбәгенән ут асып ебәрһә, уға кәмендә бер, иң күбендә ике ҡуян ғына аулап алырға мөмкин булаҫаҡ. Ҡалған ҡуяндар иһә, мылтыҡ тауышын ишетеү менән, ҡолағын һыртына һаласаҡ.

Ана шулай, атыр-атмаҫ булып ятҡан-ятҡан да Мөхлис олатай, ауылға ҡайтып, барлыҡ һунарсыларҙы алып килергә ҡарар иткән. Бер аҙҙан ауылыбыҙҙың иллеләп ир-аты һәр ҡайһыһы мылтыҡтарын тотоп килеп, ҡуяндарға тоҫҡап, "ут асыу позицияһы"на ятҡан. Ятҡан да, олатайҙың ымы буйынса көлләһә ҡуян көтөүенә залп биргән. Артабан нимә булған, тиһегеҙме? Күмәк ир-ат ергә тәгәрәп ятып, көлөргә тотонмаһынмы бер саҡ. Баҡтиһәң, олатайҙың 100 баш ҡуян тип, ир-атты йәүкәләп алып килгән "ҡуяндары" ата ҡылғандарҙың башына ҡунған өрпәк ҡар булып сыҡҡан икән.

Шул мәлдән алып беҙҙең араны "Ҡуяндар" тип атап йөрөтәләр, имеш. Арабыҙға ҡараған берәр ғаиләлә сабый тыуһа йә беҙҙең арға берәр килен төшөп, Үтәбаев фамилияһын алһа, уны: "Ҡуяндар 99 йән ине, 100-гә тулды", - тип мәрәкәләйҙәр. Мөхлис олатай менән булған был сәйер хәл ысын булған хәлдә лә, беҙҙең араның "Ҡуяндар" тип аталып йөрөтөлөүенең тарихы тағы ла боронғораҡ заманға барып тоташа. Кем белә, Мөхлис олатай менән булған был хәл, бәлки, "Ҡуяндар" араһының "100-сө ҡуян", тигән өлөшөн генә барлыҡҡа килтергәндер.

Ололарҙың, шул иҫәптән атайымдың һәм уның бер туған ағалары - Мөбәрәк, Басир олатайымдар һөйләүе буйынса, борон-борондан һәр бер ара тегеи йәки был йәнлеккә тик үҙҙәре генә һунар итергә хоҡуҡлы булған. Был хоҡуҡ яҙылмаған ҡанун нигеҙендә ырыуҙың һәм араның йәшәү рәүеше кимәлендә нығытылған. Әйтәйек, берәүҙәр - айыуға, икенселәр - бүрегә, өсөнсөләр - мышыға, дүртенселәр - бурһыҡҡа, бишенселәр һеләүһенгә һунар иткән. Ә бына бындай бүленештең ниндәй нигеҙҙә тыуғанлығын бер нисек тә аңлата алмайым. Әммә фаразлап ҡарарға мөмкиндер.

Һәр бер һунар йәнлеге һунарсының ниндәйҙер сифаттарға эйә булыуын талап итә. Әйтәйек, яндырай кеше бер ваҡытта ла айыуға йә бүрегә һунар итә алмайҙыр ул. Айыубүрене аулар өсөн иң тәүҙә һалҡын ҡанлылыҡ кәрәктер. Әйтәйек, яндырайланып, атыңды ҡайыҙлап, бүре артынан ҡыуа төшһәң, бер сәғәттә үк атыңды арытып йә яндырып ҡуйыуың бар. Бүрене тәүлектәр буйына ҡыуалар. Һеләүһенгә йә төлкөгә һунар итер өсөн һығылмалы аҡыл, нәҙәкәтле аң кәрәк. Ә бына ҡуянға һунар итер өсөн, минеңсә, тәүәккәллек тә, "алабарманлыҡ" та кәрәктер. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, һәр араның, һәр заттың үҙ һунар йәнлеге була, тигәнде аңлап булалыр. Әйткәндәй, һәр ырыуҙың үҙ ҡошо булыуының да нигеҙендә ошоға оҡшашыраҡ мәғәнә ятыуын да төҫмөрләргә булалыр.



Икенсенән, һунар борон-борондан атай-олатайҙарыбыҙҙың көнитмеше, йәшәү рәүеше һәм сығанағы булғанын да иҫәпкә алһаҡ, һәр араның аусылары һәм һунарсылары йәнлектәрҙе һәм уларға һунар биләмәләрен бүлешеп алманымы икән? Әйтәйек, бер ырыуҙың йә араның аҫаба ере яланға тура килде икән, ти, ә ялан ерҙә бүре, һуйыр йә һеләүһен булмай. Йәки булмаһа, икенсе бер ырыуҙың йә араның аҫаба ере урманға тура килә, ә унда иһә үҙ йәнлектәре һ.б.

Нисек кенә булмаһын, беҙҙең араның аусылары ҡуянға һунар иткән һәм башҡа аралар һунарсылары беҙҙең нәҫел йәнлегенә ҡағылмаған. Атай-олатайҙарыбыҙҙың төп һунар биләмәһе хәҙерге Ҡуянтау ауылы янындағы Ҡуян тауы иҫәпләнгән. Атайымдың һөйләүе буйынса, беҙҙең Халис ҡартатай шул тауға бер барғанында бер юлы 15-20 баш ҡуян алып ҡайта алған. Әлбиттә, ул был һунарға мылтыҡ тотоп сыҡмаған. Ул тәүҙә ошо тауҙа шырлыҡ араһындағы ҡуян һуҡмаҡтарына тоҙаҡтар ҡороп сыҡҡан да, ҡулсаға беркетелгән ҡалайҙарҙы шалтыратып, шырлыҡтың әле был, әле теге осонан ҡуяндарҙы ҡыуған. Һәлпеш ҡолаҡтар тоҙаҡтарға эләгә торған, ҡартатайҙың тоғона тула торған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәҙерге Ҡуянтау ауылын беҙ хаҡлы рәүештә Үтәбаев фамилияһын йөрөтөүсе "Ҡуяндар"ҙың баш ҡалаһы тип атай алабыҙ. "Зайцегорск" тип тә атай уны Ҡуянтау халҡы. Унда бөгөн Баймаҡ тәжрибә хужалығы урынлашҡан. Хужалыҡ етәксеһе - Илшат Хәмитов. Тәжрибә хужалығы йыл һайын районда ауыл хужалығы продукцияларын етештереү буйынса ҙур уңыштарға өлгәшә. Яҡынса бына ошолай беҙҙең араның тарихы.**

Әхмәр
ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

ХОККЕЙ

# ДӘРТЛЕ УЙЫН БӘРӘКӘТЛЕ

**"Салауат Юлаев" командаһы Нижнекамск ҡалаһының "Нефтехимик" хоккейсыларын үҙ майҙанында ҡабул итте. Хоккей буйынса Европа тур уйындарында ҡатнашыу сәбәпле, ун көнлөк тәнәфестән һуң был беренсе матч ине.**

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә көйөрмәндәр хоккейҙы нығ һағынып өлгөргән икән. Өфө-Арена трибуналары көйөрмәндәр менән шығырым тулды. Юлаевсылар көйөрмәндәрҙең өмөтөн тулыһынса аҡланы. Уйын башланып, әллә ни күп ваҡыт та үтмәне, Игорь Григоренко Патрик Торесен һәм Александр Радулов ярҙамында беренсе шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына сәпәне. Уйын ҡыҙҙы. Бары тик осор ахырында ғына ҡунаҡтар яуап голы индерә алды.

Икенсе осорҙа юлаевсылар уйын дилбегәһен тулыһынса үҙ ҡулдарына алды һәм бер-бер артлы 3 гол индереп, ҡунаҡтарҙы шаҡ ҡатырҙы. Ә улар ни бары бер шайба менән генә яуап ҡайтара алды.

Бында йәп-йәш уйынсы Александр Панковтың сос уйнауын айырыуса билдәләргә кәрәк. Ул был командаға йәштәрҙең "Толпар"ынан күскәйне. Юлаевсылар сафында беренсе матчты уйнауына ҡарамаҫтан, "Нефтехимик" ҡапҡаһына икенсе шайбаны А. Панков индерҙе. Тимәк, оҫта, һәләтле һәм тырыш уйынсы үҫеп килә. Икенсе һәм өсөнсө голдарҙың авторҙары Александр Радулов һәм һаҡсы Кирилл Кольцов. Һаҡсыларҙың һөжүм итеүҙәрҙә ҡатнашып, гол индереүе ҡыуаныслы.

Өсөнсө осорҙа юлаевсылар бер аҙ һүлпәнәйҙе. Улар бары тик йәнә бер гол индереү менән ҡәнәғәтләнде. Ҡунаҡтар шулай уҡ майҙан хужалары ҡапҡаһына бер шайба индерҙе.

Шулай итеп "Салауат Юлаев" 5:3 иҫәбе менән хаҡлы еңеүгә өлгәште.

Юныс ӘХМӘҘИЕВ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры Төркиәнән "Мең һулыш һәм бер тауыш" тип аталған IV Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестиваленә саҡырыу алды. Фестиваль 2011 йылдың 14-24 апрелендә Төркиәнең Конья ҡалаһында үтәсәк. Театр унда "Әхмәтзәки Вәлиди" спектакле менән ҡатнашасаҡ.

✓Өфөлә быйыл торлаҡ йорттарҙы капиталь ремонтлау буйынса адреслы программаны тормошҡа ашырыу сиктәрендә 186 лифт йүнәтелгән. Был программа сиктәрендә шулай уҡ энергияны һаҡлаусы ҡоролмалар ҡуйыуға ла төп баҫым яһалған. Йәғни 26 торлаҡ йортта 33 йылылыҡ иҫәпләү приборҙары ҡуйылған, һигеҙ йортта ҡыйыҡтар йылытылған.

✓Өфөләләр араһында торлаҡ-коммуналь хеҙмәт күрһәтеүселәргә ялыуҙар арта бара. "Роспотребнадзор"ҙың БР буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Нәсимә Күсемова белдереүенсә, быйыл ун айҙа ғына торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрҙең сифатына һәм санитар нормалар боҙолоуына 525 ялыу килгән.

✓Республикала эш сәфәре менән Татарстан Республикаһы Президенты Рөстәм Миңлеханов булып китте. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов һәм Татарстан Президенты Рөстәм Миңлеханов ике республика араһында сауҙа-иктисади, фәнни-техник, социаль һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһындағы Килешеүгә һәм 2011-2012 йылдарҙа республикалар араһында хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса саралар планына ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостандың дүрт тәбиғәт объекты - республика әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡыһы, ә улар биләгән территориялар айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәләре тип иғлан ителде. Был саралар республикала үҙенсәлекле тәбиғәт ландшафтын һәм рекреацион ресурсларҙы һөҙөмтәле файҙаланыу өсөн ҡабул ителде. Ҡарарға 2010 йылдың 14 декабрендә БР Президенты Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы. Тәбиғи объекттар исемлегенә "Рус Швейцарияһы" (Бәләбәй районы), "Еүеш йырын" (Бишбүләк районы), "Әҙрәсгәл популяцияһы" (Туймазы районы) һәм "Шумилов шарлауығы" (Туймазы районы) тәбиғәт биләмәләре инде. Айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәләрендә ниндәй ҙә булһа хужалыҡ эшмәкәрлеге, шул иҫәптән төҙөлөш, мал көтөү, ағас ҡырҡыу (санитар ҡырҡыуҙан тыш), шулай уҡ дарыу үләндәре әҙерләү тыйыла.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Кеше был тормошта еңеүҙәр өсөн дә йәшәй. Тик һуңғы йылдарҙа еңеү тойғоһо башҡасараҡ - бәҫһеҙерәк, осһоҙораҡ була бара түгелме, тигән хәүеф тә тыуып ҡуя. Ә шулай ҙа еңеүҙәр яулана тора. Бына, мәсәлән, баш ҡалабыҙҙа һәм республикабыҙҙа ошо арала үткәрелгән ҡайһы бер генә бәйге-конкурстарҙа еңеү яулаусыларҙы барлап алдыҡ һәм тормошобоҙҙа еңеүҙәргә урын бар икәнлегенә инандыҡ. Телевизорҙа барған сит ил фильмдары геройҙарын кумир һанаусылар, компьютерҙа уйындар уйнап ултырыусылар юҡ был еңеүсе егет һәм ҡыҙҙар араһында. Халҡыбыҙҙың, берәүҙең үҙе батыр, берәүҙең һүҙе батыр, тигән аҡылы бар. Үҙе лә, теле лә батыр йәштәребеҙ тормоштоң төрлө өлкәләрен яулауҙы, тимәк, атай-олатайҙарҙан килгән еңеүсе булып йәшәү принцибын дауам итә. Шулай булғас, тыуып килгән 2011 йылда ла үҙ асылыбыҙҙан тайпылмайыҡ, еңеүҙәр яулап йәшәйек, еңеүселәр тәрбиәләйек. Түбәндә гәзит уҡыусыларҙы ҡайһы бер еңеүселәр менән таныштырабыҙ.**

# БЕРӘҮҘЕҢ ҮҘЕ БАТЫР,

## берәүҙең һүҙе батыр...



**■ Яңыраҡ Ҡаҙан ҡалаһында Милли көрәш буйынса шәхси-команда чемпионаты һәм Рәсәй беренселеге үтте. Унда Башҡортостан йыйылма командаһы өлкәндәр, үҫмерҙәр араһында һәм дөйөм иҫәп буйынса икенсе урынға сығып, көмөш миҙал яулаһы.**

Был бәйгелә Рәсәйҙең 30 төбәгенән, шулай уҡ Тажикстан һәм Үзбәкстандан батырҙар ҡатнашты. 17 спортсынан торған Башҡортостан командаһы унда үҙен һынатманы һәм 14 кеше призлы урындарға лайыҡ булды.

Өлкәндәр араһында Наил Мөхәмәтйәнов (Өфө ҡалаһы) менән Альберт Рәхмәтуллин (Мәләүез районы) - алтын, Руслан Ильясов (Өфө), Вадим Зөлҡәрнәйев (Өфө), Алик Яҡупов (Стәрлетамаҡ), Алмас Әсәҙуллин (Учалы) , Рәдиф Аҡсурин (Өфө) көмөш миҙал алыуға өлгәште. Үҫмерҙәр араһында чемпионаттың иң йәш ҡатнашыусыһы Артур Зөлҡәрнәйев (Ҡыйғы районы) таҫыл көрәш өлгөһө күрһәтеп, чемпион исемен яуланы.

**■ Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусылары Яңы йыл байрамы алдынан ғына Ишембайҙа үткәрелгән Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған фәнни-ғәмәли конференцияла ҡатнашып, еңеүле урындар яулап ҡайтҡан.**

Азалия Солтанова, Айһылыу Үлмәҫҡолова, Гөлназ Мөхәмәҙиева, Зөһрә Баймөхәмәтова һәм Илнур Булатовтан торған иждади команда республика кимәлендәге конференцияла уңышлы сығыш яһауҙарын үтеп барған йылдың иң сағыу еңеүе, тип билдәләй. Ишембайҙағы 2-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары ла, уҡыу йортоноң Вәлиди рухын һүндермәй йәшәй алыуы ла хайран ҡалдырған уларҙы. "Оло шәхесебеҙ Вәлидиҙең тормошон, иждадын өйрәнеүҙән үҙебеҙгә иҫ киткес оло рух күтәренкелеге алдыҡ, уның кеүек шәхестәребеҙҙе уҡыусылар мотлаҡ белергә тейеш. Ошо йәһәттән ҡарағанда ғына ла был конференцияның баһаһы ҙур", - ти гимназистар.



**■ Балалар спорт клубтары, республика мәктәп-интернаттары, лицейҙары һәм гимназиялары уҡыусылары араһында волейбол буйынса Күмертауҙа үткән XIII спартакиадала иң көслөләр билдәләнде.**

Ярышта республиканың инновацион дөйөм белем биреү учреждениеларынан 12 команда ҡатнашты. Ҡыҙҙар араһында Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты командаһы еңеүсе булды. Икенсе урынды - Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт республика гимназия-интернаты, өсөнсө урынды Белорет лицей-интернаты алды. Егеттәр араһында ла беренсе урынға 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты сыҡты. Икенсе һәм өсөнсө урындарҙы Күмертау ҡалаһының 3-сө башҡорт республика гимназия-интернаты һәм Дыуан районының республика лицей-интернаты бүлеште. Уйындарҙан тыш, спартакиада сиктәрендә фильмдар ҡарау, танышыу кисәләре, ҡала буйынса сәйәхәт, дискотека ла үткәрелде.

**■ Республикабыҙҙа һәләтле балалар өсөн төрлө саралар йыш үтеп тора. Яңыраҡ "Рәсәй" банкыһы БР Мәғариф министрлығы менән берлектә республика интернаттары уҡыусылары араһында "Яратам һине, тыуған төйәгем!" исемле иждади конкурс үткәрҙе.**



Конкурста жюри һайлап алған 64 эш ҡатнаша. Бәйгелә әүҙемлек күрһәтеүсе Ҡ. Дәүләткилдеев исемендәге Республика художество гимназия-интернаты, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты, 2-се һәм 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаттары, Павловка мәктәп-интернаты уҡыусыларының барыһына ла маҡтау ҡағыҙҙары һәм Яңы йыл бүләктәре тапшырылды. Ә конкурстың төп призы - Гран-при Республика иҡтисад лицей-интернаты уҡыусыһы Руслан Аҡбашевҡа эләкте. "Рәсәй" банкыһы еңеүсе уҡыған уҡыу йортоноң спорт залын махсус ҡоролмалар менән йыһазландырыу өсөн 197 мең һумлыҡ сертификат менән дә бүләкләне. "Рәсәй" банкыһының Башҡортостандағы бүлексәһе етәксеһе Татьяна Эстрина әйтеүенсә, банк һәләтле йәштәргә ярҙам итергә һәр ваҡыт әҙер һәм бындай социаль йүнәлештәге конкурстар тағы ла ойоштороласаҡ әле.

**■ Башҡорт дәүләт медицина университеты Рәсәй уҡыу йорттары араһында үткәрелгән конкурста еңеп сығып, 2014 йылда Сочиҙа үтәсәк Олимпия һәм Параолимпия уйындары өсөн волонтерҙар әҙерләү үҙәген булдырыу хоҡуғына эйә булды.**

БДМУ-ла волонтер хәрәкәттәре үткән быуаттың 90-сы йылдар башында уҡ булдырыла, ә 2005 йылдан был уҡыу йортонда волонтерҙар әҙерләү бүлеге лә барлыҡҡа килә. "Рәсәйҙең волонтерлыҡ үҙәктәре" тип аталған конкурста илдең 26 уҡыу йорто еңеүсе тип табыла. Уларҙы ҡотлау һүҙендә РФ Премьер-министры В. Путин яҡын арала Рәсәйҙә үтәсәк эре спорт һәм сәйәси сараларҙа, мәсәлән, 2012 йылда Алыҫ Көнсығышта үтәсәк АТЭС форумында, 2013 йылда Ҡаҙанда буласаҡ Универсиадала, Сочи олимпиадаһында, 2018 йылдағы футбол буйынса донъя чемпионатында волонтерҙарҙың ярҙамы кәрәк буласағын билдәләне.

**■ "Байыҡ-2010" Республика телевизион конкурсында Башҡортостандың иң оҫта бейеүселәре билдәләнде.**

"Бәләкәй ансамбль" номинацияһында Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты Айбулат Нурмөхәмәтов, Динис Абдрахманов, Тимур Шәйхмәтов, Батыр Мөхәмәтов, "Парлы бейеү" номинацияһында Баймаҡтан аталы-уллы Әсҡәт һәм Әнфәр Нурмөхәмәтовтар, "Яңғыҙ бейеү" номинацияһында ир-егеттәр араһында Әбйәлилдән Илдар Сабитов, ҡатын-ҡыҙҙар араһында "Янғантау" шифаханынан Әлиә Шәмсетдинова лайыҡ булды. Бынан тыш, композитор Урал Иҙелбаевҡа - "Бейеүҙә музыкаль яҡтан биҙәүсе", шағирә, журналист Лариса Абдуллина һәм Ҡариҙел районы "Йәшлек" халыҡ бейеүҙәр ансамбле етәксеһе Рәфилә Мөнирова ға - "Иждади хеҙмәттәшлек", Сулпан Аҫҡарова һәм Риф Ғәбитовҡа - "Иң яҡшы бейеү

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡала уҡытыусылары Рәсәй Федерацияһында иғлан ителгән Уҡытыусы йылына йомғаҡ яһаны. Сара сиктәрендә иң алдынғы мәғариф хеҙмәткәрҙәре тәбрикләнде, төрлө конкурстарҙа еңеүселәр билдәләнде. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев билдәләүенсә, Уҡытыусы йылында Өфөлә биш яңы мәғариф учреждениеһы асылды, дүртәүһе төҙөкләндерелде,106 мәктәптә капиталь ремонт үткәрелде.

✓Өфөнөң Һаңғырауҙар өсөн мәҙәниәт йорто яңынан үҙ ишектәрен асты. Хәҙер инде насар ишеткән балалар бында йыр, бейеү түңәрәктәренә йөрөй аласаҡ. Мәҙәниәт учреждениеһы насар ишеткән һәм һөйләшкән балаларҙың ялын ойоштороу ғына түгел, уларҙың иждади реабилитацияһы менән дә шөғөлләнә.Әле түңәрәктәрҙә 60-лап бала шөғөлләнә.

✓Сипайлово биҫтәһендә 159-сы дөйөм белем биреү мәктәбе файҙаланыуға тапшырылды. Микрорайонда йәшәүселәрҙең шатлығын Башҡортостан Республикаһы Президенты ла уртаҡлашты. Яңы асылған мәктәп эргәһендәге 38-се һәм 141-се мәктәптәрҙә быға тиклем ике сменала 2700 бала уҡыған булған. 825 урынға иҫәпләнгән дүрт ҡатлы 159-сы мәктәп хәҙер был көсөргәнеште кәметәсәк.

✓Рәсәйҙең баш дәүләт санитар табибы Геннадий Онищенко белдереүенсә, Гаитиҙа ҡоторған холераның бөтә донъя эпидемияһына әйләнеп китеүе лә бар. XX быуатта донъяла ете тапҡыр холера пандемияһы теркәлгән. Гаитиҙа әле 114 мең кеше был сир менән яфалана. Үлеүселәр һаны 3535-кә еткән.

✓Яңы йыл байрамы көндәрендә эшләйәсәк почталарҙың махсус эш графиғы раҫланды. 31 декабрҙә республикалағы почталар үҙ клиенттарын эш ваҡыты бер сәғәткә ҡыҫҡартылған эш режимы буйынса ҡабул итәсәк. 2011 йылдың 1, 2 һәм 7 ғинуары - бөтә почта бүлексәләре өсөн ял көндәре. 3, 4, 5, 6, 8, 9 һәм 10 ғинуарҙа бөтә почта бүлексәләре ғәҙәттәгесә эшләйәсәк.

✓Был ял көндәрендә республикала һауа температураһының 30-35 градусҡа тиклем һалҡынайыуы көтөлә.

ҡуйыусы", Рәис Низаметдинов һәм Әнүәр Шафиҡовҡа - "Башҡорт бейеүен үҫтергәне һәм пропагандалағаны өсөн" тигән махсус номинацияларҙа бүләктәр тапшырылды.

**■ Архангел районы Архангел ҡасабаһында йәшәгән Гөлдәр Япарова "Сулпылар" телевизион йыр конкурсында гран-при яуланы.**



IX синыфта белем алыусы был моңло тауышлы ҡыҙ телевизор ҡараусыларға "Дуҫлыҡ йыры", "Гүзәл ерем" йырҙары аша яҡшы таныш. Гөлдәр тик бишлегә генә өлгәшә, төрлө конкурстарҙа ҡатнаша, әлеге мәлдә республика олимпиадаларына әҙерләнә. Шиғырҙар ижад итә, шиғырҙарына көйҙәр ҙә яҙып ҡарай. "Сулпылар"ҙа еңеү яулағанына шатланып бөтә алмай һәм әсәй-атайының, уҡытыусыларының өмөтөн аҡлау өсөн тағы ла әллә күпме изге эштәр башҡарырға хыяллана. Йылдың иң мөғжизәле байрамы - Яңы йыл республика балаларына тик ҡыуаныстар һәм оло еңеүҙәр алып килһен, тип теләй уңған ҡыҙ.

**■ "Гәлсәр һандуғас - 2010" эстрада йыры телефестиваленең гала-концерты үҙ тамашасыларын Нефтселәр мәҙәниәт һарайына йыйҙы.**

Фестивалдә 60-ҡа яҡын йәш башҡарыусы ҡатнашһа ла, уларҙың бик аҙҙары ғына сараның финал өлөшөнә тиклем килеп етә алған. "Йыл асышы" тип Ян Лира билдәләнде, "Тамашасы һөйөүе"-нә Айрат Зиннәтов лайыҡ булды. "Өмөт" номинацияһы Тимур Рамазанов, Айҙар Рәкипов, Зилиә Бәхтиева, Заһир Хызыровҡа тапшырылды.

**Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.**

# МӨҒЖИЗӘ КӨТКӘНДӘРГӘ...

## мөғжизәләр килһен

**Яңы йыл байрамы алдынан уҡыуҙа өлгөр, ә йәмғәт эштәрендә әүҙем балалар йылдың иң мөғжизәле байрамына - Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үткән Башҡортостан Республикаһы Президенты шыршыһына йыйылды.**



"Яңы йыл байрамында Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу булырға тейешлеген беләм, тик уларҙы йыл һайын күрәбеҙ. Быйыл мин Ҡыш бабайҙан бигерәк, байрамға Президенттың килеүен көтәм", - тигәйне Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының 1-се синыф уҡыусыһы Альбина Бикҡолова. Изге теләк тормошҡа ашмай ҡалмай инде ул, бигерәк тә уны тик "бишле" һәм "дүртле"гә генә уҡыған, хатта буш ваҡытын да файҙалы итеп үткәрергә яратҡан ҡыҙ һәм егеттәр теләһә. Әллә Яңы йыл мөғжизәһе булды, әллә йондоҙҙар хыялдарҙы үтәп өлгөрҙө - республиканың 39 районынан йыйылған балаларҙың шыршы байрамына Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов килде. Ул яңғыҙы ғына түгел, ә республикаға эш сәфәре менән килгән ҡунаҡты - Татарстан Республикаһы Президенты Рөстәм Миңлехановты ла үҙе менән бергә алып килгәйне.



- Бөгөн был залға иң аҡыллы, иң һәләтле, иң уңышлы, иң алдынғы балалар йыйылған, - тине республика Президенты үҙенең ҡотлау һүҙендә. - Һеҙ тырышлығығыҙ, маҡсат ҡуя белеп йәшәгәнегеҙ өсөн Президент шыршыһында ҡатнашыу хоҡуғы алдығыҙ. Мин һеҙҙең республикабыҙҙың ысын илһөйәрҙәре булып үҫеүегеҙҙе теләйем.

Ысынлап та, баш ҡалала ун бишенсе тапҡыр уҙғарылған Президент шыршыһына килгән 780 уҡыусының һәр береһен маҡтап бөтөрлөк түгел. Улар уҡыуҙа ла һынатмай, төрлө фәндәр буйынса олимпиадаларҙа ҡатнаша. Красноусол башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы Флорид Фәтхетдинов, мәҫәлән, 7-се синыфта ғына уҡыуына ҡарамаҫтан, фәнни эш менән дә шөғөлләнә, асыштары менән тиҫтерҙәрен дә таныштырып бара.

Бейеүселәр ҙә, йырсылар ҙа, спортсылар ҙа бар шыршы байрамына килгән балалар араһында. Тәртиптәре лә һоҡланырлыҡ уларҙың. Бөрйән районының Иҫке Собханғол мәктәбенең өсөнсө синыфы уҡыусыһы Айнур Маликов әйтмешләй, гел генә өлгө булыуы еңел булмаһа ла, үҙеңде оло-ларҙан - кесе, кеселәрҙән оло итеп тота белһәң, үҙеңде тәртип сиктәрендә тота белеүҙең әллә ни ҡыйынлығы юҡ.

Яңы йыл байрамында мотлаҡ бүләктәр ҙә булырға тейеш бит инде. Уҡыусыларға тәмле бүләктәрҙән тыш, китаптар, йомшаҡ уйынсыҡтар ҙа бүләк итте Ҡыш бабай. Ә республика Президенты Рөстәм Хәмитов 13-сө махсус коррекцион мәктәп-интернат тәрбиәләнеүселәренә өр-яңы автобус асҡысы тапшырҙы. Ҡунаҡтар ҙа буш ҡул менән килмәгәйне был сараға. Татарстан Президенты Рөстәм Миңлехановтың бүләге, шулай уҡ автобус, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се республика балалар йортона тапшырылды.

- Беҙҙең балалар йорто тәрбиәләнеүселәренә театрҙарға, кинотеатрҙарға, цирҡҡа, балалар университетына йөрөү өсөн был автобус бик кәрәк ине. Яңы йыл байрамы алдынан оло бүләк булды, - ти балалар йорто тәрбиәләнеүсеhe, XI синыф уҡыусыһы Лениза Ғәйнуллина. Әйткәндәй, ул үҙе лә тик "бишле"гә генә өлгәшә, йырлай, бейей, шиғырҙар ҙа ижад итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яңы йыл байрамы, ысынлап та, мөғжизәләргә бай шул. Нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, Президент шыршыһына ниндәйҙер өмөт менән килгән уҡыусылар илһамланып, бүләктәрҙән дә түгел, ә ололарҙың иғтибарынан күңелдәре үҫеп, тағы ла яҡшыраҡ эштәр башҡарырға дәртләнеп ҡайтҡандыр, моғайын. Иң мөһиме, теләктәрҙең тормошҡа ашыу мәле йыл буйына дауам итһен.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Ҡурылдай



Аңлап булмай быйылғы ҡышты: бер йылыта, бер һыуыта. Шуға ла күптәрҙе ҡурылдай (бронхылар астмаһы) йонсота. Уларға бер нисә ысул тәҡдим итәм:

❖ 50 грамм аҡ майҙы (һыйыр майы булһа, бигерәк шәп) 150 грамм бал һәм 100 грамм артыш ағасы орлоҡтарын ҡушып, өҫтөнә сыҡҡансы һыу ҡойорға. Был һауытты һыу ҡойолған икенсе ҙурыраҡ һауытҡа (водяная баня) ултыртып, газда 1 сәғәт тирәһе болғай-болғай ҡайнатырға. Һауыттағы һыу кәмеп китһә, һыу өҫтәп торорға була. Эҫе көйө һөҙөргә һәм һалҡын урында һаҡларға. Көнөнә 2 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап ҡабул итергә;

❖ 1 ҡалаҡ ялбыр күрән тамырын ярты литр ҡайнар һыуға ваҡлап һалаһың һәм 2 сәғәт төнәткәс, һөҙәһең. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стаканлап эсергә. 2 аҙнанан һуң тын юлы йомшара, ҡаҡырыҡ сыға;

❖ әсе торманы (редька) турап кәстрүлгә һалырға, өҫтөнә шәкәр ҡомо һибергә лә кәстрүлде ябып, духовкала 2 сәғәт бешерергә. Торма бешкәс тә һөҙөргә. Көнөнә 3-4 мәртәбә 2-шәр ҡалаҡ эсергә;

❖ 1 килограмм һуғанды таҙартырға һәм ваҡ ҡына итеп турап, һутын һығырға. Һутҡа 1 килограмм шәкәр ҡомо ҡушырға. Ошо ҡатнашманы ике аҙна ҡояш нурында тоторға. Ас ҡарынға 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ кәкүкбаш (медуница) үләнен ярты литр ҡайнар һыуға һалып, 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 мәртәбә 4-5-әр ҡалаҡ эсергә. Үлән мотлаҡ кипкән булһын.

## Ҡурай еләге

Был еләк - тирләтеүсе һәм һалҡын тейеп ауырығанда температура төшөрөүсе дауа. Ҡурай еләгенә шәкәр ҡушып яһалған эсемлек эҫе көндәрҙә тәнгә хәл индерә. Бынан башҡа ул ашҡаҙан, атеросклероз, ҡан баҫымы юғары булғанда ныҡ ярҙам итә. Япраҡтарын сәйгә ҡушып эсергә, көҙ ҡарт, кәрәкмәгән ҡыуаҡтарынан миндек бәйләп алырға һәм мунсала сабынырға була. Бик файҙалы.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Беҙ ысын мәғәнәһендә үҙебеҙҙең асылға, тормошҡа, үҙебеҙҙе тәрбиәләгән ғаиләгә, мәктәпкә, Тыуған илгә тоғро булып йәшәйек һәм беҙгә ҡарап һәр ваҡыт "Үәт, исмаһам, 39-лылар!" тиһендәр.*



*ҺҮҘ - "ҠУЯНДАРҒА"*

# КӨСЛӨ БУЛЫРҒА ӨЙРӘНӘМ...

**Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлағас, бер йыл ҡурсаҡ театрында эшләп алдым. Шунда ҡуян образын тыуҙырырға тура килгәйне.**

Артабанғы ижад юлымда ундай ҡурҡаҡ, һәр ҡыштырлауға ҡалтырап, дерелдәп торған образдар тыуҙырырға тура килмәне. Киреһенсә, үҙемдең характерыма ҡаршы килгән, көслө образдар тыуҙырырға тура килә сәхнәлә. Үҙемде ул тиклем көслө кеше тип иҫәпләмәйем. Киреһенсә, холҡом ысынлап та ҡуяндыҡына тап килә. Әммә көслө образдарҙы рәхәтләнеп уйнайым. Ҡайһы берҙә тормошта сәхнәлә тыуҙырған образдарым кеүек көслө булмауыма асыуым да килә. Тупаҫлыҡҡа ҡаршы тупаҫлыҡ менән яуап бирә торғандарҙан түгелмен. Шуға ла үҙемдә булмаған сифаттарҙы сәхнә образдарымда тыуҙыра алыуыма бик шатмын. Башта ошо ролдәрҙе уйнауы бик ауыр ине, режиссерыбыҙ Гөлдәр Мозаффар ҡыҙы "Юҡ, Рафиға, һин көслө ҡатын", тип ҡабатлай, дәртләндерә торғас, роль өҫтөндә эшләй, эҙләнә торғас, кәрәкле сифаттарҙы ижад итә башланым. Артист булғас, үҙеңә тап килгән образды ғына түгел, ҡапма-ҡаршы образды ла уйнарға тейешһең. Мин уны үҙеңде байытыу, оҫталығыңды камиллаштырыу, үҫтереү тип иҫәпләйем. Ошо образдар тормошоңа ла тәьҫир итә бит. Үҙеңде көслөрәк итеп хис итә башлайһың. Образдың сифаттары ысынбарлыҡҡа күсә.

**Рафиға ҒӘЛИНА,**
**Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисткаһы.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

# АРЫҪЛАН ЙӨРӘКЛЕБЕҘ

**Барыҫ йылы - байлыҡ йылы, Һыйыр йылы - муллыҡ йылы, Ҡуй йылы - ҡытлыҡ йылы, Ҡуян йылы - йотлоҡ йылы, тиҙәр. Ләкин мин Ҡуян йылында артыҡ йотлоҡ булғанын иҫләмәйем.**

Ә ҡуян йылында тыуғандар тура һүҙле, үҙ-үҙҙәренә хыянат итмәүе менән башҡаларҙан айырылып тора, тиер инем. Минең тиңдәштәрҙе генә алайыҡ: Әхмәт Сөләймәнов, Ғәзим Шафиҡов, Ризуан Хажиев. Былары - иҫкә төшкәндәре генә. Ғөмүмән, был егеттәр ижадта ла, тормошта ла арыҫлан йөрәкле, үҙ маҡсаттарына өлгәшә алған кешеләр. Әлбиттә, кешенең характерын уның тыуған йылы ғына билдәләмәй. Характерҙар төрлөсә була. Мин, мәҫәлән, сентябрҙә тыуғанмын, был да үҙ эҙен һалмай ҡалмай. 17 сентябрь тирәһе - көн менән төндөң тигеҙләшкән ваҡыты. Бына шул минең характерҙа ла сағыла тип уйлайым. Үтә уҫал да, үтә йыуаш та түгелмен. Халыҡ әйтә бит, йыуаш булһаң - баҫырҙар, уҫал булһаң - аҫырҙар, тип. Шуға мин баҫырлыҡ та, аҫырлыҡ та түгелмен. Алтын урталыҡта йәшәргә тырышам. Был кешеләргә ҡарата мөнәсәбәттә лә сағыла. Бына ҡайһы берәүҙәр, яҡшылыҡты хәтерләйем, насарлыҡты хәтерләмәйем, ти. Минеңсә, икеһе лә иҫтә ҡала. Ләкин насарлыҡты иҫтә тотоп, насарлыҡ ҡылыу, үс алыу ғына ярамаған эш. Шуға артыҡ уҫал булырға ла, бик йыуаш булырға ла кәрәкмәй.

Әрмелә лә ҡуян йылында тыуған егеттәр менән бергә хеҙмәт иттек. Башҡортостандан барыусылар үҙ-ара бик дуҫ булдыҡ. Башҡа төбәктәрҙән килгәндәр улай уҡ дуҫ йәшәмәне. Беҙҙең ерҙәшлек, яҡташлыҡ тойғоһо көслө булыуына, берҙәмлеккә, ярҙамсыллыҡҡа һоҡланып ҡарай ине башҡалар.

Минең тиңдәштәремә, 1939 - Ҡуян йылында тыуыусыларға арнап, шаярыу менән яҙылған бер шиғырым да бар: "Беҙ - утыҙ туғыҙлылар", тип атала ул. Йәштәр, бәлки, белмәйҙер: 39 һаны беҙҙең халыҡта аҡыл яғы самалы булыуҙы, бер аҙ етешмәгәнерәк, тигәнде аңлата. Шуға 39-ҙарға теләк шул: тормошта беҙҙән башҡа ла 39-лылар күп, беҙ ысын мәғәнәһендә үҙебеҙҙең асылға, тормошҡа, үҙебеҙҙе тәрбиәләгән ғаиләгә, мәктәпкә, Тыуған илгә тоғро булып йәшәйек һәм беҙгә ҡарап һәр ваҡыт "Быларға етешмәй, былар-39-лылар" тимәһендәр, ә "Үәт, исмаһам, 39-лылар!" тиһендәр.

**Риф МИФТАХОВ, шағир.**

*ЙӘН КӨҪӘГӘНЕ...*

**Сүллектә артынан ҡыуыусы аусылар ҡамауында ҡалған дөйәғош (страус), ҡотолор әмәле ҡалмаған саҡта, башын ҡом аҫтына тығып тора, имеш. Һуйҙайып торған кәүҙәһен бер күрергә ине. Һеҙҙең күргәнегеҙ бармы? Минең юҡ. Уның ҡарауы, әрмелә саҡта ут ҡамауында ҡалған саяндың үҙ-үҙен сағып үлтергәнен күргәнем булды. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: саян түңәрәкләп һибелгән бензиндан янған ут ҡулсаһында тороп ҡала, ут ян-яҡтан яйлап саянға яҡынлашып килә, бына-бына уны өтөп аласаҡ, әммә шул саҡ бөжәк үҙ-үҙен саға. Уйлап ҡараһаң, башын ҡомға тығып һуйҙайып торған дөйәғош менән үҙ-үҙен һәләк иткән саян икеһе лә бер үк маҡсатта - йәндәренә ышыҡ урын эҙләй: береһе - ҡом аҫтында, икенсеһе - үлемдә. Тик уларҙың ҡайһыһы дөрөҫ юлда бара һуң? Уйлай китһәң, үҙ бәхетеңде эҙләү ҙә шул уҡ ышыҡ урын эҙләү бит. Кеше ғүмер буйы бәхетен эҙләй, уны таба алмай, сөнки нимә эҙләгәнен белмәй ул. Мин дә үҙ ғүмеремдә ундай ышыҡ ерҙе бик күп урында эҙләп ҡараным...**

# ЫШЫҠ УРЫН ЭҘЛӘЙЕМ

## Урындыҡ аҫтында, әүеҫлек башында, ҡыуышта, артҡы партала, сәхрәлектә, аҡсала...



### Урындыҡ аҫтында

Был урын беҙҙең өсөн өй эсендә иң ышаныслы йәшеренер ышыҡ урын һаналды. Тик башҡорт өйөндәге был урындыҡты бөкән йә һике менән бутарға ярамай. Мәҫәлән, беҙ урындыҡта 11 бала теҙелешеп ятып йоҡлай торғайныҡ. Урындыҡ - йоҡо урыны ғына түгел, балаҫ, ашъяулыҡ йәйеп, аяҡты салып ултырып самауырҙан сәй эсергә лә ҡулайлы урын. Әсәйебеҙҙең "Эҙҙәләү" тип ҡурҡытҡан ен-пәрейҙән дә, ишек башындағы "шыйыҡ сыбыҡ"тан да ҡасыр урын тап урындыҡ аҫты булды. Нисектер, һыуыҡ һәм ҡараңғы, ҡурҡыныс булып күңелгә уйылып ҡалған урындыҡ аҫты. Беҙ бер мәл Һаҡмар буйындағы Төпөш тип аталған урында ла йәшәп алдыҡ. Хәҙер ул урында беҙҙең ауыл советының һабантуйы үтә. Ул саҡта миңә 3 йәш ине, булһа кәрәк. 2-3 өйҙән торған утар һымаҡ ер ине ул. Беҙгә бик йыш ҡына атайыбыҙҙың белештәре - Ҡуянтау урыҫтары килеп йөрөнө. Беҙ Бибинур апайым менән урамда уйнап йөрөгән ерҙән тегеләрҙең килә ятҡанын күреп ҡалабыҙ ҙа: "Урыҫ килә!" - тип ҡысҡырып, өйгә йүгереп инеп китәбеҙ ҙә, дөбөр-шатыр урындыҡ аҫтына ҡасып йәшеренәбеҙ. Бына бер мәл урыҫтар беҙҙең өйгә килеп инәләр. Улар атайыбыҙ менән нимәлер хаҡында һөйләшәләр-көләшәләр. Бер мәл тауыштары тынып ҡала, ә беҙ һаман да ятабыҙ. Шунан атайыбыҙ урындыҡ янына килә лә, ҡулын аҫҡа тығып, беҙҙе аяҡтан эләктереп алып, көлә-көлә һөйрәп сығара. Сабый саҡта өй эсендә ундай ышыҡ урындарҙы һәр бер бала уйлап табалыр. Беҙ иһә, юрған алып әле был урынды, әле теге урынды томалап ҡараңғылатып "өй эсендә өй" яһай торғайныҡ. Ҡыҙҙар ул өйҙәргә ҡурсаҡтарын, сынаяҡ ярсыҡтарын тултырыусан. Маҡсатыбыҙ ышыҡ урын эҙләү булды...

### ...әүеҫлек башында

Өй эсендәге барлыҡ ышыҡ урындарыбыҙ атай-әсәй һәм өлкән туғандарыбыҙ тарафынан тар-мар ителгәс, ышыҡ урындарҙы тышта, ихата араһында эҙләргә тотондоҡ. Таптыҡ. Иң уңайлыһы - әүеҫлек башы. Был ышыҡ урындың рәхәтлеге! Унан йондоҙҙар күренә, саф һауа, яңы сабылған бесән еҫе йәнгә шифа. Атай-әсәйгә әүеҫлек башында йоҡлайбыҙ, тип сығып китәбеҙ ҙә, ауыл осонда апай-ағайҙарҙың "Наза" һуҡҡанын күҙәтергә барабыҙ. Әгәр ҙә өйҙә йоҡлаһаң, ағай-апайҙарҙың оялышып ҡына бер-береһенең ҡулынан тотошоп, "Наза, Наза, Наза матур ҡыҙ бала...", тип, рәт аша үткәнен күреүҙән мәхрүмһең. Йәштәр янына барырға ҡурҡабыҙ, ситтән генә күҙәтәбеҙ. Ситтән генә күҙәтеүебеҙҙең бер ғилләһе бар: сөнки был саҡ беҙҙең дә танауға еҫ инеп, күңелебеҙҙә бөрөләнеп килгән һөйөү, мөхәббәт хисе серлегеге рәт аша үткән парҙар йөҙөндә мөғжизә көҫәй. Нисектер, уларҙы йәшеренеп күҙәтһәң, улар серлерәк күренә һәм рәт аша етәкләшеп үткән апай менән ағай мотлаҡ рәүештә өйләнешер һымаҡ. Өйләнешмәһәләр, аптырайбыҙ, һуң улар бит кеше алдында етәкләшеп йөрөнө! Йәштәрҙе күҙәтергә килгән "йылтыргүҙ"ҙәр бер беҙ генә түгел. Ҡайтышлай күрше йорттарҙың әүеҫлек башында йоҡлаусылар беҙҙе үҙҙәренә йоҡларға саҡыра. Йәнәһе, уларҙың әүеҫлек башы йылы, ышыҡ һәм тик уларҙан ғына йондоҙҙар күберәк күренә. Үкенескә ҡаршы, таңғы ҡалҡҡан ҡояш менән бергә әүеҫлек башы ышыҡ урын булыуҙан туҡтай шул. Беҙ ауыл осонда уйын ҡорған ағай-апайҙарға бәйле татлы хистәребеҙгә иҫереп, йоҡлап китергә лә өлгөрмәйбеҙ, иң тәүҙә әсәйебеҙ ялан кәртәлә гөбөр-гөбөр һыйыр һауа башлай. Шунан атайыбыҙ килеп беҙҙе уята: "Балалар, тороғоҙ, бесәнгә..."

### ...ҡыуышта

Беҙҙең сабынлыҡ ауылыбыҙҙан 20 саҡрым самаһы алыҫлыҡта булғас, ятып эшләйбеҙ. Ҡыуышта

йөшәйбеҙ. Сабынлығыбыҙ айыуҙар ояһы булған Мәхмүт йылғаһы буйында. Ундағы ҡалын-ҡалын ҡарағай, уҫаҡ, ҡайын урмандарына инеүең була, күңелгә шундуҡ шом, хәүеф инеп урынлаша. Шуға күрә, нисек кенә тыныс булмаһын, урман эсе беҙгә ышыҡ урын була алмай. Етмәһә, әле бында, әле тегендә кешенең атын йә һыйырын айыу йыҡҡан, төндә кемдәрҙеңдер ҡыуышын айыу туҙҙырған, тигән хәбәрҙәр ишетелеп тороуы күңелдәге хәүефте тағы ла көсәйтә. Бер төндә ағай һәм ҡустыларым менән төндә Мәхмүт йылғаһына бәрҙе ауларға сыраҡҡа төшкәндә күрше сабынлыҡта бесәнлеге булған ағайҙарҙың ҡыуышы янындағы шырлыҡҡа индек тә, уларҙы ҡурҡытыу өсөн ҡороған ағастарҙы шартлылдатып һындырырға, айыу һымаҡ үкерергә тотондоҡ. Бер мәл ҡыуыштағылар хәрәкәткә килде. "Айыу, айыу баҫты!" тип ҡысҡырырға тотондолар. Ҡыуышы янындағы ике күбәгә ут төртөп ебәрҙеләр, шунан һуң беҙҙең яҡҡа тоҫҡап мылтыҡтан атырға тотондолар. Пуляларбаш особоҙҙан шыйлап оса. Уйындан уҫмаҡ сығара яҙҙыҡ, пулялар яуған "һуғыш яланы"нан көскә ҡасып ҡотолдоҡ...

Урман эсендә лә, ҡыуышта ла үҙебеҙгә ышыҡ урын таба алманыҡ. Ҡыуыш беҙҙе ямғырҙан, елдән генә һаҡланы. Көнө буйы бесән эшләп, арып, йоҡлап китергә өлгөрмәйһең, атайыбыҙ йәнә беҙҙе уята һала: "Балалар, тороғоҙ, сәй ҡайнаны, берике сынаяҡ эсеп алабыҙ ҙа, ысыҡ һирпелдереп бесән сабып киләбеҙ..."

### ...артҡы партала

1 сентябрҙә класта артҡы парталар өсөн талаш була торғайны. Имеш, артҡы партала ултырһаң, уҡытыусы һине күрмәй, өйгә эште һорамай, серем итеп алырға ла, башҡа эш менән шөғөлләнергә лә була. Имеш. Артҡы партала ултырыу менәнме ни, уҡытыусы класс журналына ҡарап, һинең фамилияңды ҡысҡыра барыбер. Минә мәктәптә уҡығанда күберәген алғы парталарға ултырырға тура килде. Белгегеҙ килһә, класта иң ышыҡ урын алғы партала, йәғни уҡытыусының күҙ менән ҡаш араһында. Кеше үҙенең күҙе менән ҡаш араһын бер ваҡытта ла күрә алмай...

### ...сәүкә ояһында

Донъялағы иң ышыҡ урын - ҡала фатиры. Бөтә уңайлыҡтары эстә. Әгәр ҙә күп итеп аҙыҡ-түлек алып ҡуйһаң, унан тышҡа сыҡмайынса, оҙаҡ ваҡыт йәшәп була. Ауыл кешеләре шулай уйлап алдана. Юҡҡа ғына "Ҡаланы маҡта ла, ауылда йәшә", тип әйтмәгәндәрҙер. Ҡала фатирын сәүкә ояһы менән дә сағыштыралар. Мин үҙемдә ҡала фатирында әлеге лә баяғы көмгә башын тыҡҡан, әммә бар кәүҙәһе тышта бултәйеп торған дөйәгөш кеүек тоям. Булмышым бер туҡтауһыҙ тәбиғәт, кешеләр менән тәбиғи аралашыу, ауыл мөхитен көҫәй. Йәнем һыймай сәүкә ояһына. Ҡала фатирына бер генә тәүлеккә бикләнһәм дә, донъялағы иң ҙур, иң мөһим ваҡиғанан ситтә ҡалған кеүекмен. Мин көн һайын иртәнсәк эшкә барғанда урамда һәр саҡ таныш булмаған кешеләрҙе күрәм дә, "Уф!" тип ҡуям. Мин урамға сыҡҡанға тиклем ниндәйҙер ваҡиға булған да, мин уны күрмәй ҡалған кеүекмен. Ышыҡ түгел минең өсөн был сәүкә ояһы - дөйәгөштар төйәге. Ҡала фатирына ауыл кешеһенең башы ғына һыя, булмышы уның тәбиғәттә, тормоштоң үҙендә...

### ...аҡсала.

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында илебеҙҙә киң ҡолас алған кәпирәт хәрәкәте башланғас, башыма шундай уй килде: ә нинә байып ҡарамаҫҡа һуң? Донъяла иң бай кешене аңлатҡан фамилияны юҡҡа ғына йөрөтәмме ни мин?! Ә бит аҡсаң күп булһа, ике һәм дүрт аяҡлы "бурҙайҙар" һаҡлаған коттеджда йәшәһәм, бронялы тәҙрәле машиналарҙа йөрөһәм, донъяла минән дә яҡлаулыраҡ кеше булмаясаҡ. Тимәк, кешегә үҙенә иң ышыҡ урынды булдырыр өсөн ҡутара аҡса кәрәк. Тик нисек кенә тырышһам да, байығып булманы. Ғөмүмән, минең кеүек "дөрөҫ" тәрбиә алған кеше байый аламы икән? Ҡулға ҙур ғына суммала аҡса ла ингән саҡтар булды. Тик аҡса ниндәй суммала тиҙерәк ҡулға инһә, шундай уҡ суммала тиҙерәк юҡҡа сыға торҙо. Һәр ваҡыт ҡулда күпмеләр сумма аҡса ҡала ине, унаһы ла көс, тир түгеп тапҡан самаһы ғына. Хәрәм ингәне елгә осҡан. Ошоларҙан һуң бер хәҡиҡәтте аңланым: был минең юлым түгел...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бармы икән был донъяла ундай ышыҡ урын? Эһә, бар - һыу эсендә. Йылға сөңгөләнә сумып китәһең дә, ян-яғың тып-тыныс, етмәһә, беҙҙең яҡтарҙа акула ла юҡ. Әммә, нисек һыу төбөнә сумып инеп киткән булһаң, тының бөтөүгә һыу өҫтөнә "былт" итеп ҡалаһың. Тимәк, һыу эсе ышыҡ урын була алмай. Һыу эсенең ышыҡ булыу мөҙҙәте һинең тын оҙонлоғона тиң.**

**Нисек бер ышыҡ урынды күҙ уңынан ысҡындырғанмын, тием. Һөйөү, мөхәббәт хисе. Кешене урындыҡ аҫтынан һөйрәп сығарып, әүеҫлек баҫынан ергә төшөрөп, ҡыуыш эсенән тышҡа сығарып, артҡы партанан алға күсереп, сәүкә ояһынан урамға сығарып, аҡсаһын елгә осороға була. Ә бына бер-береһенә ғашиҡ булған ике йәндең тик үҙҙәре генә белгән серлелек донъяһынан биҙҙереп буламы? Донъялағы иң ышыҡ урын ул - мөхәббәт! Тукта! Әгәр ҙә ике кеше мөнәсәбәтенә өсөнсө кеше ҡыҫылһа... Йә мөхәббәт емеше булып балалар тыуһа... Оло борсолоуҙар башлана. Ә бер туктауһыҙ борсолоп йәшәгән кеше тыныс була алмай һәм ул үҙен ышыҡ урында итеп хис итә алмай. Тимәк, мөхәббәт тойғоһо ла кешегә ышыҡ урын була алмай. Улай булғас, кеше ғүмере буйы үҙенең йәшәү маҡсаты итеп эҙләгән бәхет тә юҡ түгелме һуң был донъяла?**

**Эһә, кеше ғүмер буйы бәхет тип эҙләгән ул ышыҡ урын бар икән шул: ул да булһа, әсә ҡарыны. Тик шуны ғына аңламай бәндә, ғүмер тигән үҙәндә ары һуғыла, бире һуғыла. Кем белә, бәлки, үҙ-үҙен сағып үлтергән саян да үлеменә барып, яңынан яралыр өсөн инәһе ҡарынындағы ышыҡҡа ынтылалыр.**

**Ғүмерем үткән һайын ышыҡтан асыҡ урынға сыға барған һымаҡмын. Үткән юлымдағы хаталар һәм хафалар борсолоп йәшәргә мәжбүр итә. Яңы йылға аяҡ баҫҡанда уларҙы һелкеп ташлағандай булам. Кем белә, бәлки, иң ышыҡ урын 2011 йылдалыр...**



**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ҺҮҘ - "ҠУЯНДАРҒА"

# ҠУЯН АУЫЛЫ ЛА БАР

Беҙҙең ауылдың рәсми исеме Нәби булһа ла, халыҡ телендә уны Ҡуян ауылы тип йөрөтәләр. Ауылыбыҙҙан дүрт саҡрым алыҫлыҡта Иҫке Монасип, ә урталыҡта Яңы Монасип ауылдары урынлашҡан. Яңы Монасип ауылын халыҡ Мишәр тип йөрөтә. Ысынында ла, ул ауылға мишәр бер ваҡытта ла аяҡ баҫмаған. Халыҡ һөйләүе буйынса, Көйөргәҙе районынан мишәр сабатаһын кейгән бер уҡымышлы егет килгән. Иҫке Монасиптар ул егетте кейәү итеп, мәсет һалып биреп, Яңы Монасип тигән ауылға нигеҙ һалалар. Башҡорттар араһында сабата кейеүселәр булмағас, был мишәр сабатаһы кейеп килгән егеттән ҡушаматы ауылға исем булып йоҡҡан да ҡуйған. Яңы ауыл барлыҡҡа килгәндән һуң күрше ауыл Иҫке Монасип булып китә. Ике ауылдың уртаһында урынлашҡан Мишәр ауылы мәсетенә ике яҡтан да халыҡ намаҙға йөрөй. Ана шул ваҡытта беҙҙең Һатыбал олатай өҫтөнән төшөрмәй ҡуян тиреһенән тегелгән тун кейеп йөрөгән. Уның үҙен Ҡуян бабай тип йөрөткәндәр, ауылға ла шул исем күскән. Ә рәсми исеменә килгәндә, ауыл кешеләре Һатыбал ҡартҡа, әйҙә ауылға һинең исемеңде бирәйек, тигән. Ләкин ул риза булмай: "Иҙел аръяғында минән оло кеше бар, ауылға шуның исемен ҡушайыҡ", -тип, Нәби ҡарттың исемен ҡушырға тәҡдим итә. Нәби ҡарттың ҡашы ҡалын була, шуға күрә лә уны "бай ҡаш" тип йөрөткәндәр. Әле лә Иҙелдең аръяғындағы урамды беҙ "бай ҡаштар" тип йөрөтәбеҙ. Ауылдың исеме рәсми рәүештә Нәби тип үҙгәртелһә лә, халыҡ телендә ул һаман Ҡуян ауылы булып ҡала килә.

Ә үҙемдең Ҡуян йылында тыуыуға килгәндә иһә, түбәндәге шиғыр барыһын да әйтеп бирә, буғай:

Ҡуян йылы тыуғанмын,
Ҡуян һымаҡ, тулғандым.
Ҡуян һымаҡ, тыуғастын,
Атай юлын ҡыуғанмын.
Ҡуяндай, атай назын
Бала саҡтан тойманым.

Ҡуян йылы тыуғанмын,
Булды ҡуян ҡыуғаным;
Ҡуян - минең ауылым,
Ҡуян - алтмыш тулғаным,
Ғүмерҙә ни ҡылғаным,
Әйтер өсөн торғаным.

Ҡуян - ауылым исеме,
Тапмам уның ишене:
Ул - тажым да тәхетем,
Минең алтын бишегем;
Биш ҡитғаның бишеһен
Байҡаттырыр ишегем.

Ҡуян өҫтөнә ҡуян...
Мин шуны уйлап ҡуям:
Шөкөр, ҡуян булманым,
Алда ла ҡуян булмам;
Яҙыҡ ҡылманым, ҡылмам,
Урап үтермен ундан;

Ҡуян йылы был ҡышым -
Етер мәлем алтмышым.
Булырмы ул ҡалҡышым,
Ҡалҡа биреп, балҡышым;
Заман менән тартышып,
Йә түбән атылмышым?

Алға алған юлымдан,
Имен-аман булынһа,
Бойорған булһа Аллам,
Алда ла ҡырға таймам;
"Амин!" тиһә фәрештәм,
Юҡ-барына бирешмәм.

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ,**
**филология фәндәре докторы, профессор.**

# ҺӘР КӨНӨНӘ ШАТЛАНЫЛА

- 1951 йылда Ҡуян йылында донъяға килгәнмен. Йондоҙнамәләргә әллә ни иғтибар итмәйем, тик ҡайһы саҡта ҡолаҡ һалам. Ҡуянды бөтәһе лә ҡурҡаҡ тип белә, шулай ҙа ҡуян йылында тыуғандарҙы ҡурҡаҡ тип атарға ашыҡырға кәрәкмәй, сөнки был йыл тағы ла бесәй йылы тип тә йөрөтөлә бит әле. Ә ҡуянға килгәндә, ҡурҡаҡ булыуға ҡарамаҫтан, ул бик ҡунаҡсыл, йомарт, аҡыллы, матурлыҡ, күркәмлек, таҙалыҡ ярата. Ҡуян йылын ғына түгел, ғөмүмән, һәр йылды ҙур өмөттәр менән ҡаршы алырға тырышам. Шулай уҡ һәр иртәне яңынса балаларым, тормош иптәшем, эшем, ашым, телем, илем барлығына шатланып, Аллаһы Тәғәләгә шөкөрҙәр әйтеп ҡаршы алам.

Шулай ҙа... Тап килеүмелер был, әллә ниндәйҙер мөғжизәме, уҙып киткән ике Ҡуян йылы ла минең өсөн шул тиклем уңышлы һәм иҫтәлекле булды. 1987 йылда мин "ҡыйыҡлы" булдым һәм ошо уҡ йылда БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булдым, ә икенсе ҡуян йылында - 1999 йылда миңә Башҡортостандың халыҡ артисы тигән исем биҙәлер. Был уңыштарымды, әлбиттә, бер ниндәй ҙә йондоҙнамәгә бәйләргә тырышмайым, бары тик шулай тура килгән, тип кенә ҡуям. Һәр кешегә йылдар имен-аман, ҡайғы-хәсрәтһеҙ килһен, илебеҙ имен, күк йөҙө тыныс булһын, тигән теләктә ҡалам.

**Миңдиғаян САФИНА,**
**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры артисткаһы.**

# УҢЫШЛЫ БУЛЫРЫНА ЫШАНАМ

Мин үҙемде көслө рухлы кеше, тип һанайым. Әлбиттә, тормош булғас, төрлө саҡтар була, ҡайһы ваҡыт ҡыйынлыҡтар алдында ла баҙап ҡалаһың. Әммә мин үҙемде ҡуян кеүек "ҡурҡаҡ" тип иҫәпләмәйем. Икенсенән, беҙ ҡуянды "ҡурҡаҡ" тип кенә беләбеҙ, ә уның башҡа сифаттары тураһында уйланып та ҡарағаныбыҙ юҡ. Мәҫәлән, ҡуяндар бик аҡыллы, ғәҙел, йомарт йәнлектәр. Был яҡтан килгәндә, үҙемдең йылым үҙемә тура килеп тә ҡуя. Миңә һәр ваҡыт аралашырға, кешеләр араһында булырға кәрәк. Бәлки, йондоҙлоғом буйынса игеҙәктәр булыуым да быға сәбәпселер. Һәр урында тәртип, бөхтәлек яратам. Үҙем гөлдәр ҙә үҫтерәм, бәйләйем дә, тегәм дә, ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙҙарға кәрәкле бөтә эштәрҙе башҡарам. Ә уңыштарға килгәндә, бәлки, тап килеүҙер, бәлки, беҙ үҙебеҙҙе шулай ышандырабыҙҙыр: уҙған ҡуян йылдары нисектер үҙемә уңышлыраҡ булғандай тойолдо. Шуға күрә, быйылғы ҡуян йылында ла мине уңыштар урап үтмәҫ, тип өмөт итәм һәм бөтә милләттәштәремә лә изге теләктәр теләп ҡалам!

**Зифа БАЯЗИТОВА,**
**Башҡортостандың халыҡ артисткаһы.**

# КӘҘӘНЕҢ ДӘ

## ләкин ул аҡһаҡал

**Кешелек йәмғиәтенең иң ойошҡан формаһы - милләт, ҡан яҡынлығы, тел, рух, дин берҙәмлеге, ер-һыу уртаҡлығы буйынса тупланған ойошма. Һәр милләтте айырым ҡәүем итеп һаҡлап-яҡлап йәшәткән ҡанундар, йола-традициялар системаһы ла була. Ул ҡанундарҙың, йола-традицияларҙың үтәлешен күҙәтеп барған формаль булмаған ойошманы "Аҡһаҡалдар ҡоро" тип атағандар. Ул төрлө ваҡытта, төрлө урында төрлөсә аталып та йөрөгән. Ҡыҫҡаһы, аҡһаҡалдар ошондай үҙенсәлекле цензор ролен башҡарып, милләттең тулы ҡанлы йәшәйешен тәьмин иткән.**
**Милләтһеҙ дәүләт булмай. Шулай булғас, һәр милләт үҙ дәүләтселеген төҙөгәндән һуң, "Аҡһаҡалдар ҡоро"ноң күп кенә вәкәләт-вазифалары дәүләт елкәһенә күсә. Был йәһәттән Башҡортостан үҙаллы автономиялы республика төҙөгәндән һуң, был ҡор эшмәкәрлегенең һүлпәнәйеүен дә ошо хәлгә бәйләп аңлатып булалыр. Ҡыҫҡаһы, "Диалог" рубрикаһы ҡунаҡтары: билдәле яҙыусы, "Аҡ тирмә" төбәк-ара башҡорт милли үҙәге янындағы "Аҡһаҡалдар ҡоро" рәйесе Ғәлим ХИСАМОВ менән халыҡ йырауы, яҙыусы, Учалы районы "Аҡһаҡалдар ҡоро" рәйесе Спартак ИЛЬЯСОВТЫҢ әңгәмәһендә һүҙ башҡорт йәмғиәтенең үҙәге булған "Аҡһаҡалдар ҡоро" хаҡында бара.**

**▶ Халҡыбыҙҙың үткәненә ҡарап, "Аҡһаҡалдар ҡоро" эшмәкәрлегенә ниндәй баһалар бирергә була?**

**С. ИЛЬЯСОВ:** Беҙҙең Барын-Табын ерендә "Аҡһаҡалдар ҡоро"ноң һуңғы күренекле шәхестәре - Өмөтхужа, Мөхәммәтйәр муллалар. Улар сама менән XVII быуаттың тәүге яртыһында, йәғни Һары Мәргән, Көсөк батыр етәкселегендәге ихтилалдар ваҡытында йәшәгән. Өмөтхужа беҙҙең яҡтың ҙур мәсьәләләре менән шөғөлләнгән. Әйтәйек, ырыу-ара ер бүлешеү, ырыу-ара ер күсерешеү, ырыу-ара килешеү, һуғыш һәм солох, ҙур матди байлыҡ, мәғдән сығарыу эше. Ә Мөхәммәтйәр мулла бәләкәй мәсьәләләрҙе хәл иткән. Әйтәйек, кәләш алыу, талаҡ, етем балаларҙы ҡарау, ат урлау осраҡтраын тикшереү һәм башҡа мәсьәләләр. Барын-Табындарҙа "Аҡһаҡалдар ҡоро" башҡа ҡәбилә-ырыуҙарға ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәгән. Ни өсөн? Сөнки беҙ урыҫ дәүләтенә ҡушылмағанбыҙ. Беҙҙән Ҡаҙанға һәм Мәскәүгә берәү ҙә бармаған. Беҙгә урыҫ дәүләтенең административ бүленеше тәү башлап 1710-1720 йылдарҙа ғына етә башлай. Беҙ хатта яһаҡ та түләмәгәнбеҙ. Урыҫ Урал аша беҙгә килгән, әммә Ләмәҙтамаҡ башындағы ҡаты һуғыштарҙан һуң ул кире киткән. Беҙ Күсем хан менән бәйләнештә торғанбыҙ. Тәбиғи ҡомартҡылар ҙа шул хаҡта һөйләй. Мәҫәлән, беҙҙә "Аҡһаҡалдар ҡоро"ноң Хөкөм ташы һаҡланған. "Өмөтөң ҡалмаһа, Өмөтхужаға бар", тигән әйтем дә бар. Әйтәйек, Мөхәмәтйәр мулла берәүгә ҡарар сығарһа, Өмөтхужа шул ҡарарҙы юҡҡа сығарыу хоҡуғына эйә булған. Хөкөм ташы янындағы ағасҡа хыянатсыларҙы бәйләп ҡуйып, уҡ менән атыр булғандар. Риүәйәттәр буйынса, әгәр ҙә ғәйепле кешегә күпме ҡамсы һуҡтырыу кәрәк булһа, Өмөтхужа ҡамсы һанын теле менән әйтмәгән, бармаҡтары менән күрһәтер булған. Табындарҙың бер өлөшө хәҙерге Ғафури, Архангель яҡтарына күсенеп киткән. Уларҙың китеү мәсьәләһен дә аҡһаҡалдар хәл иткән. Улар ике Ирәмәл араһынан шул яҡтарға күҙгалған, шуға күрә ул урынды Ырыу юлы тип атайҙар.

**Ғ. ХИСАМОВ:** Аҡһаҡалдар ҡоро - башҡорт йәмғиәтенең бер өлөшө булып элек-электән йәшәгән. Башҡорт халҡы яугир сифатында булһынмы, граждանлыҡ ойошмаһында йәшәһенме, йәмғиәтселек менән етәкселек итеүсе кешеләр төркөмө һәр саҡ булған. "Аҡһаҡалдар ҡоро" һуңғы ваҡыттарҙа, бигерәк тә совет осоронда "Аҡһаҡалдар советы" аҫтында формаль рәүештә бар ине. Ул һәр ауыл, ҡала һәм республиканың юғары советында булды. Юғары совет ултырыштары алдынан был совет йыйыла торғайны. Күп осраҡта был советҡа КПСС Өлкә Комитетының 1-се секретары етәкселек итте. "Аҡһаҡалдар ҡоро"ноң һуңғы рәйесе Миҙхәт Шакиров булды. Әлбиттә, был ойошма йәмғиәттең үҫешенә бер ниндәй ҙә йоғонто яһай алманы. Миҙхәт Шакиров, Өлкә Комитеттың 1-се секретары булараҡ, совет ултырышына тиклем бөтә мәсьәләләрҙе лә үҙе хәл итеп бөтә торғайны. Ә совет ағзалары иһә 1-се хәл иткән ҡарарҙы ҡул күтәреп раҫлай ғына торғайны.

Ә элек, Ибн Фаҙлан килеп башҡорттарҙы күргән ваҡытта ла, уға тиклем дә был ҡор булған һәм башҡорт йәмғиәтенең иң кәрәкле, иң мөһим, иң сетерекле мәсьәләләрен хәл иткән. "Аҡһаҡалдар ҡоро"ниндәйҙер мәсьәләне "А", тип хәл итә икән, ул ҡарар бер ваҡытта ла "Б"ға үҙгәрмәгән. Йәғни был ҡорҙа ҡабул ителгән ҡарар ҡанун дәрәжәһенә тиклем күтәрелгән. Бер генә кеше лә уны үтәмәҫкә хоҡуғы булмаған.



"Аҡһаҡалдар ҡоро"на йәмғиәттең иң абруйлы, һүҙе үткән, көсө еткән кешеләре ингән. Һәр бер ырыуҙа, арала йә ауылда хужа кешеләр, батырҙар булған. Әммә "Аҡһаҡалдар ҡоро"на уларҙың инеүе мотлаҡ булмаған. Мәҫәлән, Буранбай сәсәнде алайыҡ. Унын теле үткер, аҡылы етерлек, әммә ул был ҡорға инмәгән.

**▶ "Аҡһаҡалдар ҡоро" хатта совет осоронда дәүләт баҫҡысының бер өлөшө булған, тинек. Ә хәҙерге заманда был ҡор дәүләт баҫҡысының ниндәй урынын биләргә тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

**С. ИЛЬЯСОВ:** Үҙ-үҙен тәьмин итеп йәшәтеүсе милләттең үҙ-үҙен ҡурсалаусы ижтимағи баҫҡысы, үҙенә генә хас алымы була. Йәмғиәтте дәүләт баҫҡыстары менән генә сикләп йәшәтеү уны тутыҡтыра, уны тулыһынса асып биреүгә һәләтһеҙ була, уны бөгәрләндерә, йомарландыра, серетә. Шуның өсөн дәүләт баҫҡыстары йәмғиәттең тәбиғәт биргән, меңәр йылдар һыналған алымдарына ирек бирергә бурыслы, тигән фекерҙәмен. Шуның өсөн бигерәк тә хәҙерге ваҡытта халыҡ фекере көслө йоғонтоло булырға тейеш. Был беҙҙең меңәр йыл тупланып килгән тәбиғи байлығыбыҙ, фекеребеҙ, хәҙерге тел менән әйткәндә - институт. Милләттең фекер, аҡыл институты. Шуның өсөн дә беҙ һәр ваҡыт "Кеше һөйләмәһен", "Кеше ни әйтер?", "Әҙәмдән оят", "Ололар ни әйтер?" тигән һүҙҙәрҙе әйтеп, үҙебеҙҙең инаныуҙы башҡаларҙың ҡарашы менән нығытабыҙ. Былар ҡасандыр көслө башҡорт йәмғиәте йәшәгәнлеге тураһында һөйләй. Хәҙерге дәүләттең тәғлимәте, минеңсә, юҡ. Унын әхлаҡһыҙ алымдары меңәр йыл йәшәгән ижтимағи ҡанундарҙы юҡҡа сығарҙы. Уны "быҙау бәрәсе" кеүек мөйөшкә ҡыуалап һырыҡтырып, кәртәләп ҡуйҙылар. Шуның кеүек үк мөйөшкә ҡыҫылған динебеҙ һаман да урталыҡҡа сыға алмай. Уны йәмғиәт фекере үҙе сығарырға тейеш. Әгәр ҙә беҙ, мәҫәлән, дингә таянабыҙ икән, шул дингә бөтөн халыҡ таянырға, дини тәғлимәт халыҡты солғап алырға тейеш.

Хәҙерге дәүләт органы булған һәр кимәлдәге хакимиәт тик үҙен генә дәүләт баҫҡысы итеп ҡуя. Халыҡ фекерен ул дәүләт фекере кимәленә күтәреүҙән ҡурҡа. Халыҡ үҙе тыуҙырған әхлаҡи сәйәси йола институттары менән иҫәпләшмәй. Был бик үкенесле. Беҙҙең башҡорт халҡында, ғөмүмән, төрки халыҡтары араһында "Аҡһаҡалдар ҡоро" тигән тәбиғи рәүештә тыуған йоланы аяҡҡа баҫтырып, шул ҡорға ойошоп йәшәһә ине халҡыбыҙ. Хәҙер компартия ла, комсомол да, профсоюз да, ғөмүмән, халыҡ араһында ниндәйҙер тәғлимәт алып барыусы баҫҡыс юҡ. Ә "Аҡһаҡалдар ҡоро"н халыҡтың ғына түгел, дәүләттең юғалтҡан бер баҫҡысы итеп иҫәпләргә кәрәк. Үкенескә ҡаршы, хәҙер дәүләт органдарында, төрлө кимәлдәге хакимиәттәрҙә эшләүсе йәштәр бындай ҡорҙоң әһәмиәтен төшөнмәй. Мәғәнәһен, ни өсөн кәрәклеген аңламай. Уларға быны төшөндөрөүе бик ауыр, сөнки уларға был нәмә кәрәкмәй. Быны улар үҙҙәренә артыҡ мәшәҡәт, ҡаршылыҡлы көс итеп тоя. Үҙен ул иң аҡыллыға һанап, ҡаршы эшләп ултыра ул чиновник. Был урында ул бер йыл ултырамы, ике йылмы, әммә бар көсөн халыҡ фекеренә ҡаршы эшләүгә ҡора. Уларҙың күптәренә ҡарап көлкө лә, илағы ла килә. Әгәр ҙә "Аҡһаҡалдар ҡоро" аяҡҡа баҫып китһә, ул хакимиәттең үҙенә лә күҙ-ҡолаҡ булыр ине.

***"Аҡһаҡалдар ҡоро"н халыҡтың ғына түгел, дәүләттең юғалтҡан бер баҫҡысы итеп иҫәпләргә кәрәк. Үкенескә ҡаршы, хәҙер дәүләт органдарында, төрлө кимәлдәге хакимиәттәрҙә эшләүсе йәштәр бындай ҡорҙоң әһәмиәтен төшөнмәй. Мәғәнәһен, ни өсөн кәрәклеген аңламай. Уларға быны төшөндөрөүе бик ауыр, сөнки уларға был нәмә кәрәкмәй. Быны улар үҙҙәренә артыҡ мәшәҡәт, ҡаршылыҡлы көс итеп тоя. Үҙен ул иң аҡыллыға һанап, ҡаршы эшләп ултыра ул чиновник. Был урында ул бер йыл ултырамы, ике йылмы, әммә бар көсөн халыҡ фекеренә ҡаршы эшләүгә ҡора. Уларҙың күптәренә ҡарап көлкө лә, илағы ла килә. Әгәр ҙә "Аҡһаҡалдар ҡоро" аяҡҡа баҫып китһә, ул хакимиәттең үҙенә лә күҙ-ҡолаҡ булыр ине.***

**Ғ. ХИСАМОВ:** Һуңғы 20 йыл эсендә "Аҡһаҡалдар ҡоро" үҙенең эшен туҡтатып торҙо. Ни өсөн? Сөнки 90-сы йылдарҙың башында барлыҡҡа килгән хәрәкәт, шул иҫәптән милли хәрәкәт үҙенең эсенә бөтә нәмәне йотто. Әйтәйек, шул уҡ "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге милләт тормошона ҡағылған бөтә мәсьәләләрҙе лә хәл итергә һәләтле ине. Шулай булғас, бер үк функцияны башҡарған икенсе өҫтәмә структураның кәрәге булманы.

Һуңғы ваҡытта республика кимәлендә төҙөлгән "Аҡһаҡалдар советы" был юлы формаль рәүештә йәғни Хөкүмәт ҡарары нигеҙендә "Аҡ тирмә" йәмғиәте янында барлыҡҡа килде. Уны ойоштороу эшен Ләлә Бейешова менән миңә йөкмәттеләр. Ҡорға беҙ беренсе сиратта Өфөлә йәшәүсе кешеләрҙе индерергә тырыштыҡ. Ни өсөн? Сөнки совет тиҙ йыйылырға, ҡарарҙарҙы тиҙ ҡабул итерлек мобиль булырға тейешле. Әйтәйек, бына бөгөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында тиҙ арала ниндәйҙер ҙур ҡарар ҡабул итерлек мөмкинлек юҡ. Унда 80-гә яҡын башҡарма комитет ағзаһы ғына бар һәм улар Ер шарының төрлө төбәгендә йәшәй. Уларҙы бер урынға йыйғансы, күпме ваҡыт, көс һәм аҡса талап ителәсәк. Шул күҙлектән сығып, "Аҡһаҡалдар ҡоро" президиумы 17 кешенән барлыҡҡа килде. Улар барыһы ла Өфөлә йәшәй һәм улар төрлө ваҡытта республиканың төрлө власть органдарында, иҡтисад, сәйәсәт, сәнәғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт өлкәһендә эшләгән абруйлы кешеләр. Әле был ҡор ниндәйҙер глобаль мәсьәләне хәл иткәне юҡ.

Хөкүмәт ҡарарында һәр бер районда һәм ҡалала аҡһаҡалдар ҡорҙары барлыҡҡа килергә тейешлеге хаҡында ла әйтелгәйне. Шуның нигеҙендә хөкүмәт исеменән һәр район, ҡала хакимиәттәренә хаттар ебәрелде. Ҡарарҙа әйтелгәнсә, урындағы ҡорҙар 3-5-7-9 кешенән тороуы мөмкин. Иң тәүҙә ҡор йыйыла һәм үҙҙәренең йыйылышында етәксене һайлай. Әммә башланғысты район һәм ҡала хакимиәттәре хупларға тейеш.

**С. ИЛЬЯСОВ:** 2008 йылдың 18 сентябрендә республика Хөкүмәте сығарған 991-Р һанлы ҡарар тураһындағы хәбәр ҡолаҡҡа салынды. Ул ҡарарҙы беҙҙә бер кемгә лә кәрәкмәгән документ күреп, һалған да ҡуйғандар. Унын копияһын алдым. Үҙем ултырып уға нигеҙнамә яҙҙым. Аҙаҡ Өфөләге "Аҡһаҡалдар ҡоро"ноң 17 кешенән торған ағзаларының исемлеген дә күрҙем. Хөкүмәт ҡарары ҡабул ителеүгә 2 йыл үтеп китеп, бер нәмә лә эшләнмәгәс, шундай ҡарарға килдем: "Аҡһаҡалдар ҡоро" Өфөгә түгел, беҙгә кәрәк. Бигерәк тә хәҙерге ваҡытта кәрәк. Мәҫәлән, беҙҙең Учалы һәм Әбйәлил райондары ауылдары янындағы күлдәргә һәм

***✓ "Аҡһаҡалдар ҡоро" әлеге ваҡытта бер урында ла төҙөлмәгән, йәғни Хөкүмәт ҡарары һаман да һанға һуғылмай. Икенсенән, шундайын етди ойошманы "Аҡ тирмә" клубы янында төҙөү ҙә дөрөҫ түгел.***

# ҺАҠАЛЫ БАР,

## була алмай…

ауыл хужалығы ерҙәренә Силәбе өлкәһенең кешеләре ҡул һуҙа башланы. Улар төрлө юлдар һәм ошо уҡ ауылдарҙағы намыҫһыҙ кешеләрҙең ярҙамы менән ҡайһы бер уңыштарға ла иреште. Ә бит законда: "Бары тик ауыл сходы ғына был мәсьәләне хәл итә", - тип әйтелә. Тағы ла бер мәсьәлә, әйтәйек, үҙебеҙҙең электрик миңә: "Спартак ағай, бынау ҡағыҙға ҡул ҡуй: унда яҙылған буйынса беҙ бағанаға тиклем яуап бирәбеҙ, ҡалғаны - һинеке", - тип, минән ялған документҡа ҡул ҡуйҙырмаҡсы итә. Мин уларға: "Мин токҡа һуғылып үлһәм, һин яуап бирмәҫкә итәһеңме, һыуытҡысым йә телевизорым боҙолһа, һин яуап бирмәҫкә итәһеңме?" - тип ҡағыҙҙарына ҡул ҡуймай, кире бороп сығарҙым. Һуңғы йылдарҙа совет осоронда уҡ үткәрелгән электр энергияһы селтәре ныҡ иҫкерҙе, стабилизаторҙарҙы яңыртырға кәрәк.

Шул сәбәпле йорттарға электр энергияһы тигеҙ бирелмәй һәм шул арҡала күп кенә кешеләрҙең көнкүреш техникаһы янып эшлектән сыға. Законды белгән кешеләр эшлектән сыҡҡан техникаһы өсөн электриктарҙан суд аша түләтә лә башланы. Шуға күрә лә электриктар үҙҙәренең башынан себен осороп маташа. Ә күп кенә кешеләр, аңын-тоңон белмәйенсә, ошо ҡағыҙға ҡул ҡуйып ебәрә. Йәки булмаһа, эшҡыуарҙар ауылға алма килтереп һата. Алманың килоһы - 65 тәңкә, ә шундай уҡ алма үҙебеҙҙең магазинда 42 тәңкә тора. Башҡорт тоҡомло аттарҙың генофонды ситкә китә. Көнкүрешебеҙҙең бына ошондай мәсьәләләре лә бик күп. Уларҙы "Аҡһаҡалдар ҡоро" ҡарай ала.

Иң тәүҙә ҡор ойоштороу өсөн 11 кеше йыйылып, нигеҙнамәне уҡыныҡ. Шунда уҡ комитет төҙөнөк, мине ҡорҙоң рәйесе итеп һайлап ҡуйҙылар. Икенсе юлы 30-лаған кеше йыйылдыҡ. Беҙҙең районды бер осонан икенсе осона 150 саҡрым, унда 75 ауыл урынлашҡан. Ер мәсьәләһе бик киҫкен тора беҙҙә. Унда ла алтын йыуалар, бында ла. Пай ерҙәрен көсләп ғариза яҙҙырып, агрофермаға күсерттерәләр. Әле был мәсьәләләр буйынса конференция үткәрергә булғайныҡ, рөхсәт итмәйҙәр. "Спартак ағай, ул ҡор нимәгә кәрәк һуң ул? Беҙҙең "Ветерандар советы" бар бит", ти хакимиәт башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары. Мин уға: "Ҡустыҡайым, аҙыраҡ ян-яғыңды ҡара."Ветерандар советы" Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтҡан яугирҙәрҙе социаль яҡтан ҡурсалау нигеҙендә төҙөлгән ойошма ине. Хәҙер уларҙың иң "йәшенә" 86 йәш. Ә беҙҙең бурыс халыҡ мәнфәғәтен, башҡорт мәҙәниәтен, телен, иң мөһиме, ерен яҡлау. Мин бит һеҙҙән аҡса һорамайым, беҙ һорана торған ойошма түгел..." тип әйттем.

Ҡыҫҡаһы, "Аҡһаҡалдар ҡоро" әлеге ваҡытта бер урында ла төҙөлмәгән, йәғни Хөкүмәт ҡарары һаман да һанға һуғылмай. Улай булғас, ҡарарҙы юҡҡа сығарһындар. Икенсенән, шундайын етди ойошманы "Аҡ тирмә" клубы янында төҙөү ҙә дөрөҫ түгел, минеңсә. Уны Башҡортостан Республикаһы Президенты йә Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай янында ойошторорға кәрәк.

**▸ Башҡорт йәмғиәтен ойоштороп төҙөп буламы? Өҫтән ҡушып ойошторолған нәмә барыбер яһалма буласаҡ бит инде. Әллә ул үҙенән-үҙе, тормоштан йәғни үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙән үҫеп сығырға тейеш түгелме? Бөтә урында ла Спартак ағай һымаҡ кеше булһа, проблема ла булмаҫ ине. Революцияға тиклем ундай ҡорҙар беҙҙә булған, сөнки халыҡ тулы ҡанлы тормош менән йәшәгән, милләттең иҡтисады эшләгән…**

**С. ИЛЬЯСОВ:** Минеңсә, ундай сәсрәп торған егеттәр күп ул. Әле яңыраҡ Ишембай, Көйөргәҙе егеттәре менән бергә ял иттем. Был ойошма, һеҙ әйткәнсә, үҙенән-үҙе ойошһон өсөн ситуация кәрәк. Миҫалға Әбйәлил районының Өскүл ауылын ғына алайыҡ. Унда, мәҫәлән, ауылдың "Аҡһаҡалдар ҡоро" ситтәр килеп, ауыл янындағы күлдәргә ҡул һуҙа башлауынан һуң барлыҡҡа килгән. Тулы ҡанлы милли тормоштоң башланырын көтөп ултыра алмайбыҙ беҙ, киреһенсә, милләт тулы ҡанлы тормош менән йәшәһен, уның иҡтисады эшләһен өсөн кәрәк ундай ҡор.

**Ғ. ХИСАМОВ:** Форма һәр ваҡыт йөкмәткегә, йөкмәтке формаға тап килеүе мөһим түгел. Шуға күрә бындай ҡорҙо иң тәүҙә формаль рәүештә төҙөй башламайынса тороп, уның йөкмәткеһе лә барлыҡҡа килмәүе бар. Йәғни тарҡалып ятҡан башҡорт йәмғиәтен бөгөн йыйырға кәрәк. Бының өсөн әҙер формалар бар. Ул форманы төҙөһәк, уға йөкмәтке һалыу үҙебеҙҙән торасаҡ. Минеңсә, йәмғиәт өсөн иң кәрәкле мәсьәләләрҙе "Аҡһаҡалдар ҡоро"нда ҡарарға кәрәк. Кемдәрҙең ҡушыуы буйынса түгел, был мәсьәләне хәл итеү йәмғиәткә кәрәк булғаны өсөн ҡарарға кәрәк. Шул ваҡытта был йөкмәткегә халыҡ үҙе форма бирәсәк. Йәғни "Аҡһаҡалдар ҡоро" ошо рәүешле эшләрме, икенсе төрлөгә әүерелеп китерме, уныһын донъя күрһәтер. Әгәр ҙә "Аҡһаҡалдар ҡоро" үҙенең төп маҡсаты итеп ерҙе һаҡлау мәсьәләһен ала икән, был форманың йөкмәткеһе лә ергә бәйле буласаҡ.

**С. ИЛЬЯСОВ:** Беҙ әле күмәкләп "Зөлҡәрнәй шишмәһе"н һаҡлап ҡалыуға ирештек. Шишмәгә хужа булыуға дәғүә итеүселәр күпер һалырға, ҡойо ҡаҙырға вәғәҙә итә икән. Хужалар ошо хаҡта һөйләп, халыҡты ышандырырға тырыша. Мин һәйбәт кенә аңлатып биргәйнем, халыҡтың фекере ҡапыл үҙгәрҙе. Ситтәр буш ҡул менән ҡайтып китергә мәжбүр булды. Мин халыҡҡа ул саҡта: "Ана, ҡарағыҙ, беҙҙең атай-олатайҙар һатҡан ерҙә Миәс ҡалаһы ултыра. Ул ҡаланан беҙгә ниндәй файҙа бар? Ә был ерҙә беҙҙең киләсәктә тыуыр милләт вәкилдәре миллион йылдар йәшәргә тейеш әле..." - тип аңлаттым. Хәҙер бит ауылдарҙа ошондай аңлатып биреүселәр ҙә юҡ.



**▸ "Аҡһаҡалдар ҡоро"ноң иҡтисади базаһы булырға тейеш, тинек. Бөгөн ауылда ундай базаны кемдәр тәшкил итә ала, тип уйлайһығыҙ? Уҡытыусылармы? Почта йә медицина хеҙмәткәрҙәреме? Нимә генә тимәйек, ауылдың, әйтәйек, ауыл хужалығы ундай база була алмай.**

**Ғ. ХИСАМОВ:** Һәр бер ауылдың күҙ терәп торған кешеләре була. Беҙҙең ауылда өс ҡарт була торғайны. Уларҙың береһе ауылдың уртаһы, ҡалған икәүһе ике осо өсөн яуап бирә ине. Ауылдағы барлыҡ мәсьәләләр, ул силсәүиттең йә башҡа юғары органдарҙың ҡарарҙарын үтәү булһынмы, барыһы ла ошо өс ҡарт аша хәл ителде. Барыһы ла улар нисек әйтә, шулай тормошҡа ашырыла ине. Шуға күрә мин ауылдашым Тамара Ғәниеваға: "Беҙҙе атай-әсәйебеҙ генә түгел, йәмғиәт, ауыл халҡы ла тәрбиәләне. Беҙ - ауыл балалары, беҙҙе ауыл үҫтерҙе һәм милли ҡарашыбыҙҙы ауыл формалаштырҙы", - тием йыш ҡына. Мин 7 йәшлек сағымда урам аша сығып барам. Өлкән генә йәштәге апай минең үтеп киткәнде көтөп тора. Унан ни өсөн туҡтап ҡалыуын һораным. Ул: "Нисек уҙайым, һин бит ир кеше. Ҡатын-ҡыҙға ир кешенең юлын ҡыйыу ярамай", - тип яуап бирҙе. Ошоноң кеүек, ауылдың һәр бер ҡағиҙәһен, ғөрөф-ғәҙәтен шундай ҡарттар тикшереп, ҡарап, үтәтеп тора торғайны. Ҡарарҙы сығарыу - бер эш, уны үтәтеү мөһим. Ошондай кешеләр бөгөн дә һәр бер ауылда бар ул. Ундай кешеләр булмаһа, ауыл да булмаҫ ине. Ана шундай кешеләргә таянырға кәрәк. Үкенескә ҡаршы, шундай ауылдарҙа бар: уларҙың бергә йыйылыу маҡсаты - эскелек.

**С. ИЛЬЯСОВ:** Аҡһаҡал, тигәс тә, 70 йәшлектәрҙе генә түгел, һаҡалы бармы-юҡмы, 40 йәшлектәрҙе лә күҙ уңында тоторға кәрәк.

**Ғ. ХИСАМОВ:** Кәзәнең дә һаҡалы бар, ләкин ул аҡһаҡал була алмай бит.

**▸ Әле Рәсәй субъекттарын бергә ҡушып, ҡала һәм ауыл принцибы буйынса агломерациялар төҙөү тураһында ла һүҙҙәр булғылап алды. Кемеһененңдер башы етеп, был хаҡта һүҙҙе ҡуйыртманылар. Киләсәктә был мәсьәлә ҡалҡа ҡалһа, йәмғиәт нимә эшләй ала, әйтәйек, шул уҡ "Аҡһаҡалдар ҡоро"?**

***Һәр бер ауылдың күҙ терәп торған кешеләре була. Беҙҙең ауылда өс ҡарт була торғайны. Уларҙың береһе ауылдың уртаһы, ҡалған икәүһе ике осо өсөн яуап бирә ине. Ауылдағы барлыҡ мәсьәләләр, ул силсәүиттең йә башҡа юғары органдарҙың ҡарарҙарын үтәү булһынмы, барыһы ла ошо өс ҡарт аша хәл ителде. Барыһы ла улар нисек әйтә, шулай тормошҡа ашырыла ине. Шуға күрә мин ауылдашым Тамара Ғәниеваға: "Беҙҙе атай-әсәйебеҙ генә түгел, йәмғиәт, ауыл халҡы ла тәрбиәләне. Беҙ - ауыл балалары, беҙҙе ауыл үҫтерҙе һәм милли ҡарашыбыҙҙы ауыл формалаштырҙы", - тием йыш ҡына.***

**Ғ. ХИСАМОВ:** Агломерациялар хәҙерге заманда, асылда, ауылдарҙа йәшәүсе аҙ һанлы милләттәрҙе ҡалаларҙан "йоттороу" өсөн уйлап сығарылған сәйәсәт булыуы ла бар. Миллион һәм унан да күберәк һанлы ҡалаларға ваҡ ауылдарҙы йотоу бер нәмә лә тормай. 80-се йылдарҙа Генрих Киссенджерҙың "XXI быуатта Ер шары" тигән китабын уҡығайным. Унда "Нисек итеп Рәсәйҙе юҡҡа сығарырға?" тигән мәсьәлә үҙәк урынға ҡуйыла. Шул китапта яҙылғандар барыһы ла тормошҡа аша килә. Китапта агломерациялар төҙөү хаҡында ла әйтелә. Хрущев ваҡытында төҙөлә башлап, емерелгән совнаркомдар ҙа шул уҡ агломерация формаһында ине. Башҡортостанды, Татарстанды һәм ул саҡтағы Куйбышев (хәҙер Самара) өлкәһен берләштереп, бер совнархоз төҙөргә йөрөнөләр. Ул саҡта шундай ҡыҙыҡлы лаҡап та йөрөнө. Имеш, өс өлкәнең 1-се секретарҙары йыйылған да, яңы берәмекте нисек итеп атау хаҡында бәхәсләшәләр икән. Шул уҡ ваҡытта һәр өлкәнең 1-сеһе үҙенең төбәген берәмек атамаһының башына ҡуйырға тырыша, имеш. Шул саҡта беҙҙең 1-се секретарь берәмекте "БашТаК", Татарстандыҡы - "ТаБаК", Куйбышевтыҡы "КуТаБ" тип атарға тәҡдим иткән, имеш. Унда хатта Өфө һәм Стәрлетамаҡ өлкәләре барлыҡҡа килде, бер нисә район берләштерелде. Беҙҙең Күмертау районы Мәләүезгә берләштерелде.

**С. ИЛЬЯСОВ:** Беҙҙә Белорет, Учалы, Бөрйән райондарын берләштереп, Белорет районы төҙөнөләр. Уны район тип түгел, Белорет производство идаралығы тип атанылар. Киләсәктә беҙгә был ҡурҡыныс янай ҡалһа, был тәңгәлдә Рәсәйҙең аҙ һанлы милләттәре менән берләшергә тейешбеҙ. Ә милли ойошмаларға килгәндә, уларҙың барыһын да "Аҡһаҡалдар ҡоро" янына тупларға була. Агломерация хаҡында татарҙар нимә уйлай икән?

**Ғ. ХИСАМОВ:** Татарҙар барлыҡ милли ойошмаларҙы бер ойошма итеп берләштерҙе. Был йәһәттән уларҙың баштары етте, беҙ иһә - тарҡаубыҙ.

**▸ Бәлки, улар ошоноң менән татар йәмғиәтен төҙөгәндер…**

**Ғ. ХИСАМОВ:** Тарихи күҙлектән ҡарағанда, татар йәмғиәте башҡорттоҡонан ныҡ айырыла. Уларҙа, әйтәйек, "Аҡһаҡалдар ҡоро" бер ваҡытта ла булмаған. Телдәребеҙ яҡын булһа ла, беҙҙең иҡтисад та, сәйәсәт тә, әҙәбиәт тә, мәҙәниәт тә - береһе лә тап килмәй.

**С. ИЛЬЯСОВ:** Йәшәү рәүешебеҙ ҙә ныҡ айырыла. Беҙҙә иркенселек булғас, бошмаҫыраҡбыҙ, әммә ялҡау түгелбеҙ. Кемдеңдер килгәнен белдергәндә берәүҙәр беҙҙә "килеп ултыра", икенселәр "килә ята", тиҙәр. Был да байманлыҡтан килә. Байыраҡ кеше затлы ҡырандасына йә санаһына ҡырын ятып килә бит инде, ярлырағы атының эйәренә ултырып килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Һүҙебеҙҙе милләт һәм дәүләт мөнәсәбәттәрен билдәләүҙән башлағайныҡ. Ә бит зирәк аҡһаҡалдарыбыҙ милләтебеҙҙе тағы ла яҡлаулыраҡ һәм һаҡлаулыраҡ итеү өсөн уның дәүләтен төҙөгән. Шулай булғас, "Аҡһаҡалдар ҡоро"ноң яңынан ойошоуо шул уҡ дәүләттең изге бурысы булырға тейеш бит. Аҡһаҡалдарын һанламаған, уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалмаған дәүләткә, илгә ни һан?**

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**



Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# ТЫУМАҒАН УЛЫМ

**Повесть**

**(Гәзит варианты)**

Бүребайҙың эҙе буйлап күпме үтһә лә, таба алманы Хөсәйен. Эҙ яҙлыҡтыра белә бүре балаһы. Был хәл дә Хөсәйендең асыуын ҡабартты. Хәйер, был юлы Хөсәйен үҙе ҡапҡанға эләккән йыртҡыс хәленә ҡалманымы ни? Был баланың эҙенә төшөргә кәрәк. Яҡшы уй менән йөрөмәй ул! Эләктерәсәк уны Хөсәйен. Бер нисә саҡрым юлда Көһәпҡол аҡһаҡалдың йәйләүе. Көһәпҡол олатай эйәр-йүгән яһаусы, ат дағалаусы булараҡ дан алған. Бара биргәс, яңы ғына үткән ат эҙҙәре күреп ҡалды, эҙ егетте һыу буйына алып китте. Хөсәйен һағайҙы. Уҡ-янын әҙер тотоп, йылға буйына килеп етте. Яҡын тирәлә әҙәм заты күҙгә салынманы. Бер киткәс, аръяҡҡа сығырға тура килер, тип уйланы Хөсәйен. Шул саҡ һыу эсендә кемдеңдер башы күренде. Хөсәйен йәһәт кенә боҫто. Был Бүребай булырға тейеш, ана бит уның йәшел сәкмәне, ҡорал-монаяты ла шунда ғына. Бөтәһен дә йәшерергә була, ә ҡоралһыҙ кешене әсир итеүе сүп кенә... Юҡ, үҙен көтөргә кәрәк. Хөсәйенде күрһә, нимә эшләр икән? Бүребай һыуҙан сыға башланы, күлмәген дә һалмаған бит әле, уны һыпырып булыша. Күлмәк аша беленер-беленмәҫ кенә ҡалҡыу түш... Хөсәйен саҡ артына йығылып китмәне, ҡурҡыуынан хатта йыуан ағастың олонона йәбеште. Күҙгә күренәме?.. Ҡыҙ кешеме?!.. Был нимә? Әллә, ысынлап та, күҙҙе быуа белгән ен-пәрейме?

Ул ике арала "шайтан" кейенеп өлгөргәйне инде. Хөсәйен иплләп кенә кире килгән яғына шыуышты. Атына менеп өлгөрһә, бөттө! Әллә ни алыҫ китергә өлгөрмәне ул. "Шайтан" үҙе ҡыуып етте.

- Эй, һин, ҡайҙа шул тиклем ҡабаланаһың? Атыңды бире ҡыуамы әллә? Был мин - Бүребай. Эй, ҡатығолаҡ, нишләп теге ваҡыт бей улы икәнеңде әйтмәнең миңә! Мин быраҡтырып киткән теге өшәкәйҙәрҙе бала-сағаға таратҡанһың. Күңелең яҡшы икән.

Хөсәйен йән асыуы менән ҡысҡырып ебәрҙе.

- Юғал күҙ алдымдан, ен алғыры! - Атын йәһәтләп ситкә ҡыуҙы. - Тай, тием, был тирәнән!..

- Туҡта, ә нишләп йөрөйһөң әле һин был тирәлә, бей улы?

- Һөйләшмәйем мин һинең менән!

- Бей улына килешмәй былай ҡыланыу.

- Һы... Ни атлы һин?

- Бүребай! Оноттоңдамы, йөрөйһөң шунда атаң данына маһайып!

- Хәтерем шәп минең. Тик былдай исем...

- Мин Ишҡар бейҙең ҡәҙерле ҡунағына, тап йөрәгенә хәнйәр һелтәй ала инем. Һин килеп баҫмаһаң, шулай ҙа булыр ине. Тик беҙ изгелекте онотмайбыҙ. Гәрәй ағайҙы ҡотҡарғаның өсөн ҡунағыңдың йәнен аяным...

- Һиңәме инде... Ҡоралһыҙ балапан!

- Ә минең билдәге елле мөгөҙҙө күрҙеңме? Ул кәрәк саҡта хәтәр ҡоралға әйләнә. Бер тапҡыр ҙа яҙлыҡҡаны юҡ әле!

- Тағы күҙемә эләкһәң, аяу көтмә!

- Йылан... - тине Бүребай.

Хөсәйен шунда ғына үлән араһына инеп киткән йыланды күрҙе, йәһәт кенә тегенең башын өҙә сапты.

- Күтәр балағыңды...

Ағыуҙы һурып төкөргәндән һуң, сағылған урынды быуҙы. Тағы ситкәрәк барып баҫты. Ҡалдырып та китә алмай, яҡын да бара алмай. Бына бит ниндәй хәлгә тарыны ул.

- Атҡа мендереш.

- Юҡ. Һин ҡыҙ бала.

- Мин яугир. Ә һин ҡурҡаҡ.

Телен тешләгән Хөсәйен уға күҙен секерәйтеп ҡарап алды. Ысынлап та, ул бит ҡыҙ балаға ҡағылмай, ә ауырыу кешегә ярҙам итә. Шулай тип уйлағандан һуң, тегене ялп иттереп күтәреп алды ла эйәргә ултыртты. Ҡыҙҙың эҫе тыны биткә бәрелгәндәй булды. Әллә нимә эшләп китте шул саҡ, тәне буйлап аңлайышһыҙ тулҡын бәреп үтте. Ҡыҙ баланы күтәреү түгел, беренсе тапҡыр янда тойоу. Улай ғынамы һуң, һөйләшкәне лә юҡ ине лә баһа! Тағы йәһәтерәк ситкәрәк атланы.

- Тау иңендә Көһәпҡол олатайҙың йәйләүе. Күҙ асып йомғансы барып етерһең... Йә, ярар, апарып ҡуйышырмын...

...Ҡайтышлай, юл буйы уйланды Хөсәйен. Көһәпҡол ҡарт юлдашының ҡыҙ бала икәнен беләме, әллә уның өсөн Бүребай атлы малай ғынамы? Ҡарт ҡайҙан белһен ти инде. Хөсәйен үҙе лә бит яңылыштануйламағандан ғына... Улайһа, ни өсөн һуң үҙе юлдашының ҡыҙ кеше икәнен аңғартманы? Хөсәйен был һорауына яуап таба алманы. Малай ҡиәфәтендәге ҡыҙ. Ҡот осҡос хәл. Был бит гонаһ. Ниндәй яҙмыш был хәлгә төшөргән? Ни өсөн "ҡыҙ бала" тип атауына шул тиклем ҡәһәтләнде? Нишләп шул тиклем яугир исемен йөрөткөһө килә? Ә бит йөрәтөрлөк оҫталығы ла, оһоллоғо ла бар...

Ҡыҙ баланы беренсе мәртәбә атҡа мендереүе, уның тән ҡайнарлығын тойоу Хөсәйенгә шул тиклем тәьҫир итте, йөрәге хатта күкрәк ситлегенә һыймай ярһып, дарҫлап типте. Был тойғо уны бер нисә көн ташламаны. Бүребайға ниндәй мөнәсәбәттә булырға - ҡыҙ бала тип ҡарарғамы, әллә, үҙе әйткәнсә, яугир тип кенә танырғамы? Башта әллә күпме һорауҙар ҡайнаны. Былдай осраҡта кәңәш һорар кеше лә юҡ. Йомағужа дуҫы сер тота белә, ләкин уға һөйләгәндән фәтүә юҡ. Хәйер, дуҫының башҡа хәстәр, өйләндерәләр уны, кәләш әйттереп йөрөүҙәре. Кемгәлер үсле, кемдәндер ҡон көһәй шикелле Ҡараслан яғында Хөсәйен тап иткән кешеләр. Бүребай шуларҙың береһе. Алдан әйҙәп йөрөүселәренән булмағайы... Урман ене ҡағылған был заттың күҙҙәрендәге ут бер уны ғына һиҫкәндермәгәндер.

Бүребай өсөн, ысынлап та, сит биләмә тигән төшөнсә юҡ. Был ен ҡыҙында бүре йылғырлығы ғына түгел, бүре һиҙгерлеге лә бар. Хөсәйендең ҡайҙа барырын да белеп кенә тора, тиерһең. Көтмәгәндә пәйҙә була, уға башҡаны үҙ хәбәренә әүрәтеүе бер ни тормай. Хәйер, хәбәрҙән бигерәк, мәргәнлектә көс һынашыуы, үлеп китеп ат сабышы менән мауығыуы ҡыҙыҡ. Әллә ниндәй сәм бар унда. Майҙан-йыйындарға ҡапыл барып төшә, ҡапыл юҡҡа сыға. Уның хәрәкәте Хөсәйенгә лә күсте шикелле. Бүребайға ҡарата аптырау-ҡаушауы тора-бара ҡыҙыҡһыныу менән алмашынды, хәҙер иһә ул төшөнкөлөктөң нимә икәнен дә белмәгән, ауырлыҡҡа бер зарланмаған, мажараларҙан ҡурҡмаған һыбайлы яугиргә ниндәйҙер һоҡланыу аша ла баға һымаҡ. Түҙемле булыуы, кәрәк саҡта үҙен, яҡындарын яҡлай алыуы насар сифат түгел.

- Бей улы, нишләп улай тексәйҙең?

- Нисек ҡарайым һуң?

- Аусы күҙе! Үҙе үткер, үҙе һаҡ. Мин дә һиңә шулай ҡарай алам, тик ул саҡта уҡ-яным ҡулда булыр!

- Нишләп уҡ-ян?

- Мине шәп аусылар баҡты, бына шуның өсөн!

Ҡыҙ бала, имеш. Тфү. Хата уйың, йәшертен өмөтөң арҡаһында үлемеңде табыуың да бар бит был әҙәмдән... Их һин, Хөсәйен!.. Улар икеһе ике донъянан, Хөсәйен аръяҡҡа сыҡмаясаҡ, яугир ҡыҙ бирьяҡҡа атламаясаҡ. Егет үҙе лә һиҙмәҫтән атын ситкә борҙо.

- Йә әле, малҡай!

- Сеү!..

Бүребайҙың ҡолағы ҡарпайҙы. Башын йәһәт кенә уңға-һулға борҙо.

- Кемдәрҙер йөрөй...

- Йөрөй бирһендәр. Нишләп шул тиклем һағайҙың?

- Асыуланма миңә, Бүребай. Был ерҙәр беҙҙең ырыуҙыҡы.

- Әллә һин бөтә ерҙә лә рөхсәт һорап ҡына йөрөйҙәр, тиһеңме?

- Һиңә кеше тауыштары ишетелдеме? Күпме?

- Күп түгел, бер-ике кеше.

Бүребайҙа - бүре ҡолағы, Аттарын ул ымлаған яҡҡа борҙолар. Бер аҙҙан, тыйнаҡ ҡына көлгән ҡыҙ тауышы ишетелде, йәнә туҡтап ҡалдылар. Аҫта бик матур күренеш асылды. Тауыш шишмә яғынан килә. Йәшел елән кейгән, башына ҡыҙыл сәскәле яулыҡ ябынған ҡыҙ ижау менән һыу ала. Бына ул эргәһендәге егеткә услап һыу һипте лә, көлә-көлә ары йүгерҙе. Оҙон итәгенә саҡ эләгеп йығылманы. Тағы йүгерҙе. Тағы эләкте. Ул арала ире килеп уны күтәреп алды.

- Киттек был тирәнән! - тине Бүребай нимәгәлер борсолғандай.

Хөсәйен һаман теге ике бәхетленән күҙен ала алманы.

- Нимә булды һиңә? Ишетмәйһеңме ни?

Хөсәйен йылмайҙы. Был уның дуҫы Йомағужа. Күптән түгел өйләндерҙеләр. Бына кәләшен ҡырға алып сыҡҡан.

- Улар өсөн бөтөн донъя - сәхрә. Йәннәт. Кейәү менән кәләш бит улар. Яңы ғына туйҙары булды.

- Атаҡ, улар йүгереп ярышырға тейештәрме ни?

Инде Хөсәйендең көлөүе тирә-яҡты яңғырата. Шунан теге ике бәхетлене - Йомағужа дуҫын һәм уның кәләшен - өркөтмәҫ, сихри хозур мәлдәрен боҙмаҫ өсөн атын йәһәтләп ситкә ҡыуа.

- Бүребай, һин ҡырағай ҡыҙ бала, Бүре... Аҡбүре, ҡайҙа үҫтең ул?!.

Бүребай атының ауыҙлығын шаҡарҙы. Ҡысҡырып ебәрҙе.

- Ҡайҙан беләһең минең исемде?!

- Ул минең күңелемдә яҙылған...

- Атайым ғына шулай ти. Бүтән берәү ҙә әйтмәй! Белдеңме! Мин...

- Беләм, яугир. Беләм, сәнжәр. Ләкин миңә һин Аҡбүре. Мин һине үҙ исемең менән атаясаҡмын. Аҡбүре! - тине ул етди тауыш менән. - Был ике йәш кеше башта егет менән ҡыҙ ине, хәҙер улар - кейәү менән кәләш. Балалары тыуғас, атай менән әсәй булып китәсәктәр. Ҡартайғастары бабай менән әбейгә әйләнәсәктәр. Ә балаларының балалары уларҙы "ҡартатай" менән "ҡартәсәй" тип йөрөтәсәк.

- Беләм мин ҡартатай менән ҡартәсәйҙе!

- Йомағужа - минең ҡорлашым. Кәләшен күрҙең бит. Ул һинең заттан. Быны һин белергә тейеш.

Быны ишетеү менән Бүребайҙың йөҙө ҡарайҙы. Аҫтан һөҙөп ҡарап алһа ла, бер нәмә лә өндәшмәне. Һүҙһеҙ генә бара бирҙеләр. Бер аҙҙан Бүребай ҡулындағы хәнйәрен уйната-уйната шулай тип һораны.

- Бей улы, тағын да бер нәмәгә яуап биреп ҡара! Кейәү менән кәләш ауға гел бергә сығасаҡмы? Ҡарымта-барымтаға йөрөгәндә нисек?

- Юҡ! Кәләш йортто, бала-сағаны ҡарай. Кейәүе һунарҙан ас ҡайтмаһын өсөн тамаҡ әҙерләп тора.

- Китсәле! Ҡалай уға ҡыйын!

- Кәләш - йорттоң нуры. Ул өйҙә торғанда донъя имен, тыныс һәм бөтөн була.

- Ундай эште белмәгән кәләш нимә эшләргә тейеш? Белгәнен эшләргәме? Мәҫәлән, һунарға йөрөй бит инде ул?

- Яу сабыу, һунар йөрөү - ирҙәр эше.

- Юҡ! Уйлап сығарма бушты! Ул оҫтаның эше! Күрҙеңме минең ҡулдағы хәнйәрҙе. Ә һин беләһеңме, мин күпме...

- Кәләш яратыр өсөн кәрәк. Кейәүе уны яратһын, ҡәҙерләһен өсөн.

- Ошо урман-тау, бөтә тирәйүн минеке...

Бүребай атынан һикереп төштө лә ҡулын ян-яҡҡа йәйҙе. Шундай матур, шундай нурлы ине уның күҙҙәре. Әгәр ҙә Аҡбүрене кейәүгә бирһәләр, иренең ышанырслы таянысы буласаҡ, балалары ла ышанысылы ҡанат аҫтында үҫәсәк. Кәрәк икән, ире менән йәнәш ҡулына ҡорал алып, илен яҡлап яуға күтәреләсәк, ирен дошмандар үлтергән хәлдә, ырыуҙы тоторлоҡ көсө лә, аҡылы ла етәсәк. Хөсәйендең йөрәге дөпөлдәргә керешәте. Йә Хоҙа, ниндәй уйҙар килә башына? Үҙе һиҙеп ҡалмаһын, ул бит Яубикә. Ысынлап та, Яубикә! Ҡылысы ҡынында. Шулай ҙа күңеле менән ул ҡыҙ бала, уның да йөрәге асылыр һәм донъяға фәҡәт яугир генә булып баҡмаҫ бит!

- Бөтөн донъяла ике генә йән бар - егет кеше һәм ҡыҙ бала!

Хөсәйен уның күҙҙәренә тултырып ҡараны.

- Ә хәнйәрең минең ҡулда. Һин ҡоралһыҙ! Һәрпәгең дә, ана, ерҙә ята! Асығауыҙ батыр була алмай! - Бүребайҙың тауышы шат яңғыраны.

Хөсәйен уға күҙен ҙур асып ҡараған килеш ҡатты. Атына атланған Бүребай тағы сабып китте.

- Ә йылғырлыҡта миңә етә алмайһың, бей улы!

- Нишләп етә алмай тигән, мына ҡыҙыҡ!

- Кәүҙәң ауыр. Ә һин матур итеп көләһең. Һинең менән рәхәт,- тине Бүребай-Аҡбүре.

- Әле көлмәйем дә баһа.

- Байуҡ көлдөң бит. Һаман да шул ҡолаҡта сыңлап тора.

- Әһ-һә, шулаймы ни әле! - Ҡыҙҙың тәңгәленә еткән Хөсәйен йәһәт кенә тегене эләктереп алды. - Беҙ һинең менән бына тигән кейәү-кәләш булырбыҙ!

**(Дауамы бар).**

ҺАЙ, БАШҠОРТОМ ЙОЛАЛАРЫ!

# ТАУЛЫҠАЙҘАР ҺУҒЫМ ҺУЯ

**Ҡыштың һаран ҡояшы уянмаҫ элек, ауыл өҫтөндә тәмле май еҫе таралды. Йәш килендәр ашығып мунсаһын тоҡандырҙы, ҡайҙалыр ир-егеттәрҙең көңгөр-ҡаңғыр һөйләшкәне ишетелеп ҡалды. Ағинәйҙәрҙең "Әйҙәгеҙ йәһәтерәк, ҡояш ҡалҡмаҫ элек ирҙәргә сәй эсереп, әйберҙәрен йүнләп биреп, кәртәгә сығарырға кәрәк", тигән бойороулы тауышы ла ишетелеп ҡалды. Ауыл өҫтөндә ниндәйҙер бер тантана, байрам йәйгоро күтәрелгәндәй булды.**

Эйе, халыҡтың көтөп алған һуғым мәле етте. Таулыҡай ауылында йәшәгән, кәртә тултырып мал аҫыраған Зөбәйрә Дәүләтҡол ҡыҙы һәм Әгзәм Ғәлләм улы Сәлиховтарҙың ғаиләһе өсөн дә бәхетле мәшәҡәт көнө башланды. Кистән хужа һәм хужабикә һуғым һуяһаҡ ир-егеттәрҙе, эсәген эшкәртәсәк килендәрҙе, ҡаҙы тултырасаҡ ҡатындарҙы барланы. "Тайҙы йығыуы еңелдән түгел, әмәлгә, йыл да бергәләшеп мал һуйған Сәлиховтар араһы таһыллығы, тәжрибәһе менән айырылып тора", тип уйлап ҡуйҙы Зөбәйрә апай.

Хужабикә килене Рәғиҙә менән алдан аш-һыу яраштырҙы. Ә таң һарыһы беленеү менән төрлө май икмәктәре, бәлештәрен бешерергә тотондолар. Шулай булмай ни, һуғым һуйыу һәр ғаилә өсөн оло байрам, ә был көндө өҫтәлең һый-нигмәттән һығылып торорға тейеш.



Ир-егеттәр тәмле иртәнге сәйҙән һуң һуғым өсөн аҫыралған тайҙы салырға сыкты. Хужабикә уларға йылы һыу, клеенкаһын, таҫтамалдарын тоттороп, өйҙә ҡалды. Башҡа ерҙә нисектер, беҙҙең яҡтарҙа көсһеҙ зат вәкилдәре малды йыҡҡан, бигерәк тә салған мәлдә күрергә тейеш түгел. Был элек-электән шулай килә. Күрәһең, ата-бабаларыбыҙ ҡатын-ҡыҙҙың нескә күңелен, һиҙгер йөрәген шул рәүешле һаҡларға ынтылғандыр. Малды салғандан һуң, хужабикә ярҙамсыларын эйәртеп, тас-биҙрәләрен тотоп, үҙ эшен башланы. Уларҙың тилбер ҡулдарына күҙ эйәрмәне. Эйе, ҡышҡы ҡыҫҡа көндә салынған малды эшкәртеп өлгөрөүе мөһим. Шулай уҡ һуғым һуйырға йыйылыусыларҙы ашатыу, кискелеккә бишбармаҡ әҙерләп, ҡунаҡ йыйып алыу ҙа йылдан-йыл ҡабатланып килгән йолаға әүерелгән. Эсәк артып, ҡарын таҙартылғас, рәшәткәләргә эленгән итте өйгә ташып, урынлаштырыу эше башланды. Олораҡ ағайҙар: "Маладис булып сыкты хужа, иттең арыу булыуы күренеп тора, күпме майы сыкты!"-тип хужаны маҡтап алдылар. Унан малды һимертеү өсөн нисек тәрбиәләргә кәрәк икәнлеге тураһында бәхәсләшеп алдылар. Кемдер малға емде ҡоролай, кемдер өйрә итеп әҙерләү отошлораҡ тип иҫбатланы.

Ә был ваҡытта өйҙә тәмле ит еҫе таралып та өлгөргәйне. Кискелеккә мул итеп һалынған иттән тыш, ваҡ-ваҡ итеп туралған һуғаны ҡушылған, итле картуф әҙер ҙә ине. Һуғым һуйыусылар донъя хәлдәре тураһында һөйләшеп, оҫта ҡуллы хужабикәне маҡтай-маҡтай ашарға ултырҙы. Ә ҡатындар иһә эсәкте бешекләне лә, ҡаҙы тултырыу эшенә - эсәк айырыу һәм ит ҡырҡыуға тотондо...



Зөбәйрә Дәүләтҡол ҡыҙы һәм Әгзәм Ғәлләм улы Сәлиховтар йылҡы һуғымынан тыш, йыл һайын 20-30 ҡаҙ ҙа һуя. Шуныһы әһәмиәтле, уларҙың берҙән-бер улдары, кесе балалары Таһир күршелә генә йәшәй. Аталы-уллы уртаҡ малға бер кәртә-ҡура тота. Оло лар ҡаҙҙы күпләп алһа, йәш ғаилә өйрәкте утыҙҙан кәм алмай. Шуға күрә Сәлиховтарҙың ҡаҙ өмәһе лә үҙе бер һабантуйға әүерелә.

Әгзәм Ғәлләм улын аҡһаҡалдай күреп ололоҡлай ауылдаштары, шуға ла уның фәһемле һүҙҙәре, кәңәштәре һәр саҡ урынлы яңғырай. Бына был юлы ла ул эш араһында ошондай фекерҙәре менән уртаҡлашып алды:

- Беҙҙә ер туйҙырыуын онотмаһаҡ ине. Ялҡаулыҡты, йоҡоно ситкә ҡуйып, эшләргә лә эшләргә. Быйылғы ҡоролоҡ күп крәстиәндәр өсөн ауыр һынау булды. Малын бөтөнләй бөтөргәндәр ҙә бар. Ә артабан улар нисек йәшәйәсәк? Беҙҙең ғаиләгә бесән етештереү өсөн күп көс түгергә тура килде. Әмәлгә, үҙебеҙҙең трактор, йөк машинаһы бар. Шулай ҙа бесәнде өҫтәп Ырымбур өлкәһенән һатып алдыҡ. Малды бөтөрөү тураһында уйлауы ла ҡурҡыныс. Күпләп үрсеткән һарыҡ малы булғас, йәйгеһен дә иттән өҙөлмәйбеҙ. Ә ейән-ейәнсәрҙәрҙе итһеҙ нисек үҫтерәһең? Уларҙың организмы өсөн аш, һурпа, ит көн дә кәрәк.

Хәҙер беҙ көн-төн иҡтисади көрсөк тип һөйләгәндәренә күнегеп киттек, буғай. Кешенең күнелендә, һыҙатында ялҡаулыҡ булмаһа, уға бер ниндәй ҙә көрсөк ҡурҡыныс түгел. Тырышлыҡ ҡына кәрәк. Әлбиттә, үтә ныҡ байҙар һәм фәҡирҙәр барлыҡҡа килгән йәмғиәттә йәшәүе еңелдән түгел. Шулай ҙа ер кешеһе тупраҡтан айырылмаҫҡа, мал-тыуарҙан яҙмаҫҡа тейеш.

Ауылыбыҙҙа һуғым һуйыу йолаһы һаҡланып ҡалғанға бик шатланам. Бына бит, бер ял көнө эсендә Таулыҡайҙа ғына күпме ғаилә ҡышҡылыҡҡа һыйыр, йылҡы малы әҙерләне. Халыҡтың берҙәмлеге, татыулығы шатландыра. Ә унан алда нисәмә аҙна буйы ҡаҙ өмәләре гөрләне. Әлбиттә, ҡайҙалыр онотҡанда бер ҡош итенә лә риза булып ултырғандар бар саҡта, ауылдаштарымдың ҡаҙ итенә генә хушһынмай, һарығын да, һыйырын да, йылҡыһын да һуйып алыуы ғорурлыҡ тойғолары уята. Йыл һайын шундай һуғым байрамдары насип булһын инде.

...Һый-нигмәттән һығылып торған табын артына һуғым ашына саҡырылған ҡунаҡтар йыйыла ла башланы. Уларҙың һәр береһе хужа-хужабикәгә иң изге теләктәрен еткерҙе, кемдер "Онотмағыҙ, иртәгә беҙгә һуғымға", икенсеһе "Ә киләһе ялға беҙгә" тип саҡырып та өлгөрҙө. Эйе, ауылдарҙа иң матур мәл - һуғым һуйыу һәм бишбармаҡҡа саҡырышыу башланды. Хужабикәләр аш-һыуға булған оҫталығында ярышһа, ғаилә башлыҡтары һуғым малын тәрбиәләү, көрәйтеү буйынса алдынғылыҡты бирмәҫкә тырышты. Хәйер, был ярышҡа әҙерлек күпкә алдан, йәйгеһен үк башлана. Киләһе Яңы йылда ла һәр ғаиләгә һуғым ите әҙерләү, уны матур табында, изге уй-ниәттәр менән яҡындарығыҙ, дуҫтарығыҙ менән ашарға насип булһын.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**
**Баймаҡ районы.**

ШУЛАЙ ИТЕП...
ЗӨБӘЙРӘ ИНӘЙҘӘН АШ-ҺЫУ КӘҢӘШТӘРЕН ТӘҠДИМ ИТӘБЕҘ:

### Тултырма әҙерләү

Иттең бауырын, майын, йөрәк, бөйөрөн, һуғанды ваҡ итеп турарға (ит турағыс аша үткәргәнгә ҡарағанда туралған тултырма күпкә татлыраҡ була). Уға тоҙ, борос, әгәр теләгегеҙ булһа, бүрттерелгән дөгө ярмаһын ҡушырға һәм эсәктәргә тултырырға.

### Ҡаҙы

Эс ҡаҙыһы әҙерләү өсөн эсәктәргә эс майы ғына тығырға. Туралған һарымһаҡ та ҡушырға була. Ҡабырғалы ҡаҙы әҙерләү өсөн ҡабырға ите һыҙырып алып, эсәккә тултырыла. Бында лә тәм өсөн һарымһаҡ ҡушырға мөмкин. Ҡаҙыны һуғымды һуйғандың икенсе көнөнгә әҙерләүе еңелерәк.

### Ҡаҙ ите тәмле булһын өсөн

Ҡаҙҙарҙы таҙарткандан һуң, уларҙың эсе-тышына тоҙ һөртөп, бер көн өйҙә тотоғоҙ. Бындай ит тәмлелеге менән айырылып тораҫаҡ.

ҺЕҘҘӘ НИСЕК?



# ӨЙӨГӨҘҘӨ ШЫРШЫ БИҘӘЙМЕ?

**Яңы йыл балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә көтөп алған мөғжизәле байрам. Ә йәшел шыршы һәм уйынсыҡтар уның мөғжизәлелеген тағы ла арттыра. Кемдер бер-ике тапҡыр ғына шыршы биҙәп ҡарай ҙа, һуңынан уны мәшәҡәтле эш тип, байрамды йәшел һылыуҡайһыҙ ғына үткәрергә өйрәнеп китә. Бәгзеләр иһә балаларына шатлыҡ бүләк итеү ниәтенән йыл һайын өйөнә шыршы алып ҡайтып биҙәй. Шундай ғаиләләрҙең береһе - баш ҡалала йәшәүсе Әлиә менән Азамат Ғариповтар. Һүҙ - уларға.**

**Әлиә.** Мин бәләкәй саҡта ата-әсәйем һәр Яңы йыл байрамына шыршы ҡуя, беҙ уны биҙәй инек. Шыршы бала саҡты иҫкә төшөрә, шуға ла беҙ балаларыбыҙға йыл һайын шыршы ултыртырға ғәҙәтләндек. Балалар шыршы күргәс кенә байрам килгәнен тоя, уларҙың шатланғанын күреү - үҙе оло бәхет. Йәлилгә 15 йәш, Шәүрәгә 9 йәш булһа ла, шыршы ҡуйыуҙы яраталар. Әммә быйыл беренсе тапҡыр Шәүрәнең, шыршы бик йәл, аҙаҡ уны сығарып ташларға кәрәк, әллә яһалма шыршы ғына ҡуяйыҡмы икән, тигәнен ишеттем. Хәҙер күмәкләп уйлашабыҙ. Тере шыршы булмаһа, яһалма шыршы булһа ла ҡуясаҡбыҙ. Балалар бәләкәй саҡтарында шыршы аҫтына Ҡыш бабайҙың бүләк һалып киткәнен көтә торғайны. Хәҙер инде аңлайҙар, шулай ҙа улар өсөн шыршы төбөнән бүләк табыу үҙе бер ҡыуаныс.

**Азамат.** Шыршы биҙәү беҙҙең ғаиләлә йыл һайын ҡабатлана торған матур йола. Мин үҫкәндә лә атай-әсәйем Яңы йылға даими шыршы биҙәй ине. Уны биҙәүҙең иҫ китмәле үҙенсәлектәре булмаңы. 1968-1969 йылдарҙа атайым Мәскәүҙән мандарин алып ҡайтты, ә беҙ уларҙы уйынсыҡтар урынына элеп, шыршыны биҙәнек. Шулай уҡ Яңы йылға стена газеталары сығарыуыбыҙ иҫтә ҡалған. Ағайым шиғырҙар яҙа, беҙ йырлап, шиғырҙар һөйләп, үҙебеҙсә бәләкәй генә ғаилә байрамы ойоштора инек.

Үҫә бара Яңы йыл мөғжизәһенә лә ышанмайһың, Ҡыш бабайҙы ла көтмәйһең, әммә хәҙер инде балалар ыңғайына булырға кәрәк. 9 йәшлек ҡыҙыбыҙ өсөн байрам ойоштормабыҙ. Ул һаман мөғжизәгә ышана әле. Ә әлеге ваҡытта мин баш ҡаланың боҙ ҡаласыҡтарын эшләү менән мәшғүлмен, баш ҡала балалары өсөн дә байрам, мөғжизә тыуҙырыуҙа ҡатнашам.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Күптәр бөгөн бәләкәс ҡыҙ Шәүрә кеүек уйлай, йәғни йыл да меңдәрсә шыршының ғүмерен өҙөүгә ҡаршы сыға. Йомортҡа тауыҡты өйрәтмәй, тиһәләр ҙә, халҡыбыҙҙа "Бер олоно, бер кесене тыңла", тигән мәҡәл дә бар бит әле. Шуға ла халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың ейәнсәре Шәүрәнең һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, бәлки, Яңы йылды яһалма шыршылар биҙәп ҡаршы алырбыҙ, йәмәғәт?..**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ЫШАНҺАҢ - ЫШАН

**Тупһабыҙҙа - Аҡ ҡуян йылы - хыялланырға яратыусылар, дипломаттар, философтар һәм үҙ эшенең оҫталары йылы. Көнсығыш йондоҙлоғонда Ҡуян иң илгәҙәк персонаждарҙың береһе һәм яҡынлашып килеүсе йыл бер аҙ туҡтап ял итеү, килешеүҙәр һәм мәсьәләләрҙе тыныс көйләү өсөн форсат бирергә вәғәҙә итә. Сәйәси ареналарҙа, фән, сәнғәт донъяһында һиҙелерлек үҙгәрештәр көтөлә. Экология, әйләнә-тирә мөхит, тәбиғи ресурстар мәсьәләләре көн үҙәгенә күсәсәк. Йәшәйеш мөхитебеҙ - ниндәй һауа һулайбыҙ, ни ашайбыҙ һәм эсәбеҙ - медицина, сәләмәтлекте һаҡлау кеүек үк мәсьәләләр менән бер рәттән, иғтибар үҙәгендә буласаҡ. Ҡуян йорт усағын яҡын күрә, ләкин шунда ғына сикләнеп ҡалыу яғында ла түгел. Ҡунаҡсыллыҡ, йомартлыҡ, матурлыҡ донъяһын аңлау, вәҡәләтлек - был сифаттар киләсәктә бик тә кәрәге тейерлек файҙалы бәйләнештәр булдырырға ярҙам итәсәк. Ғөмүмән, Ҡуян йылында күп нәмәләр киләсәккә тоҫҡап эшләнә. Был ваҡытты үҙ белемеңде, квалификацияңды күтәреү буйынса файҙаланыуға яҡшы. Ошоларҙы иҫтә тотҡанда, тормоштоң бөтә өлкәләрендә лә ысын һәм ҡыуанысл ы үҙгәрештәргә өлгәшеүе бер ҙә ауыр булмаясаҡ.**

# ИЛГӘҘӘК АҠ ҠУЯНҠАЙ...

## йорт усағын хуп күрер






**Сыҫҡандарға** 2011 йыл бизнесқа, карьера үҫешендә, аралашыу даирәһенең киңәйеүендә яңы мөмкинлектәр алып киләсәк. Бөтәһе лә шыма ғына бармаҫ, бөтә эштәрҙә лә аныҡ уйланылған план һәм алдан күрә белеүсәнлек, шулай уҡ дипломатия һәм файҙалы бәйләнештәр булдыра белеү кеүек сифаттар кәрәк буласаҡ.

Таяныр кешеләрең булыуы тағы ла яҡшыраҡ. Ә бына ышанып булмаҫтай бәндәләрҙән алыҫыраҡ йөрөүең хәйерле. Финанс өлкәһендә күңелһеҙерәк хәлдәр ихтималлығы күҙәтелер, шуға күрә һаҡсыллыҡ режимы ҡамасауламаҫ. Башланған эште ахырынаса еткереү, проблемалар алдында туҡтап ҡалмау, үҙеңде ыңғайға көйләү һәм бер аҙ көс һалыу бөтәһен дә хәл итәсәк. Ғаилә һәм мөхәббәт өлкәһендә үҙ-ара аңлашыуҙа ҡыйынлыҡтар, үпкәләүҙәр һәм үҙ-ара сәмлелек күҙәтелер, ләкин Сыҫҡан сабырлыҡ күрһәтеп, икенсе яртыһына ярай белһә, ул үҙ урынын һаҡлап ҡала алыр. Яңғыҙаҡ Сыҫҡандарҙың үҙ бәхетен табыуы ихтимал.



**Һыйырҙар (үгеҙҙәр)** өсөн тыныс мәлдәр етә, шулай ҙа абайлылыҡты юғалтыу кәрәкмәҫ, сөнки тиҙ уйлау, йыйнаҡлыҡ, бер нисә йүнәлештә берләштереүгә әҙер булырға кәрәк. Пландар ҡорғанда Һыйырға үҙенең ысынбарлыҡтан айырылмай торған тәбиғи холҡона тоғро ҡалыу яҡшы. Матди юғалтыуҙар, айырылышыуҙар булыуы ихтимал. Йылдың тәүге яртыйыллығында эш урынындағы һәм өйҙәге бурыстарҙы яраштырыуы еңелдән булмаҫ. Май аҙаҡтарында, ниһәйәт, тотороҡлолоҡ килер, был ваҡыт шарттарҙа иһә үҙенә оҡшаған шөғөл менән булырға кәрәк мөмкинлек тыуыр. Аралашыу даирәһе күпкә иркенәйер һәм хатта тулыһынса алмашыныр. Эштәрегеҙ уң булһын өсөн ниндәй өлкәлә ниндәй белем һәм күнекмәләр етешмәүе хаҡында уйланығыҙ.



**Юлбарыҫтар** 2011 йылда уңышлы һыҙатҡа сығасаҡ. Эштәрендә алға китеш, ҡаҙаныштар һиҙелерлек көүҙәләнеш алыр, хәл-ваҡиғаларҙың ыңғай ағышы пландарҙы тормошҡа ашырыуҙа булышлыҡ итер. Элекке тырышлыҡтарҙың үҙен аҡлау мәле етә. Юлбарыҫтың алға һәм юғарыға ынтылышын бер ни ҙә туҡтата алмаясаҡ, фәҡәт уның теләге генә булһын. Мөхәббәт донъяһында матур үҙгәрештәр көтөлә. Юлбарыҫ үҙ дәрәжәһенә һәм шәхесенә көслө иғтибар йәлеп итеп, үҙен енеллек менән бөтә нәфислегендә күрһәтә ала. Үтеп киткән йылдағы көсөргәнешле эштән һуң лайыҡлы рәүештә рәхәтләнеп ял итеү теләге беренсе планға сыға. Сәләмәт йәшәү рәүеше хаҡында етди уйланырға, зарарлы ғәҙәттәрҙән арынырға һәм үҙ тормошоңдо бөтә яҡлап та яҡшы яҡҡа үҙгәртергә ваҡыт.



**Ҡуяндарға** киләһе йылда тормоштоң бөтә өлкәләрендә лә ләззәтләнеү, эшендә - үрләтелеү һәм аҡса килеү мөмкинлектәре көтөлә, эшлекле мәсьәләләрҙә уңыш юлдаш буласаҡ. Тормошҡа кинерәк ҡараш, яңылыҡты һынауҙан ҡурҡмаҫҡа, үҙ идеяларыңды үткәрә белеү фарыз. Тәүге ярты йыл буйына эшкә бөтә көстө һалырға кәрәк, уның ҡарауы, аҙаҡ эшеңдең емештәре менән тынысланып ләззәтләнергә лә була. Яңы йылға мауыҡтырғыс сәфәрҙәр, ниндәйҙер курстарға яҙылыуҙы планлаштырығыҙ, үҙеңә шатлыҡ һәм ҡәнәғәтләнеү килтергән бөтә нәмәне эшләргә, шәхси мауығыуҙар һәм аралашыу өсөн ваҡытыңды йәлләмәҫкә кәңәш ителә.



**Аждаһаға** яңы йыл яҡын арала ҙур уңыш һәм бик күп бәхетле мәлдәр бүләк итер. Ул оптимизм тулы яңы пландар менән йәшәй. Уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн бер ниндәй ҡаршылыҡтар ҙа булмаясаҡ. Аждаһа теләһә ниндәй хәлдәрҙән дә танылыу һәм ихтирам ҡаҙанып, еңеүсе булып сығасаҡ. Финанс мәсьәләләрендә лә баш ватырға тура килмәҫ, Аждаһаға бары тик үҙ көсөн дөрөҫ итеп, ә мөмкинлектәрҙе ваҡытында файҙалана белергә кәрәк. Ә шулай ҙа сәләмәтлеккә ҡағылышлы ҡайһы бер проблемалар булып алыуы ихтимал. Шуның өсөн әллә ни көсөргәнешкә бирелмәй, сирҙе иҫкәртеү сараларына, дөрөҫ туҡланыуға иғтибар итергә кәрәк. Аждаһалар ғаиләләрендә татыу һәм гармониялы мөнәсәбәттәр тантана итә.



**Йыланды** бик күп ваҡиғалар һәм үҙгәрештәр көтә. Хатта ҡайһы бер проблемалар ҙа билдәләнгән маҡсаттарға өлгәшеүҙә баҫҡыс ҡына булып хеҙмәт итәсәк. Буласаҡ ваҡиғаларҙы алдан күреп торған Йылан юлындағы кәртәләрҙе оҫта урап үтә аласаҡ. Кемдең һәм нимәнең файҙалы буласағын, ҡайһы осраҡтарҙа фекерҙе үҙгәртергә, нимәнәндәр баш тартырға һәм башҡа мөмкинлектәрҙе файҙаланырға мөмкин булыуын ул һиҙемләй ала. Ауыр осраҡтарҙа дуҫтар ярҙамына иҫәп тота ала. Йыл буйына Йыланды күп осрашыуҙар, яңы таныш лыҡтар көтә. Уның арбау һәләте көсәйә, шуға ярашлы - ҡапма-ҡаршы енес вәкилдәренә ҡарата ла. Мөхәббәт яланында Йыландарҙы тулҡынландырғыс ваҡиғалар көтә.



**Йылҡы** 2011 йылда дәртле хисләр һәм теләктәр тотҡонда буласаҡ. Мөһабәт пландар, үҙенсәлекле проекттар, яңы һөнәри перспективалар, социаль әүҙемлек һәм мөхәббәтһайланған өлкәгә бөтә көстө түгергә тура килә. Йылҡы бер үҙе бишеү өсөн эшләргә һәләтле генә түгел, башҡаларҙы үҙ энтузиазмы менән илһамландырыу көсөнә лә эйә. Шуныһы мөһим: ҡабул ителәсәк ҡарарҙар уйланған һәм әҙмә-әҙлекле булырға тейеш. Теләк хистәренә генә эйәреп, ашығыу йәки тәүәккәлләү хәүефлерәк булмаҫы, отолоуың бар. Сәйәсмәндәр, юристар, уҡытыусылар һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре өсөн йыл бик уңышлы булмаҡсы. Ошо йылда башҡарылған капитал һалыуҙар уңыш килтерер. Шәхси тормошта бәхетле ваҡиғалар көтөлә.



**Ҡуйҙар** өсөн 2011 йыл ярайһы тыныс булмаҡсы, был осор улар тормоштоң төрлө өлкәләрендәге эштәрен тәртипкә һалыу мәсьәләләре менән мәшғүл була ала. Көтөлмәгән ваҡиғалар, осоштар һәм йығылыуҙар, көслө тойғоларға бирелеү осраҡтары бар, шуға ҡарамаҫтан, йыл аҙағына, ниһайәт, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙән ҡәнәғәтләнеү хисе кисерерҙәр. Ҡуй үҙе лә ойошҡаныраҡ сифатҡа эйә була барыр, рациональ фекерләүгә күсер. Кешеләр яҙмышын көйләп ебәреүҙә ҡатнашыр, хәйриә эштәре менән шөғөлләнер һәм ошоноң менән үҙенә ихтирам уятыр. Ғаилә хәлдәре ҡатмарлашып алыр. Ғаиләлә тыныслыҡты һаҡлап ҡалыу хаҡына тиҙ генә уртаҡ тел табырға, килешеүгә барырға тура килер.



**Маймылды** электән борсоған күп мәсьәләләр артта ҡаласаҡ, уның үҙ-үҙенә ышанысы арта, ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыуҙа, маҡсатҡа өлгәшеүҙә энтузиазм һәм ныҡышмалылыҡ барлыҡҡа килер. Ә үҙаллы еңеп сығыуы ауырыраҡ булған хәлдәрҙә дуҫтар, яҡындар, кәңәшселәр ярҙамына өмөт итергә мөмкин. Яңы йыл офоҡтарҙы киңәйтеп, яңы социаль кимәлгә сығыу мөмкинлектәрен хәрәкәткә килтерәсәк. Сит ил партнерҙары, дуҫтарҙың әһәмиәте бермә-бер артыр. Сәфәргә сығыу өсөн уңайлы мәл. Кемдер йәшәгән урынын алмаштырыр. Һөнәри һәм матди йәһәттән йыл тыныс үтәсәк, ләкин уңыштар ҙа уртасараҡ булыр.



**Әтәскә** яңы йылда уңыштарҙың даими булмауы менән килешергә тура килер. Эш һөҙөмтәләре һәм яңы идеялар теләгән хуплауҙы таба алмауы бар. Күп көс бушҡа түгелеүе ихтимал. Ҡуян йылында Әтәскә конфликттар һәм ҡаршылыҡтар аша үтергә тура килер, бәлки. Был билдә вәкилдәренең ҡыҙыу холҡо һәм юғары амбициялары күп проблемаларҙың сәбәпсеһе булыуы бар. Әтәстәр үҙҙәрендә сабырлыҡ, түҙемлек сифаттарын тәрбиәләп, ҙур күләмле эшкә тотонорға, мөһим бәйләнештәр һәм мөнәсәбәттәрҙе һаҡларға, нығытырға тырышырға тейеш. Мөхәббәт хистәрендә Әтәс өсөн көтөлмәгән хәлдәр килеп тыуыр, уларҙы хәл итеү күп йәһәттән уның шәхси тәжрибәһе һәм аҡылына бәйле булыр.



**Эт** йылында тыуғандарҙы яңы йылда бәхетле һәм уңышлы мәл көтә. Көсөргәнмәй, тыныс ҡына элек башланған проекттарҙы дауам итергә кәрәк. Килем артасаҡ, бизнес сәскә атыр, шәхси планда күптән ниәтләгән һәйбәт ваҡиғалар тормошҡа ашыр. Партнерлыҡ өлкәһендә отошло варианттар килеп сығыр. Шуны иҫтә тотоу мөһим: ошо йылда нигеҙ һалынған мөнәсәбәттәрҙең нигеҙе ныҡлы һәм оҙайлы буласаҡ. Һөнәри белем һәм күнекмәләрҙе камиллаштырыу хаҡында уйланығыҙ. Ошоға тиклем таныш булмаған өлкәлә ҡыҙыҡлы яңы тәжрибәгә эйә булыу, үҙ имиджығыҙҙы камиллаштырыу буйынса эшләгеҙ.



**Сусҡа** йылында тыуғандар өсөн 2011 йыл артыҡ һикәлтәләрһеҙ, тыныс булыр. Һөҙөмтәләр ҙә әллә ни күҙгә күренеп бармаҫ. Был ағымдағы эштәрҙән ял итеп алыу өсөн файҙалы осор. Тормоштоң бер көйгә һалынған, өйрәнелгән ағышы менән ләззәтләнергә мөмкин, тик шулай ҙа һаҡ булыу кәрәк. Сусҡа кемдендер тәү ҡарашҡа йомшаҡ һәм тәрбиәле мөнәсәбәтендә бүре ыржайыуын абайламаҫҡа ла мөмкин. Теге йәки был эштәрҙә ҡатнашлыҡ итеү перспективаларын ентекле баһаларға, уның әҙемтәләрен күҙалларға өйрәнергә кәрәк, эштең суд процесына барып етеүенә юл ҡуймау хәйерле. Сусҡа үҙен ғаиләһендә бәхетле тойор, элекке һыуынған мөнәсәбәттәрҙең яңырыуы ихтимал. Үҙ мөхәббәтен әҙләүселәргә йыл романтик осрашыуҙар вәғәҙә итә.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА
әҙерләне.

КӨЛКӨФӨ



# БЫЛ ХӘЛДӘР КҮҢЕЛДӘ - йылмайта бөгөн дә

## МОНОЛОГЫҢДЫ ЯТЛА!

**Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Шамил ағай Рәхмәтуллиндың һөйләгәндәренән**

1977 йылда Салауат башҡорт дәүләт драма театры актеры, ул саҡта Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Иршат Вәлиев М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә саҡырыла.

Сәнғәт техникумында бер ваҡытта уҡып, аҙаҡ Ауырғазы колхоз-совхоз театрында (хәҙер Салауат БДТ-ы) 5 йыл бергә эшләгәс, Иршат ағай күберәк Шамил Рәхмәтуллин тирәһендә урала. Билдәле, яңы килгән актерға эпизодик ролдәр, йә дублер булыу менән ҡәнәғәтләнергә тура килә.

Иршат ағай килеп эшләй башлауға күп тә үтмәй, Академтеатр иң яҡшы спектаклдәре менән Ленинградҡа юллана. Гастроль репертуарына ингән "Ташлама утты, Прометей!" (М. Кәрим) спектаклендә уның бер һөйләм генә репликаһы була. Юлда барғанда Иршат ағай: "Шамил, һин Ленинградта булған кеше, барғас, ҡаланы күрһәтерһең инде, йәме", - тип һүҙ башлай.

- Ниндәй Ленинград ти ул!.. Прометейҙағы "монологыңды ятла!" - ти Шамил ағай.

- Ниндәй монолог инде ул, көләм тигәс тә! Бер һөйләм...

- Улай тимә... беҙҙә төрлө хәлдәр була...- тип ҡуя Шамил ағай.

Килеп етеп, ҡунаҡханаға урынлашыу менән:

- Шамил, әле ваҡыт бар, әйҙә, күрһәт Ҡышҡы һарайҙы! - тип ныҡыша икән Иршат ағай.

- Һин нимә һөйләйһең? Ниндәй Ҡышҡы һарай? Монологыңды ятла! - ти икән Шамил ағай тағы ҡырт киҫеп.

- Ҡуй әле, шуны! Атҡаҙанған башым менән...

- Улай тимә... төрлө хәлдәр була...

Ошондайыраҡ һөйләшеү бер-нисә тапҡыр ҡабатлана. Ниһайәт, икенсе баш ҡалала "Ташлама утты, Прометей!"ҙың премьераһы. Спектакль мәлендә сәхнәләге Зевс (Х. Ҡудашев), Прометей (И. Йомағолов) һәм ҡалған артистар, Шамил ағайҙың этләшеп йөрөгәнлеген иҫтәренә төшөрөп, Иршат ағайҙың теге һөйләмен әйтеүен көтөп, күмәкләп уға текләшәләр. Һәм... Эйе, эйе, ағай репликаһын онота! Зевсҡа: " Аңлашылды, күҙемдән юғал!" - тиеүҙән башҡа сара ҡалмай.

Шамил ағай хәтерләүҙәренән:

- Иршаттың бер һөйләм репликаһын онотоуҙа минең шаяртыуҙарым сәбәпсе булғанын аңлағас, спектакль бөтөп, ҡунаҡханаға ҡайтҡас, тышта байтаҡ ҡына тапанып йөрөнөм. Беләм, Иршат ҡыҙыу холоҡло, бер аҙ һыуынһын, тинем. Тәҙрәлә ут һүнеп, бер аҙ ваҡыт үткәс, кәрәкле ҡатҡа менеп етеү менән аяҡ остарына баҫып, тауыш-тынһыҙ ишекте асып инеп, сисенеп ятып, иркен итеп тын алыуым булды, Иршат: "Подлец!" - тине.

## АЙЫУ ЕЛӘГЕ

Әүәле филармония артистары йәй буйы гастролдәр менән илебеҙҙе арҡырыһын-буйға айҡап ҡайтып, тулыр-тулмаҫ бер ай ял иткәс, осрашып-күрешеп, гәп һатыр булған: кемде ире, ҡатыны оҙайлы гастролдәрҙән нисек ҡаршы алған, кем ҡайҙа, кем менән һәм нисек ял иткән, баҡсаһы уңған-уңмаған һ.б. Ишмулла ағай Дилмөхәмәтов, ғәҙәттә, бер яҡ ситтәрәк, мут ҡына йылмайып, барыһын да тыңлап бөткәс кенә, һүҙ башлар булған.

Ундай мәлде түҙемһеҙлек менән көткән артистар:

- Әйҙә, ағай, һөйләп ебәр! Йылайырҙамы? Баҡсаламы? Ҡайҙа, нисек үтте ялығыҙ? - тиеүгә ул:

- Эйе, бер йылға етерлек итеп, тыуған яҡтарымдың саф һауаһы менән үпкәмде йөҙҙөрөп килдем, әй! Ҡурай, бесән әҙерләнем, балыҡ тоттом, һыу индем, еләк йыйҙым (август менән сентябрь араһында - еләк? ) Еләк ғәләмәт уңған! Ҡалҡып күккә ҡараһаң, ул да ҡыҙыл булып күренә, әй! Шулай бер мәл онотолоп китеп еләк йыйып йөрөгәндә, ҡыштырлаған тауышҡа ҡараһам - алдымда Таштүрә дәүмәле айыу! Тороп баҫтым. Ул миңә, мин уға текләшеп ҡарап торғандан һуң, айыу яҡынайып яуырыныма ҡулын һалды ла: "Ә- ә- ә, Ишмулла, һин икәнһең? Ҡартайылды, күҙҙәр насар күрә шул. Һаумы, тағы ҡайттыңмы? Йый, йый, рәхәтләнеп йый", - тип, арҡамдан һөйҙө лә урманға инеп китте.

Эй, онотоп торам: "Өфөләргә сәләм әйт!" - тине. Һеҙгә була инде...

**Салауат ИШМӨХӘМӘТОВ иҫкә төшөрҙө.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек итеп үҙеңдең ижади ҡеүәтең менән бәйләнеш тоторға?

Мөхәббәттә һәм байлыҡта сикләүҙәр булмаһын, тиһәгеҙ, үҙегеҙҙең ижади ҡеүәтегеҙ менән бәйләнеш тотоу - тормошоғоҙҙоң мотлаҡ бер шарты. Беҙ Илаһ менән бәйләнеш булдырыуҙың бер нисә ысулын тәҡдим иттек. **Улар:**

**➔ Башҡаларға ҡарата изге эштәр.**

**➔ Үҙеңдең Юғары минеңде күҙ алдына килтереү һәм уға яҡын булыу.**

**➔ Ике бармаҡ ысулын программалау һәм ҡулланыу.**

**➔ Уйҙа ғына донъяуи проблемаларҙы хәл итеү.**

**➔ Башҡа кешеләрҙең проблемаларын хәл итеү.**

Ижадсы менән бәйләнеш был процедураларҙың барыһын да күҙаллай. Кеше ни тиклем нығыраҡ көсөргәнештән арына ала, ул шул тиклем ыңғайыраҡ картиналарҙы күҙ алдына килтерә, шул тиклем уңышлы була. Бындай кеше мотлаҡ үҙ яртыһын, ауыр саҡта ярҙам итер дуҫын табыр, хөкөмдар ҡарарҙы уның файҙаһына сығарыр, ул аҡсаларын дөрөҫ итеп урынлаштырыр һәм артабан уның емештәрен тирер. Былар барыһы ла тәү ҡарашҡа үҙ фекерләүеңдең һөҙөмтәһе кеүек күренер, әммә ул Юғары сығанаҡтан килә.

Илаһ менән ни тиклем нығыраҡ бәйләнештә булһағыҙ, тормошоғоҙ шул тиклем һөҙөмтәлерәк, тулыраҡ булыр. Был уңайлылыҡҡа ла, сәләмәтлеккә лә, күңел тыныслығына ла ҡағыла.

Быны Америкаға ҡарағанда Азияла нығыраҡ аңлайҙар. Японияла, мәҫәлән, меңдәрсә Аллаһ йорто бар. Таиландта һәр өйҙә тиерлек доға ҡылыу өсөн махсус урын эшләнгән. Һиндостанда изге кешеләр һәр ерҙә осрай, хатта йорт хайуандары ла Илаһтың вәкилдәре тип, уларға хөрмәт күрһәтелә.

Көнбайышта иһә, бигерәк тә Европала һәм Америкала, Илаһ тураһында уйлар өсөн ваҡыт таба алмайҙар. Бары тик аҙна ахырында, эш бөткәс кенә уның барлығы хаҡында иҫтәренә төшөрәләр. Шул ваҡытта ғына улар Аллаһ йортона бара, әммә унда ла күптәр килеүселәргә, руханиҙың һүҙҙәренә иғтибар йүнәлтеп, үҙ уйҙарына, доға ҡылыуға, ултырыуға һәм тороуға иғтибар итмәй. Бик һирәктәр генә автоматик рәүештә түгел, ә ихлас уҡына.

Мин һеҙҙе Аллаһ йортона йөрөмәгеҙ, тип өндәмәйем. Йөрөгөҙ, әммә ул аңлы рәүештә булырға тейеш. Бындай аңлау һеҙ теге йәки был ритуалды үтәр алдынан Илаһ менән уйығыҙҙа ғына бәйләнешкә ингәндән һуң башлана.

Доғаларығыҙҙы Ижадсыға булған аңлы һөйөү сағылышына әйләндерегеҙ. Әгәр һеҙ Илаһ булһағыҙ, үҙегеҙгә иғтибар бүлгән доға ҡылыусыларға иғтибар бүлмәҫ инегеҙме ни?

**Роберт СТОУН.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Ғинуар салаты

Был салатты, ғәҙәттә, Яңы йыл табынына ҡуялар. 1 банка консерваланған йәшел борсаҡ, 400 гр кәбеҫтә, 40г башлы йәки йәшел һуған, 100г ыҫланған ҡаҙылыҡ (ҡаҙылыҡ булмаһа, һимеҙ генә колбаса ла бара), 1 бешкән йомортҡа, майонез, шәкәр ҡомо, һеркә, борос, йәшел тәмләткестәр.

Һуғанды, ҡаҙылыҡ (йәки колбасаны) ваҡлап турарға, ә кәбеҫтәне оҙонса итеп турарға, тоҙ, һеркә һалып ыуырға. Барыһын бергә ҡушып, шәкәр ҡомо, йәшел борсаҡ, майонез, тоҙ, борос ҡушып болғарға. Йомортҡа, йәшел тәмләткестәр менән биҙәргә.

### Ауыл салаты

500 г сөгөлдөр, 500 г кишер, һуған, 200 г тоҙло ҡыяр, көнбағыш майы. Сөгөлдөрҙө бешерергә, сей кишерҙе эре ҡырғыста ҡырырға, һуғанды түңәрәкләп турарға. Кишер менән һуғанды көнбағыш майында ҡыҙҙырырға, бешкән сөгөлдөрҙө һалам кеүек турарға, ҡыярҙы шаҡмаҡлап киҫкеләргә. Бергә болғарға, кәрәгенсә тоҙ өҫтәргә.

### Балыҡ салаты

200 г бешкән балыҡ ите, берәр помидор һәм ҡыяр, 3 бешкән картуф, йәшел салат, 1 тоҙло ҡыяр, ярты стакан майонез, 1 ҡалаҡ аш һеркәһе. Бөтәһен дә турап, тоҙ һибергә һәм майонез, аш һеркәһе менән болғарға. Өҫтөн йәшел салат, помидор, ҡыяр менән биҙәргә.

### Витаминлы салат

Икешәр алма, әфлисун, банан, бер аҙ шәкәр ҡомо. Еләк-емеште телемләп турарға, шәкәр ҡомо өҫтәп болғарға ла һуты сыҡһын өсөн 1-1,5 сәғәткә һалҡын урында торорға. Шунан әҙер була. Башҡа емеш-еләктәрҙән дә эшләп була.

### Эремсек ҡоймағы

500 г эремсек, 2-3 ҡалаҡ он, 2-3 ҡалаҡ шәкәр ҡомо, 2 йомортҡа, әҙерәк йөҙөм, әүәләү өсөн он, ҡыҙҙырыу өсөн үҫемлек майы.

Йөҙөмдө ҡайнар һыуҙа йомшартып һөҙөргә, эремсекте шәкәр ҡомо менән бергә иләк аша үткәрергә, эремсеккә он менән йомортҡаны ҡушып баҫырға һәм йөҙөм ҡушып болғатырға.

Онда әүәләргә, ҡулды дымлап, ҡамырҙан өлөштәр айырып алырға һәм ҡоймаҡ яһарға ла онда әүәләргә. Табала үҫемлек майын ҡыҙҙырырға һәм ҡоймаҡтарҙың һәр яғын шунда 1,5 минутлап ҡыҙҙырып алырға.

### Кәләш салаты

1 тауыҡ, 1 стакан әстрәхан сәтләүеге, 100 г йөҙөм, 3 әфлисун, ярты стакан дөгө, майонез. Тауыҡты бешереп, итен һөйәктәренән айырып алаһың да ваҡ ҡына итеп турайһың. Шуға ваҡланған сәтләүекте, ебетелгән йөҙөмдө ҡушаһың. Тоҙло һыуҙа бешкән дөгөнө, ваҡ туралған әфлисунды өҫтәргә һәм майонез ҡушып болғарға.

### Килендәр салаты

1 бешкән сөгөлдөр, 200 г бешкән ит, 1 бешкән кишер, ҡырғыстан үткәрелгән ярты стакан сыр, 2 ҡалаҡ ваҡланған әстрәхан сәтләүеге, 1 бүлем һарымһаҡ, тоҙ, майонез.

Һарымһаҡты иҙергә, борос һибеп, артыҡ тәрән булмаған һауытҡа һалырға, сөгөлдөр өҫтәргә (ҡырғыстан ҡырып). Шулар өҫтөнә туралған итте, ҡырғыстан үткәрелгән кишерҙе, сәтләүекте һалырға, иң өҫкә сырҙы һибергә. Майонез һәр ҡатламға һылана.

### Егеттәр салаты

Бешкән 5 йомортҡа, 100 г сыр, 100 г аҡ май, 1 баш һуған, 1 банка майонез, 1 ҡап краб таяҡсалары, 1 алма. Сыр, алма, аҡ май эре ҡырғыстан үткәрелә. Ҡатлап һалырға: йомортҡа ағы, сыр, аҡ май, һуған, краб таяҡсалары, алма. Майонез һәр ҡатлам һайын һылана. Салат өҫтөн ҡырғыстан үткәрелгән йомортҡа һарыһы менән биҙәргә.

**Ашығыҙ тәмле булһын!**

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**



## 27 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
11.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег". Остросюжетный сериал
22.30 "Всегда Ваш, товарищ Сухов"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя". Ток-шоу
00.50 "Быстрый и мертвый". Вестерн
02.50, 03.05 "После дождя"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 03.40 "Мужская работа"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Здравствуйте, я ваша тетя!"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Классные мужики", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.45 "Вести+"
00.05 Ко дню спасателя Российской Федерации
02.05 "Городок"
03.05 "Честный детектив"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Кодекс чести"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Брат за брата". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Капитал. RU"
00.25 "Особо опасен!"
01.10 "В зоне особого риска"
01.45 "Школьные джунгли". Драма
03.55 "Чужое лицо", 5-я серия

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости недели"**
**09.30 "Полезные новости"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент**
**12.45 "Надо знать"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Рождественский гость"**
**17.30 "Победа на Дальнем Востоке"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Свои деньги"**
**21.00 "Быть первыми…"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Спецрепортаж"**
**23.15 "Сказочный принц"**
**00.55 "Ночные новости"**

## 28 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег", 20-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя". Ток-шоу
00.50 "Поезд с деньгами"
02.50, 03.05 "Лето белой воды"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 220-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 61-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Классные мужики", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Опасные связи". Драма
02.35 "Драма Ивана Бровкина"
03.35 "Театр", 1-я серия

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Брат за брата", 21-я и 22-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Час Волкова"
00.30 "Главная дорога"
01.05 "Вор". Драма
02.55 "Чужое лицо"
03.55 "Очная ставка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент**
**12.45 "Надо знать"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Книга сказок"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Сказочный принц"**
**17.30 "Победа на Дальнем Востоке"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Парад планет"**
**00.30 "Криминальный спектр"**
**00.45 "Ночные новости"**

## 29 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег", 21-я и 22-я, закл. серии
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50 "Маленький Николя". Комедия
02.30, 03.05 "Побег невозможен"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Моя прекрасная леди. Татьяна Шмыга"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 221-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 62-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Классные мужики", 7-я и 8-я, закл. серии
22.55 "Девять признаков измены". Лирическая комедия
00.50 "Вести+"
01.10 "Ван Хельсинг"
03.30 "Театр"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Брат за брата", 23-я и 24-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Час Волкова"
00.35 "Злые и красивые". Мелодрама
03.00 "Чужое лицо"
04.00 "Очная ставка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент**
**12.45 "Надо знать"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**13.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**16.30 "Приключения в стране эльфов"**
**17.00 "Книжный дом"**
**17.30 "Победа на Дальнем Востоке"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**18.55 Чемпионат России по волейболу среди мужских команд. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Факел" (Новый Уренгой). Прямая трансляция**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Парад планет"**
**00.30 "Спецрепортаж"**
**00.45 "Ночные новости"**

## 30 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес. Новогодний выпуск"
19.40 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Достояние республики". Алла Пугачева
00.30 "XXX - три икса". Боевик
02.45 "Зови меня Санта-Клаус". Комедия
04.30 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ее ледовое Величество. Елена Чайковская"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 222-я серия
18.55 "Институт благородных девиц". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала-2010"
22.50 "Кактус и Елена". Мелодрама
00.50 "Вести+"
01.10 "Посейдон". Приключения
02.55 "Горячая десятка"
04.10 "Городок"
04.35 "Семь стариков и одна девушка"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Мама в большом городе"
09.00 "Живут же люди!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели... в Новый год"
20.30 "Чистосердечное признание"
21.15 "Отдел". "Страшные лейтенанты". Криминальная драма
23.10 "НТВшники"
00.10 "О'кей". Комедия
02.25 "Чужое лицо", 8-я серия
03.55 "Очная ставка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр". "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**13.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**16.30 "Каникулы Санта Клауса"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Парад планет"**
**00.30 "Спецрепортаж"**
**00.45 "Ночные новости"**

## 31 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.20 "Две звезды. Лучшее"
12.00 Новости
12.10 "Ледниковый период: глобальное потепление"
13.40 "Большая разница. Самое лучшее"
14.30 "Красотка". Романтическая комедия
16.30 "Иван Васильевич меняет профессию". Эксцентрическая комедия
18.00 Вечерние новости
18.20 "Ирония судьбы, или с легким паром". Лирическая комедия
21.30 "Оливье-шоу"
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации Д. А. Медведева
00.00 "Оливье-шоу". Новогодняя ночь 2011 на Первом
02.00 "Дискотека 80-х"

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро, России"
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
06.15 "Чародеи"
08.55 Мультфильмы
09.50 "Карнавальная ночь". Музыкальная комедия
11.05 "Морозко". Сказка
12.35 "Лучшие песни-2010". Концерт
14.00 "Вести"
14.20 "Лучшие песни-2010". Продолжение концерта
14.55 "Юмор года"
17.20 "Джентльмены удачи". Комедия
18.55 "Кавказская пленница, или новые приключения Шурика". Комедия
20.20 "Морозко". Мюзикл
22.05 "Новогодний парад звезд"
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации Д. А. Медведева
00.00 "Новогодний Голубой Огонек-2011"
03.10 "Большая новогодняя дискотека"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Дети Дон-Кихота"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спето в СССР"
11.15 "Сыщики", "Не стреляйте в пианиста". Криминальный сериал
13.10 "Возвращение Мухтара". "Новогодний сервис", "Главное, чтобы костюмчик сидел"
15.10 "Дикий "Новый год точка ру". Сериал
16.25 "Улицы разбитых фонарей". "Конец квартала". Сериал
17.30 "Глухарь. Приходи, Новый год!" Криминальный сериал
19.15 "Снова Новый". Криминальная драма
20.55 "Новый год в деревне Глухарево". Новогодний телемарафон
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации Д. А. Медведева
00.00 "Новый год в деревне Глухарево" (продолжение)
01.20 "Карнавальная ночь с Максимом Авериным"
04.00 "Необыкновенный концерт с Максимом Авериным"
05.35 "Бульдог-шоу. Лучшее"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр". "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Главная елка Республики"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.30 "Сулпылар"**
**17.00 "Золотая коллекция сказок"**
**18.45 "Байык-2010"**
**21.30 "Итоги года"**
**22.15 "Парад планет". Телешоу. Финал**
**23.45 Новогоднее поздравление Президента РБ Рустэма Хамитова**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации Д. А. Медведева**
**00.00 "Хрустальный соловей-2010". Гала-концерт**
**03.00 Прогноз погоды**

## 1 ЯНВАРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.30 "Две звезды. Лучшее"
09.00 Новости
09.05 "Ирония судьбы, или с легким паром!"
12.00 Новости
12.10 "Иван Васильевич меняет профессию". Эксцентрическая комедия
13.40 "Ледниковый период-3. Эра динозавров". Полнометражный анимационный фильм
15.20 "Золушка"
16.40 "20 лучших песен 2010 года"
19.00 "Ирония судьбы. Продолжение". Лирическая комедия
21.00 "Большая разница. Новогодний выпуск"
22.30 "О чем говорят мужчины". Комедия
00.00 "Супердискотека 90-х"
01.50 "Девушка моих кошмаров"
03.40 "На обочине"

### РОССИЯ 1

05.45 "Лучшие песни"
07.40 "Падал прошлогодний снег"
08.00 "Карнавальная ночь"
09.25 "Укрощение строптивого". Комедия
11.00 "Джентльмены удачи". Комедя
12.35 "Кавказская пленница, или новые приключения Шурика". Комедия
14.00 "Вести"
14.10 "Невероятные приключения итальянцев в России". Комедия
16.00 "Песня года"
18.50 "Юмор года"
21.15 "Добрый вечер с Максимом"
22.30 "Новогодние сваты". Комедия
00.20 "300 спартанцев". Драма
02.20 "Новогодняя засада". Комедия
03.55 "Стреляй немедленно!" Комедия

### НТВ

06.30 "Таксистка: Новый год по Гринвичу"
08.15 "Золотой ключ". Лотерея
08.40 "Белый медвежонок-2: таинственный остров"
09.55 "Тонкая штучка". Иронический детектив
11.35 "Люби меня". Лирическая комедия
13.25 "Суперстар" представляет: "Александр Серов. Я люблю тебя до слез"
15.25 "Следствие вели... в Новый год"
16.20 "Эра стрельца", 1-я, 2-я и 3-я серии
19.00 "Сегодня"
19.25 "Паутина". "Пуля справедливости". Детективный сериал
23.05 "Эээх, разгуляй!"
02.40 "Люби меня". Лирическая комедия
04.45 "Сыщики"

### БСТ

**07.00 "Гусарская баллада". Комедия**
**08.45 "Дед Мороз и три медведя". Мультфильм**
**09.30 "Самое ценное"**
**10.00 "Дарю песню"**
**12.00 "Тэмле"**
**12.30 "Башмачки". Х. Ибрагимов. Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**15.15 "Золотая коллекция сказок"**
**16.45 "Хочется верить в чудеса". Новогодний концерт**
**17.45 "Друг на Рождество"**
**19.15 "Золотая пчелка"**
**20.00 "Байык-2010"**
**22.45 "Отпуск по обмену". Комедийная мелодрама**
**01.00 Прогноз погоды**

## 2 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Загадывай желание"
07.40 "Микки: однажды под Рождество"
08.40 "С Рождеством от всего сердца"
09.40 "Секретная служба Санты"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "На следующий день"
12.10 "Рататуй". Анимационный полнометражный фильм
14.10 "Гаражи. Новогодние серии". 2 серии
16.20 "Алиса в стране чудес". Фэнтези
18.20 "Лед и пламень. Парад победителей"
21.00 "Время"
21.15 "Мужчина в моей голове". Комедия
23.30"Что? Где? Когда?"
00.30 "Три икса-2: новый уровень". Боевик
02.20 "Анаконда"
04.00 "Приключение Посейдона"
04.50 "Белка, Стрелка и другие..."

### РОССИЯ 1

05.30 "Праздник новогодней елки"
06.30 "Отпуск за свой счет". Комедия
09.00 "Невероятные приключения итальянцев в России"
10.55 "Короли льда"
12.15 "Доярка из Хацапетовки". Лирическая комедия
14.00 "Вести"
14.10 "Доярка из Хацапетовки". Лирическая комедия. Продолжение
15.55 "Песня года". Часть вторая
19.05 "Юмор года"
20.00 "Вести"
20.20 "Юмор года"
21.30 "Добрый вечер с Максимом"
22.50 "Отдамся в хорошие руки". Комедия
00.50 "Троя". Драма
03.35 "Добрая подружка для всех"
05.10 "Городок"

### НТВ

06.25 "Вор"
08.00, 10.00 "Сегодня"
08.45 Мультфильмы
10.20 "Мой ласковый и нежный май". Док. фильм
11.20 "Ласковый май". Биографическая драма
13.20 "Суперстар" представляет: "Группа "Ласковый май"
15.30 "Следствие вели..."
16.20 "Эра стрельца", 4-я, 5-я и 6-я серии
19.00 "Сегодня"
19.25 "Паутина". "Ненастоящий полковник"
23.10 "Старые клячи". Лирическая комедия
01.50 На съемочной площадке фильма Эльдара Рязанова "Старые клячи"
02.05 "Тонкая штучка"
03.50 "Возвращение Мухтара". Сериал

### БСТ

**07.00 "Берегись автомобиля". Комедия**
**08.45 "Маленькие ангелы". Мультфильм**
**09.30 "Ласточкино гнездо"**
**10.00 "Дарю песню"**
**12.00 "Тэмле"**
**12.30 "Золотая коллекция сказок"**
**14.00 "Итоги года"**
**14.45 "Кызык-мазак"**
**16.00 "Болливуд-Голливуд". Мелодрама**
**18.00 "Хрустальный соловей-2010". Гала-концерт**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Вечер.com"**
**22.30 "Музыка из другой комнаты"**
**00.15 "Муз-базар"**
**01.00 Прогноз погоды**

*ИҒЛАН*

Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, йыл хужаһы - Ҡуян һәм башҡа әкиәт геройҙары башҡорт телендә Яңы йыл байрамдары, тыуған көндәр үткәрә. Әкиәт геройҙары реклама акцияларында ла ҡатнаша ала. Шарҙарҙан яһалған ҡуян, ҡар бабай, шыршы менән байрам залдарын да биҙәйбеҙ. Телефондар:

**251-14-76, 8-937-33-55-235, 8-917-40-06-894.**

**www. afarin-ufa.ru**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# ЯҢЫ ЙЫЛ ТАМАШАҺЫН...

## театрҙарҙа эҙләгеҙ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**...Алыҫ-алыҫ бер илдә йәшәгән, ти, агас малай. Мәктәпкә йөрөргә теләмәй, уйнарға, эш боҙорға ғына яратҡан ул... Ҡыҙыҡһыныусан һәм ышаныусан, эскерһеҙ малайҙың мажаралары уҫал Карабас Барабас театрына килеп инеү менән башланып китә. Ниндәй сер өсөн Карабас уны утҡа ягыр еренән өйөнә ҡайтарып ебәрә? Уға Ташбаҡа Тортилла ниндәй асҡыс бирә һәм уның ишеге ҡайҙа? Был һорауҙарға яуапты Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрындағы тамашаға килгәс табырһығыҙ, ә хәҙер һүҙ - Буратино ролен башҡарыусыларҙың береһе Гөлсәсәк ФАЗЛАЕВАға:**

-Буратино - ҡыҙыҡһыныусан малай. Бөтә яңы күргән нәмәләргә һоҡлана, ҡыуана. Яңы тыуған сабыйҙар донъяға нисек ҡарай, ул да донъяны шулай танып белә. Малай булһа ла, Буратиноны уйнауы ауыр түгел, ул бит шул уҡ бала. Айырма шунда ғына: малайҙар һуғыш суҡмары, ҡыҙҙар ҡурсаҡ уйнай. Әммә һәр кешенең донъяла яҡшылыҡҡа, кешеләрҙең изгелегенә ышанғыһы килә. Тик арҡаңа туҡмаҡ алмайынса, был тормоштоң ысынбарлығын аңламайһың. Буратино ла һәр кемгә ышанып, ҡыҙыҡһынып, танауын унда-бында тығып, төрлө мажараларға тарый. Беҙҙең Буратиноның тағы бер үҙенсәлекле яғы бар, ул Яңы йылға тиклем русса һөйләшһә, Яңы йылдан һуң башҡортса һөйләшә башлаясаҡ. Был роль менән балаларға шуны әйткем килә: Буратино - ул бер нәмәгә лә көймәй, илап ултырмай. Бар донъяны матур итеп ҡабул итә, матур күҙҙәре аша баға, һәр нәмә уға ҡыҙыҡ. Бөтә балалар ҙа шундай: асыҡ күңелле, шаяндар, юҡҡа-барға бошоноп бармайҙар. Был - балалыҡ донъяһы. Һәм ошо донъяны беҙ Яңы йыл байрамы көндәрендә баш ҡала һәм республика балаларына яратҡан әкиәт геройҙары аша сағылдырасаҡбыҙ. Килегеҙ, ҡыҙыҡ һәм бик тә күңелле буласаҡ.

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**Яңы йыл киләме быйыл, юҡмы? Ана бит, сәғәт телдәре төнгө 12-гә етергә һис ашыҡмай түгелме һуң? Төн дә ҡапыл ҡараңғыланып китте, башҡа йылдарҙа ул төрлө гирлянда, фейерверктарҙан яҡтырып тора ине лә баһа? Был ни ғиллә? Әйҙәгеҙ, театрҙың баш режиссеры, "Ҡыш батшалығындағы мажаралар" тамашаһын ҡуйыусы Рөстәм ХӘКИМОВты ярҙамға саҡырайыҡ, бәлки, ул табыр яуаптарҙы:**

- Был тамаша балаларҙың күп һорауҙарына яуап бирәсәк, тип уйлайым. Сөнки геройҙар араһында изге күңеллеләре менән бер рәттән, яуыздары ла бар. Ҡыҫҡаса ғына итеп әйткәндә, яуыз көстәр Яңы йылды урлап, уны кешеләргә, балаларға бирмәскә тырыша, шуға сәғәт уҡтары ла төнгө 12-нән үтмәскә, Яңы йыл да тыумаҫҡа, яңы көн дә килмәскә тейеш. Әммә балалар яуыз көстәрҙән дә ҡурҡмай, уларҙы төн ҡараңғылығы ла ҡурҡытмай, сөнки уларҙың тоғро дуҫтары бар. Был юлы улар ҡуянға мөрәжәғәт итә һәм ул Яңы йылды табып килтерә, балаларға шатлыҡ-ҡыуаныстар бүләк итә. Изгелек яуызлыҡты еңә.

Әлбиттә, балалар өсөн тамаша сәхнәләштереү ғәҙәти спектаклдәрҙән ныҡ айырыла, тап ошо мәлдә һин үҙең дә һиҙмәҫтән ҡабат бала сағыңа ҡайтып, ҡабат ошо мөғжизәле донъяла йөрөйһөң, сабыйҙарҙың күҙҙәрендәге ҡыуанысты күреп шатланаһың.

Тамаша Камерный залда булғанлыҡтан, унда синхрон тәржемә юҡ, шуға уны русса ҡуйырға булдыҡ. Бик күп мәктәптәр беҙҙең тамашаларға килергә теләк белдерҙе лә инде.

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**Өлкәндәр һиңә ышанып яуаплы эш ҡушҡанда, берәйһе ҡамасаулаһа, эй, йән көйә, шулай бит? Ҡайһы берҙә хатта тотоп туҡмағылар килеп китә. Их, бөтә теләктәрҙе тормошҡа ашыра торған көҙгөң булһа икән ул... Юҡ шул... Ә бына фәрештәләр батшалығында был мәсьәләне нисек хәл итәләр икән? Беҙгә был ҡараңғы, ә бына ошо батшалыҡтың уртаһында ҡайнап йөрөгән Раушания САФУАНОВА, "Фәрештәләр үҙәнендә Яңы йыл" әкиәтенең ҡуйыусы режиссеры сер итеп кенә түбәндәгеләрҙе һөйләне:**

- Тамаша Мадагаскарҙа һәм Боҙлоҡ осоронда йәшәүсе персонаждарҙың осрашыуы менән башланып китә. Һуңынан улар бергәләшеп Ҡыш бабайҙы ҡаршылай һәм балаларҙы әкиәт ҡарарға саҡыра. Әкиәт геройҙары Фәрештәләр бәләкәй ҡыҙға Яңы йыл шыршыһына ҡуйыр өсөн йондоҙ эшләргә ҡуша. Быны өсөн уға ҙур гәлсәр таш бирәләр. Ҡыҙ эшкә тотонғас, уға ярҙамға дуҫы килә, әммә ҡыҙ уның ярҙамын аңламай һәм малайҙың гел эргәһендә булыуы уны ялҡыта, уға ҡамасаулай башлай. Ә малай теге йәки был әйберҙе алып килеп, ярҙам итергә тырыша. Бер ваҡыт малай ҙур, ауыр компас килтерә. Уның уғын ҡыҙға йондоҙ яһағанда ҡулланһын өсөн алып бирергә теләй. Әммә ҡыҙ компасҡа абынып йығыла һәм инде әҙер булған йондоҙҙо вата. Асыуы килеп, малай менән әрләшә. Малай бер яҡҡа китә, ә ҡыҙ теләктәрҙе тормошҡа ашыра торған көҙгө эҙләп, сәйәхәткә юллана. Юлда уға кире геройҙар ҙа осрай, ул төрлө һынауҙарҙы ла үтә. Әммә көҙгө таба алмай һәм, аптырап, йондоҙҙо ярсыҡтарҙы йыйып һап ҡуя. Һөҙөмтәлә йондоҙ ҙа бик матур килеп сыға, фәрештәләр ҙә ҡәнәғәт, ә Яңы йыл ишек шаҡый...

Был әкиәт менән балаларға шуны аңлатырға теләнем: яҡындарыңды, дуҫтарыңды ҡыйырһытма, рәнйетмә. Яуызлыҡ яуызлыҡ тыуҙырһа, изгелек һәр саҡ изгелек булып әйләнеп ҡайта.

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Быйылғы йылдың символы Ҡуянмы, әллә Бесәйме? Ана, барыһы ла ҡуянды күтәреп тигәндәй йөрөтә, ә шыршы байрамына бесәйҙе саҡырыусы ла, ҡаршы алыусы ла юҡ. Ярай әле, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың күңеле киң, улар уны күреп ҡалып, байрамға алып инеп кенә ҡалмай, хатта йылдың символы булырға тәҡдим итәләр. Бесәй был тәҡдимгә ризалашырмы, юҡмы? Был хаҡта беҙгә Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры артисы, Бесәй ролен башҡарыусы Альбина ЮЛДАШБАЕВАнан да яҡшыраҡ яуап биреүсе булмаҫ, моғайын:**

- Бөтә ерҙә тиерлек йыл символын, ҡуян, тип йөрөп, Көнсығыш календары буйынса бесәй йылы икәнен онотоп та ебәрәбеҙ. Әлбиттә, ҡуян һәр ваҡытта ла балаларҙың яратҡан йәнлеге булып ҡала, әммә бесәй беҙҙең тормошобоҙға, көнкүрешебеҙгә яҡыныраҡ. Шул уҡ ваҡытта улар икеһе лә йылы, йомшаҡ, тормошҡа, көнкүрешкә бик зыян килтермәүсе йәнлектәр. Бесәй минең өсөн бик тә яҡын, сөнки ҡатын-ҡыҙ үҙе лә бесәй кеүек, саҡ ҡына иркәләп, яратҡанда, мырылдарға ғына тора. Иркәләү, яҡшы мөнәсәбәт кемгә генә оҡшамаһын инде! Ҡыланыштары, сәхнә хәрәкәте, пластика буйынса был роль миңә бик яҡын булды. Костюмым да матур, ап-аҡ ҡына. Ҡурсаҡ театры шундай урын: унда һүҙгә ҡарағанда, ҡыланыштар, хәрәкәт күп нәмәне аңлатырға тейеш. Сөнки беҙҙе бик бәләкәй сабыйҙар ҙа ҡарай. Ә инде һөйләшеүгә килгәндә, бесәйебеҙҙең теле русса "асылды".

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# БАШҠОРТ ТЕАТРЫНА БАРАБЫҘ...

## русса спектакль ҡарарға

**Мин - ике бала әсәһе, дүрт һәм өс йәшлек улдар тәрбиәләйем. Баш ҡалала йәшәһәк тә, икеһе лә тик башҡортса ғына һөйләшә, бер-беребеҙ менән дә туған телдә аралашабыҙ. Уларҙы башҡортса концерттарға, тамашаларға йөрөтөргә тырышам. Тик күңелде ҡырғаны шул - Өфөлә балалар өсөн башҡортса тамашалар бик аҙ ҡуйыла.**

Яңыраҡ өлкән улым менән ҡурсаҡ театрына барҙыҡ. Спектакль бик оҡшаны, бәләкәс геройҙарҙың мажаралары бик ҡыҙыҡлы ҡуйылғайны. Тик күңелде ҡырғаны шул: һуңғы ваҡытта был театрҙа бар спектаклдәр ҙә бары тик рус телендә генә бара. Имеш, башҡортса тамашаларға балалар килмәй. Әлбиттә, бында йәш милләттәштәребеҙҙең дә ғәйебе бар: тимәк, театрҙарға һирәк йөрөйбөҙ, тимәк, балаларыбыҙҙы туған телдә һөйләшергә өйрәтмәйбеҙ. Шулай ҙа театр етәкселегенә лә үпкә ҙур: исмаһам, айына бер-ике тапҡыр булһа ла, башҡортса спектаклдәр мотлаҡ ҡуйылырға тейеш.

Ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт академия театрында ҙур аншлаг менән "Буратино" әҫәренә римейк бара. Ә "Буратино"ның премьераһы ниндәй телдә үтте, тиһегеҙме? Русса! Минеңсә, был башҡа һыймаҫлыҡ хәл. Спектаклдең тәүге сығарылышын телевидение, радио, гәзит-журнал хеҙмәткәрҙәре ҡарай һәм үҙ фекерҙәрен халыҡҡа еткерә. Премьера - ул спектаклдең исем туйы, театрҙың мәртәбәһен күрһәтеүсе һәм күтәреүсе сара. Мәжит Ғафури исемендәге башҡорт театрының мәртәбәһен, әлбиттә, башҡорт теле күтәрә. Күберәк аҡса эшләү теләге арҡаһында беҙҙең сәнғәт әһелдәре үҙ-үҙенә хыянат итә түгелме? Башҡортса спектаклгә билет һорап, театрҙың кассаһына шылтыратҡас, миңә: "Әгәр ҙә 400 билет һатып алһағыҙ, башҡортса ла ҡуйырбыҙ", тип яуап бирҙеләр. Быны һиңә - мә! Билеттарҙы һатыу менән театрҙың реклама бүлеге шөғөлләнә түгелме ни? Уларҙы бит Өфөләге башҡорт мәктәптәре, балалар баҡсаларына һатырға ла мөмкин.

Атап үтелгән театрҙар, шулай уҡ Милли йәштәр театры ла - исемдәре билдәле, халыҡ яратып йөрөгән мәҙәниәт усаҡтары. Бөгөн улар үҙҙәре лә баҙар шарттарында аҡса эшләргәме, әллә тамашасының күңел донъяһын үҫтерергәме, тигән һорауға яуап таба алмайынса, ике юл сатында аҙашып ҡалған кеүек. Был бизмәнгә аҡса ягын ғына һалырға ярамай. Туған телде һаҡлау, тергеҙеү һәм үҫтереү - театрҙарыбыҙҙың да бурысы.

**Гүзәл ВӘЛИУЛЛИНА,**
**балаларын туған телдә тәрбиәләүсе әсә.**

✔ *Бәхетле яҙмыш гәлсәр һымаҡ: матур итеп балҡый, әммә теләһә ниндәй мәлдә селпәрәмә килергә лә мөмкин.*

*(Латин мәҡәле).*

АФАРИН!

# ТОС ФЕКЕРЛЕЛӘР...

## еңеүсе лә була, бүләкләнә лә беҙҙә

**Еңеүселәргә, ғәҙәттә, бүләк бирәләр, миҙал тағалар, таж кейҙерәләр. Үтеп барған йылдағы эшебеҙгә йомғаҡ яһап, ижадыбыҙҙы балҡытыусы, баҙыҡландырыусы, уҡыусы йөрәгенә һәм аңына еткереүсе журналистарыбыҙҙы, авторҙарыбыҙҙы билдәләп китмәксе, бүләкләмәксе булдыҡ беҙ ҙә.**

Гәзитебеҙ йөкмәткеһен тос фекерҙәре, үҙенсәлекле мәҡәләләре менән байытҡан авторҙарыбыҙ менән бәхетлебеҙ беҙ. Ул авторҙарҙың күбеһе - баҙы тик беҙҙеке, "Киске Өфө"нөкө генә булыуын да билдәләйек. Ошо урында бер авторыбыҙҙың фекерен килтерәйек: "Мин, ғөмүмән, гәзит-журналдарға мәҡәләләр яҙған кеше түгел инем. Һөнәрем буйынса ла был шөғөлдән йыраҡмын. Әммә "Киске Өфө"нө уҡығандан һуң, ундағы аҡылға эйәрмәү, сығыштарҙы үҙ фекерҙәрең менән нығытмау, өнһеҙ ҡалыу мөмкин түгел. Шуға ла "Киске Өфө"гә яҙышып киттем. Гәзитте көтөп алам, уны уҡыған сакта ҡағыҙ-ҡәләмемде лә эргәмә һалып ҡуям һәм мотлаҡ күңелемдә шандау таба торған фекергә юлығып, уны теркәй һалып ҡуям..."

■ **Бына шундай "Киске Өфө"гә генә яҙыша торған бер нисә авторыбыҙҙы үтеп барған йылдың лауреаты, йәғни иң яҡшы ҡәләм тибрәтеүсеһе итеп иғлан итмәксебеҙ. Бына улар:**



**Рәүеф Бикташев,** Сибай ҡалаһынан, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, милләт, тарих, рухи тамырҙар мәсьәләләрендә битараф булмаған авторыбыҙ, 5-се, 24-се,36-сы һандарҙағы материалдары өсөн.



**Гүзәл Иҫәнгилдина,** Баймаҡ район гәзите журналисы, уҡыусылар уның ҡатын-ҡыҙ, бала, ғаилә тәрбиәһе тураһындағы мәҡәләләрен яратып уҡый, 3-сө, 14-се, 27-се, 42-се, 50-се, 52-се һандарҙағы материалдары өсөн.



**Айһылыу Ғарифуллина,** Бөрйән районы гәзите журналисы, ерһыу, тәбиғәт, кешеләр яҙмышы тураһында яҙа, 26-сы, 30-сы, 31-се, 44-се һандарҙағы материалдары өсөн.



**Зөһрә Бураҡаева,** йәш яҙыусы, Ш. Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты, республиканың әҙәбиәт һәм сәнғәт мәсьәләләре, шәхестәр тураһында ҡыйыу һәм аналитик фекер йөрөтөүсе авторыбыҙ, 2-се, 6-сы, 9-сы, 15-се, 25-се, 31-се һандарҙағы материалдары өсөн.



**Ләйсән Нафиҡова,** "Киске Өфө" гәзите журналисы, мәғариф һәм мәҙәниәт мәсьәләләре буйынса яҙған мәҡәләләре өсөн.

■ Белеүегеҙсә, "Киске Өфө"лә даими алып барылған конкурстарыбыҙ бар. Беренсеһе - **Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы.** Әйткәндәй, был конкурста ҡатнашыусы авторҙарыбыҙҙың күбеһе - шулай уҡ беҙҙеке, "Киске Өфө"нөкө генә. Ошо конкурс кемдәргәләр беренсе тапҡыр хикәйә кеүек әҙәби жанрҙа ҡәләм тибрәтеп, үҙен һынап ҡарау мөмкинлеге бирҙе, яңы исемдәр асты. Бына быйыл да ике яңы хикәйәсене гәзитебеҙҙең Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы лауреаты тигән исемгә лайыҡлы тип таптыҡ. Улар икеһе лә Сибай ҡалаһынан. Ғөмүмән, Сибай ҡалаһы үҙенең талантлы кешеләре, рухлы донъяһы менән һоҡландыра беҙҙе. Тәүге хикәйәһен яҙып, ижад донъяһына саҡ аяҡ ҡына баҫҡан түбәндәге авторҙарҙы ла уҡыусыларыбыҙ яратып ҡабул итте. Артабан да уңышлы ижад теләйбеҙ уларға.

**Рәмилә Торомтаева,** "Киске Өфө"-нөң 36-сы һанында баҫылып сыҡҡан "Ялбыр" тигән хикәйәһе өсөн.

**Миләүшә Ҡәһарманова,** 47-се һанда баҫылған "Ҡыҫыр" хикәйәһе өсөн.

■ Шулай уҡ даими алып барылған конкурсыбыҙ - **"Алдар менән Ерәнсә ҡоро".** Быйыл тик Өфөгә бәйле мәрәкәләргә генә арналған **"КөлкӨфө"** тигән рубрика ла булдырҙыҡ. Уларҙың икеһе лә был конкурста ҡатнаша ала. Эйе, юморҙың, көләмәстәрҙең иң көттәләре ябай халыҡ тарафынан ижад ителә, күберәк ауылдарҙа тыуа икәнен беләбеҙ. Шуға ла лаҡапсылар, мәрәкәселәр, тапҡыр һүҙләр бөтмәгәндә, башҡорт юморы йәшәйәсәк, тип уйлап, ошо рубрикаларҙы һәм уларға бәйле конкурсты беҙ артабан да, киләһе йылда ла дауам итәсәкбеҙ. Уҡыусыларыбыҙ менән бергә башҡорт юморы китабы яҙыу маҡсатыбыҙ. Быйылғы лауреаттарыбыҙ:

**Әкрәм Ҡәйепколов,** Баймаҡ районынан, 7-се һанда баҫылған ауыл лаҡаптары өсөн.

**Иҫмәгзәм Иҫмәгилев** (Радик Өмөтҡужин), Әбйәлил районынан, "КөлкӨфө" рубрикаһындағы мәрәкәләре өсөн.

■ **Шулай уҡ...** Баҫмабыҙҙы һәр кемдең зауығын ҡандырырлыҡ итеп ижад итеүҙә әүҙемлек күрһәткән авторҙарыбыҙ Фәүзиә Яхина (Усманова), Таһир Ишкинин, Мәрйәм Бураҡаева, Рәшит Шәкүр, Юлай Ғәйнетдинов, Әнүәр Әсфәндийәров, Көнһылыу Ҡотлобаева, Фәүзиә Йәнтилина, Гөлкәй Сәмерханова, Лена Абдрахманова, Әнүзә Йомағолова, Риф Мифтахов, Спартак Ильясов, Әнүәрә Хәйбуллина, Флора Бикембәтова, Юныс Әхмәҙиев, Зәбәйҙә Ҡәләмова, Лира Яҡшыбаеваларға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Барлыҡ гәзит уҡыусыларыбыҙҙы киләсәктә лә битараф булмаҫҡа, уйфекерҙәре менән уртаҡлашып торорға, мөғжизәләргә, яҡшылыҡҡа, изгелеккә ышанырға, үҙең дә изгелектәр ҡылырға, тормоштағы үҙ урының, үҙ тәғәйенләнешең өсөн көрәшеп, еңеүҙәр яулап йәшәргә саҡырабыҙ. Яңы йылда ошо барлыҡ теләктәр тормошҡа ашһын!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*КОТЛАЙБЫҘ!*

**Д**екабрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Ҡырмыҫҡалы районы** Шишмә ауылынан Гөлсинә Мөхәрйәмованы, **Ғафури районы** Ҡауарҙы ауылынан Нәзиә Башированы, **Ауырғазы районынан** Гөлнара Мөхәмәтйәнованы, Фәүзиә Шәйәхмәтованы, Үрге Ләкәнде ауылынан Рәсимә Йәғәфәрованы, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Нажиә Баҡыеваны, **Өфө ҡалаһынан** Рәүиҙә Нәбиеваны, **Әбйәлил районы** Рысҡужа ауылынан Йәүҙә Камалованы, Зөһрә Мәһҙиеваны, Гөлсибәр Яҡуповны, **Мәләүеҙ районы** Ҡотош ауылынан Зифа Вәхитованы, **Баймаҡ районы** Гәзәлбай ауылынан Фәрзәнә Ғәлинаны, Үрге Иҙрис ауылынан Р. Мостафинаны, **Мәсетле районы** Оло Ыҡтамаҡ ауылынан Әнүзә Сираеваны, **Дыуан районы** Арый ауылынан Йәмил Нуриевты, **Балаҡатай районы** Янырбай ауылынан Рәйсә Закированы, **Туймазы районы** Илсембәт ауылынан Зөлфиә Маннановны, **Мишкә районы** Яңы Аҡбулат ауылынан Дуня Александрованы, Бабай ауылынан Г. Ғабдулбариеваны, Яңы Троицкое ауылынан Лилиә Муллағолованы, **Архангел районы** Архангел ауылынан Айгөл Япарованы, **Күгәрсен районы** Аҙнағол ауылынан Владик Ҡырҙасовты, **Учалы районы** Науруз ауылынан Мәфрүзә Камалованы, **Бөрө ҡалаһынан** Мөҙәрис Солтановты, **Бөрө районы** Суслов ауылынан Зилә Князеваны, **Хәйбулла районы** Бакал ауылынан Наҙгөл Иҫәнъюлованы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм ныҡлы сәләмәтлек, күңел тыныслығы теләйбеҙ.

Тормош һеҙҙе көтөлмәгән ҡыуаныстары, бәхет-шатлыҡтары, күңелле мәшәҡәттәре, асыштары менән һөйөндөрөп торһон!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КИЛӘСӘКТЕ КӨТӨП,

## ҡул ҡаушырып ултырма

Өйөң буш булһа ла, күңелең буш булмаһын, өйөң тар булһа ла, күңелең киң булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ғәҙелһеҙлек гел генә ниндәйҙер ҡылынған эш түгел, ҡылынмаған ғәмәл дә булыуы мөмкин.

**(Марк Аврелий).**

Аҡыллы кеше тирә-яғындағыларҙың ихлас хуплауынан бәхетле, ә ахмаҡ ҡул сабыуҙарҙан да ҡәнәғәт.

**(Джозеф Аддисон).**

Алтмыш йәштә кеше өй усағының ҡиммәтен аңлай башлай.

**(Эдвард Литтон).**

Киләсәкте көтөп ултырма, әммә уның ишек ҡағыуына булышлыҡ ит.

**(Антуан де Сент-Экзюпери).**

Бәхетле яҙмыш гәлсәр һымаҡ: матур итеп балҡый, әммә теләһә ниндәй мәлдә селпәрәмә килергә лә мөмкин.

**(Латин мәҡәле).**

"Был мөмкин түгел!" - был ахмаҡтар телендә иң йыш ҡулланыла торған һүҙҙәр.

**(Наполеон Бонапарт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Оҙаҡ ваҡыт океанда йәшәгән бер тәлмәрйен дауыл мәлендә ҡоро ергә эләгә. Шунан һыу эҙләп, бер соҡорға һикерә. Уныһы ҡоҙоҡ булып сыға. Бында ул ғүмер буйы ошонда йәшәгән икенсе бер тәлмәрйенде осрата. "Һин ҡайҙан килеп эләктең бында?" - тип һорай унан был тәлмәрйен. "Океандан", - ти икенсеһе. Бер ваҡытта ла океанды күргәне булмаған ҡоҙоҡ тәлмәрйене: "Ә ул океан тигәндәре ҡоҙоҡтан ҙурыраҡмы?" - тип һорай. "Әлбиттә, ҙурыраҡ", - тип яуаплай океан тәлмәрйене. Был ҡоҙоҡтан да ҙурыраҡ һыу сығанағы булыуы мөмкин түгел, тип уйлаған ҡоҙоҡ тәлмәрйене ышанмай, уның ҙурлығын үлсәм менән күрһәтеп биреүен һорап, ҡоҙоҡтоң сирек тәрәнлегенә сума ла:"Океан ошо тәрәнлектәме?" - тип ныҡыша. "Юҡ",- ти көлә-көлә океан тәлмәрйене. Теге һе ҡоҙоҡтоң яртылаш тәрәнлегенә сума һәм: "Океан ошо тәрәнлектәме?" - тип ҡабатлай. "Юҡ", - ти тағы ла океан тәлмәрйене. Тегеһе ҡоҙоҡтоң төбөнә уҡ төшә һәм һорауын ҡабатлай. Тағы ла кире яуап алғас, ҡоҙоҡ тәлмәрйене сығырынан сыға һәм океан тәлмәрйененә: "Һин алдаҡсы! Бер нәмә лә был ҡоҙоҡтан да ҙурыраҡ һәм тәрәнерәк була алмай!" тип ҡысҡыра.**

**Бына шулай, барыһын да үҙ үлсәме менән үлсәүселәр кешеләр араһында ла етерлек инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 5167